ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 декабрь (акъюлай) 2017

№50 (780)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!**
**2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу аҙағына яҡынлаша. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 554 һум 82 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 584 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 499 һум 08 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Яулыкты хөрмәт итеү...**
ҡанда ла, анда ла һаҡлана әле

3

**Афарин, ҡыпсаҡтар!**

6

**Миллилек - ул нигеҙ,**
нигеҙҙе алып ташлаһаҡ, ҡоролма емереләсәк...

8-9

**Ынтымат Сания инәй**

11-13

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфө урамдарында урынлашкан арт-объекттарға карата ниндәй фекерҙәһегеҙ? Уларҙың кайһыныһы күңелегеҙгә якын? Уларға ниндәй баһалама бирер инегеҙ?

**Ильяс РӘХМӘТУЛЛИН:** Һуңғы бер нисә йылда Өфөнөң төрлө урындарында ҡалҡып сыҡҡан һындарға бик ыңғай ҡараштамын. Үҙем спорт яратыусы булараҡ, "Өфө-арена" янындағы "Көйәрмәндәр трибунаһы" күңелемә айырыуса яҡын. Хоккей яратыусыларҙың уйынға тиклем йәки матчтан һуң бик ихлас фото төшөүҙәрен күреп, был арт-объект барыһына ла оҡшайҙыр, тип уйлайым.

Тағы ла Ғафури урамындағы скверҙа М. Ғафуриҙың шиғыры гравераланған асыҡ китап формаһындағы арт-объект оҡшай. Мәктәп уҡыусыларына арналған был китап белемгә иғтибарҙы йүнәлтеүсе генә түгел, ә республиканың дәүләт телдәрендә яҙылған шиғыры менән ике халыҡтың дуҫлығын күрһәтеп тороусы символ булараҡ ҡабул ителә.

**Сәлимә ИШТУҒАНОВА:** "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янында йәшәйем һәм унын тирәләй күпләп урынлашҡан төрлө арт-объекттар тураһында тик ыңғай фекерҙәмен. Нимә генә юҡ яҡын-тирәлә! Ул тимерҙән эшләнгән ат, механик кеше йәки баш, ғөмүмән әйткәндә, символдарҙың күптөрлөлөгөнә һәм стилистикаһына иҫ китерлек. Шулай ҙа иң оҡшағаны Менделеев һәм СССР-ҙың 50 йыллығы урамдары киҫешендә урынлашҡан ағас тирмән. Муллыҡ һәм уңдырышлылыҡ символын кәүҙәләндергән тирмә тәбиғи материалдан эшләнеүе менән дә отошло.

Шулай уҡ Менделеев урамы буйлап артабан барһаң, "Аҡбуҙат" ипподромына ҡаршы яҡта ҡулдарына Ер шарын тотоп ултырыусы ир һәм ҡатынҡыҙҙы һүрәтләгән үҙенсәлекле арт-объектты күрергә мөмкин. "Тормош планетаһы" тип аталған скульптуралағы Ер шары ҡараңғыла янып тора һәм ошо рәүешле ниндәйҙер йылылыҡ бөркә кеүек. Ғаилә ҡиммәттәренә иғтибарҙы йүнәлтеүгә, ғаилә институтын нығытыуға арнап башҡарған дыр үҙенең был эшен скульптор Хәлит Ғәлиуллин, тигән уйҙар тыуа.

Тағы ла миңә Октябрь проспекты һәм Шәфиев урамдары киҫелешендәге аттар һыны ла оҡшай. Ат башҡорттоң тормошонда айырым, өҫтөнлөклө урын алып тора. Муллыҡ, именлек символы булған, башҡорт ир-егеттәре менән бер бөтөн итеп ҡабул ителгән ат шулай уҡ баш ҡаланың Октябрь районы символдарының береһе. Шуға күрә уларҙың нәҡ ошо районда ҡуйылыуы ла урынлы, тип һанайым.

Ә Бикбай менән Гагарин урамдары киҫелешендәге "Торналар бейеүе" тип аталған скульптура үҙе ни тора! Уны, белеүемсә, Октябрь районының 40 йыллығына бүләк итеп, шулай уҡ скульптор Хәлит Ғәлиуллин эшләгән. Торна мөхәббәт һәм тоғролоҡ символы. Ә ҡанат ҡағып бейеп йөрөгән торналар бәхетле ғаилә гармонияһын һәм матурлығын сағылдырыусы. Скульптура ҡала халҡының иғтибарын йәлеп итеп тороусы матур арт-объект.

**Нурания ИЛЬЯСОВА:** Октябрь проспекты менән Галле округы киҫешкән урында аяғын аяҡҡа һалып, ҡулдарын "йоҙаҡлап", шат йылмайып кешеләргә баҡҡан түңәрәк тимер "кеше" миңә һәр ваҡыт позитив бүләк итә. Бер ваҡыт аяғына баҫыр ҙа, һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашыҡҡан, бөтә ергә лә өлгөрөргә тырышып сапҡан кешеләргә "Туҡтағыҙ! Тирә-яғығыҙҙағы матурлыҡҡа һоҡланығыҙ!" тип өндәшер кеүек. Әле генә беҙҙең ҡалаға килгәнме ул әллә, киреһенсә, оҙон юл алдынан ултырып торғанмы, һәр хәлдә, уны күрһәм, күңелдә ниндәйҙер тыныслыҡ урынлаша. Алыҫ ерҙәргә сәйәхәткә сығып китеп, донъя күреп йөрөгө килә. Ошондай "Илгиҙәр"ебеҙ булыуына ҡыуанам.

Салауат Юлаев проспектында күҙгә әллә ни ташланып бармаған тағы бер матур скульптура бар ине. "Ҡауҙылар ғаиләһе" тип аталған арт-объект үҙ урынында теүәл бер ай тороп ҡалды, кемдер уны урланы. Ҡауҙылар һәр саҡ ғаилә йәме һаналған, ғаилә усағының йылылығын һаҡлаусы образ булып тора ине. Шуға күрә, быҙдай матурлыҡты боҙорға бер кемдең дә ҡулы бармаҫ, һәм ул оҙаҡламай кире үҙ урынына ҡайтыр, тип ышанам.

**Искәндәр СӘҒИТОВ:** Башҡортостан үҙенең балы менән дан тота. Шуға күрә Өфө буйлап бал ҡорттары скульптураларының булыуына бик ыңғай ҡарайым. Шау сәскәнән торған ҙур бал ҡорто һыны Ғафури урамындағы скверҙы биҙәй. Шулай уҡ матур бал ҡорто һыны Рәсәй урамында ла бар. Элек Совет майҙанына ла йыл һайын яҙын "осоп" килер ине. Эшлекле нескә билкәйҙәр ҡалабыҙға тик йәм биреп тора. Уларҙың скульптураһын Өфөнөң һәр районында урынлаштырғанда шәп булыр ине.

**Әклимә ӘМИНЕВА:** Миңә үҙенсәлекле скульптуралар оҡшай. Шулар рәтенә Сельская Богородская менән Маршал Жуков урамдары киҫешендәге "Сәскәләр арбаһы", Октябрь районына ингән ерҙә "Ҡолап барыусы ваза", Ленин урамындағы "Йәшел йөрәк", Дағстан урамында урынлашҡан "Ҡунаҡсыл фонарь" арт-объекттарын индерәм. Уларҙың барыһы ла ҡыҙыҡлы һәм ҡаланың йөҙөн тик яҡшы яҡҡа үҙгәртеүсе, туристар өсөн дә ылыҡтырғыс тип иҫәпләйем.

**Гөлназ САФУАНОВА.**


Өфөләге арт-объекттар.

12+

**✓ Уға ҡушылып: "Киске Өфө" гәзитенең ҡәҙерен, баһаһын илен һөйгән, тарихын, мәҙәниәтен белгән зыялы ғына аңлай, - тип өҫтәгем килә. Мин үҙем, гәзит ҡулыма килеп эләккәс, ғүмер буйы эҙләгән хазинамды тапҡандай ҡыуандым.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҠУЛДАН КИЛГӘНДЕ ЭШЛӘҺӘК...

***Ғәлиә МӨХӘМӘТЙӘНОВА, БР Йәмәғәт палатаһы етәксеһе урынбаҫары:*** Республика Башлығының БР дәүләт телдәрен һәм БР халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса Указына ярашлы, БР Йәмәғәт палатаһы республика буйлап мониторинг үткәрә. Әлеге көндә беҙ Белорет һәм Нефтекама ҡалаларында, Өфө, Ҡырмыҫҡалы, Благовар, Туймазы райондарында урынлашҡан мәғариф учреждениеларында булдыҡ. Мониторинг булғас, беҙ күҙәтеү алып барабыҙ, статистика төҙөйбөҙ. Был тикшереүҙәргә ярашлы, проблемалар йыш ҡына халыҡ тейешле кимәлдә мәғлүмәт алып етмәүе сәбәпле килеп сығыуы асыҡланды. Шуға, тәү сиратта ата-әсәләр менән һөйләшергә, аңлатыу эше алып барырға кәрәк. Мәҫәлән, Дүртөйлө ҡалаһындағы башҡорт гимназияһында 19 ата-әсә башҡорт телен уҡытыуҙан баш тартып, ғариза яҙған, һуңынан уларҙың ун алтыһы яңынан башҡорт телен уҡырға теләк белдергән. Шуның өсөн, ата-әсәләр менән һәр саҡ эштең айышына төшөндөрөп аңлашыу, аралашыу мөһим. Юҡһа, һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһендә барған үҙгәрештәргә бәйле уҡыусылар былай ҙа стресс кисерә, сөнки уларға теге йәки был үҙгәрештәргә күнегеп китеүе барыбер ауыр. Шуға күрә, ата-әсәләр туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен уҡытыуға ҡағылышлы ҡарарҙарҙы уйлап ҡабул итһен ине, тигән теләктә ҡалам.

РБ Йәмәғәт палатаһы эше менән республика буйлап йөрөгәндә йәнә ғаилә институтын нығытыу зарурлығын тоям. Туған телде өйрәтеү, рухи тәрбиә биреү ғаиләнән башлана. Ул ғына ла түгел, ғаилә ағзалары бергәләп театрҙарға йөрөһә, балалары менән башҡортса китаптар уҡыһа, күмәкләп ултырып кино ҡараһа һәм башҡа төрлө эштәрҙе бергә башҡарһа, ғаилә берләшә. Берҙәм ғаиләлә һау-сәләмәт, тәрбиәле, рухлы балалар үҫә. Хәҙер бит күп ғаиләләрҙә ата-әсәләр балалары менән ултырып һөйләшергә лә ваҡыт тапмай, үҫмерҙәр һәм ололар араһында шуға бәйле низағтар, аңлашылмаусанлыҡтар барлыҡҡа килә. Ә балаһы менән һөйләшмәгән ата-әсә нисек итеп уның туған телде уҡыу йә уҡымау мәсьәләһен хәл итә ала? Ул бит хатта бала нимә менән ҡыҙыҡһыныуын да белмәҫкә мөмкин...

Республика Башлығы Указына кире ҡайтып, тағы шуны телгә алырға кәрәк: Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса фонд барлыҡҡа килтерелде. Тимәк, башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән төрлө проекттар, тәҡдимдәр ҡабул ителәсәк һәм тормошҡа ашырыу өсөн ярҙам аласаҡ. Халыҡ йоҡлап ятмаһын ине, тел тураһында ҡайғырып, илап ултырыр урынға аныҡ тәҡдимдәр менән сығыш яһаһын, Башҡорт теле фонды гранттарына үҙ проекттарын тәҡдим итһен. "Ауыл кешеһе нимә эшләй алһын, ул министр түгел", тигәнгә оҡшаш пессимистик фекерҙәр менән һис тә килешмәйем. Сөнки һәр кем үҙ сиратында ниндәйҙер эш башҡара, ҙур эшкә үҙ өлөшөн индерә ала. Был йәһәттән йәш быуын бик әүҙем, беҙҙең башҡорт йәштәре араһында туған теленә һөйөүен һүҙ һөйләп түгел, эше менән дәлилләгән шәхестәр бар. Халҡыма һәр беребеҙ шулай ҡулынан килгәнде эшләһә, берҙәм эштең һөҙөмтәһе лә юғары булыр, тигән фекерҙе еткергем килә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# АҒАС БАШЫН ЕЛ БОРА,

## кеше башын һүҙ бора



**"Киске Өфө" гәзите тураһындағы уҡыусылар фекерен иғтибар менән күҙәтеп барам. Һис арттырыуһыҙ, ҡабартыуһыҙ шундай матур, ыңғай фекерҙәрен яҙалар. Барыһы ла хаҡ, тип, уйымдан ғына уларға ҡушылам.**

Бер һанда шәхси эшҡыуар Даян Мөхәмәҙин: "Мин эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлағыс, атайым: "Улым, ҡорот тәмен башҡорт ҡына белә, ә белмәгән кешегә уны һатып алырға тәҡдим итмә", - тип әйтте..."- тигәйне. Уға ҡушылып, мин дә: "Киске Өфө" гәзитенең ҡәҙерен, баһаһын илен һөйгән, тарихын, мәҙәниәтен белгән зыялы ғына аңлай", - тип өҫтәгем килә. Мин үҙем, гәзит сыға башлағандың икенсе йылына ғына осраҡлы рәүештә ҡулыма килеп эләккәс, ғүмер буйы эҙләгән хазинамды тапҡандай ҡыуандым. Әлбиттә, төрлө фекерҙәр, тәнҡиттәр ҙә ишетелә, ул шулай булырға тейеш тә. Кемдер өгөт-нәсихәт менән генә алға китеп булмай, ти. Марк Аврелий әйткәнсә: "Барыһы ла уйҙарыбыҙҙан тора: ул тормошобоҙҙо йә тамуҡҡа, йә ожмахҡа әйләндерә ала". Эйе, яҡшы, изге өгөт-нәсихәт - яҡтылыҡҡа, үҫешкә үрләтә, насары түбәнгә тәгәрәтә. Гәзит мөхәрририәте үҙенә оло маҡсатты бик аныҡ ҡуйған, шул юлдан ҡыйыу, ышаныслы атлай. 70 йыл буйы диненән, үҙ тарихынан яҙған совет идеологияһында аҙашҡан, арыған, хәлдән тайған бәндәләргә ҡиблаһын табырға, йәнен-күңелен имләргә күпме көс, зиһен, эҙләнеүҙәр, яныуҙар талап ителә! "Киске Өфө" 15 йыл буйы күпме рухи аҙыҡ менән тәьмин итте, һуғарҙы уҡыусыларын! Рухи ҡиммәттәрҙе - иман-әхлаҡты төрлө ысул менән халыҡҡа еткереүе һөҙөмтәһендә күптәрҙең уйҙары ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе,

Минең ҡулда "Киске Өфө"нөң 45-се һаны. Тарихсы Нәзир Ҡолбахтин: "Беҙҙең халыҡ күсмә түгел, ә сауҙагәр ҙә, игенсе лә, сәнәғәтсе лә булған", - тип яҙа. Мәҡәләнең башы уҡ халыҡтың кем булғанын аңғартып тора. Шулай уҡ унда һүрәтләнгән тарихи хаталар, яуланғанды ослап ҡуя алмау тураһындағы хәҡиҡәт - был йәштәргә кәрәк иҫкәртеү. Юҡҡа әйтмәйҙәр бит: тарих - ҡорал. Тарихыңды белмәйһең, икенсе сит сығанаҡтарҙан уҡыйһың икән, халыҡ мәнфәғәтен яҡлау урынына милләтеңә золом ҡылаһың, йә өндәшмәй генә тегеләрҙең ҡарары менән килешәһең. Тимәк, беҙгә, ололарға, тарих менән үҙебеҙгә лә ҡыҙыҡһыныу, шуны ғаиләлә балаларыбыҙ күңеленә бәләкәйҙән һеңдереү зарур.

Был һандағы һәр мәҡәлә - Лилиә Мусина менән "Хәрефтәр донъяһы" тигән әңгәмә лә, Хәйҙәр Тапаҡовтың "Тәүбә" тигән әҙәби әҫәре лә, Денис Өмөтбаев сәйәхәтнамәһе лә, "Юлдаш" радиоһы тураһындағы әңгәмә лә - барыһы ла фекер һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт еткерә уҡыусыһына. Әлфиә Батталованың "Үҙ-үҙеңә һаҡсы бул!" тигән сығышындағы: "...Ошо хәҙисте уҡығас, сәсем үрә торғайны, сөнки мин үҙемдең ... ғәйбәтсе икәнлегемде белдем", - тигән һүҙҙәре һине уятып ебәргәндәй була: ғәйбәттең иң оло гонаһ икәнлеге, Ҡөрьән, хәҙистәр уҡып, тәртибебеҙҙе, башыбыҙҙы ҡиблаға борорға зарур булыуы тураһында бик тос әйткән автор.

Эйе, аңлы башҡорт зыялылары халыҡты иманға, милли рухына, асылына ҡайтарыу өсөн эшләй, яна, тырыша. Һөҙөмтәһе юҡ түгел, бар бит. Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан Салауат Хәмиҙуллиндың "Тарихи мөхит" тапшырыуын ҡарап, мин белгәндән генә бер нисә ғаилә үҙҙәренең башҡортлоғон танып, башҡорт телендә һөйләшә башланылар. Мин үҙем дә шәжәрәмде белмәй инем. Хәсәновтарҙың шәжәрә байрамын үткәрәбеҙ, тигәс, апайым Флүрә Йәрмөхәмәтова архивҡа барып, нәҫел-тамырҙарыбыҙҙы юллағанда, Бүгәсәү яуында ҡатнашҡан полковник Ҡыуат Хәсәновтың беҙҙең оло ҡартатай булыуын асыҡланыҡ. Нәзир Ҡолбахтин әйткәнсә, олатайҙар үткән яу юлдарын өйрәнәһе лә өйрәнәһе әле. Нимәгә кәрәк ул үткәндәр, тигәндәр ҙә бар. Шәжәрә - ул тарих, ә тарих - ҡорал. Халыҡ мәнфәғәтен яҡларлыҡ шәхестәребеҙ тарихын, телен, йәшәү рәүешен төплө белһә, халыҡ яҙмышын хәл итерлек эштәр башҡара ала. Белмәһә инде - ҡоралһыҙ көрәшсегә әйләнә.

Беҙ әллә нимә талап итеп, кеше баҫырға йыйынмайбыҙ. Рәсәй эсендә үҙ утрауыбыҙҙы булдырып, үҙ телебеҙҙә уҡырға, һөйләшергә, йәшәргә генә бар ынтылыш-теләктәребеҙ. "Йәмғиәткә йоғонто яһар өсөн тәүҙә идея кәрәк, унан ул тойғоларға әйләнергә тейеш", ти аҡыл эйәләре. Эйе, минеңсә, "электр бағаналары", йәғни идея-терәүҙәр бар - сымдарын һуҙып, халыҡҡа ут бирергә, 70 йыл дауамында ҡоро һауыттай бушап ҡалған күңелдәргә бөтөнләгө емерелә яҙған тарихи, дини, ижтимағи ярсыҡтарҙы сүпләп индереп, милли аң һеңдереү, яңы фекерҙе, юлды күрһәтеү генә ҡала. Ә бына ошо милли йәмәғәт базаһын яңыртыу, уятыу өсөн ғәйәт ҙур эш башҡара "Киске Өфө". Фәүзиә Мөхәмәтшина әйтмешләй, "Ыңғай шытымдарҙы күреп, уларҙан күңел ҡыуандырғыс үҫенте килтереп сығарыу һәр беребеҙ бурысы..." тип ижад итә был баҫма. Һүҙемде тамамлап, "Киске Өфө" гәзитен алдырмағандарҙы, уҡымағандарҙы йәлләүем тураһында ла әйтеп ҡуйайым. Йәл шул, үҙҙәрен күпме рухи аҙыҡтан мәхрүм итәләр бит! "Үҙегеҙҙе өҫкә тартҡан кешеләр менән уратып алығыҙ, донъя былай ҙа аҫҡа тарта торғандар менән тулы", - тигән бер аҡыллы кеше. Ошо аҡылға эйәреп, юғарыға ҡарап фекер итергә өйрәткән баҫма менән дуҫлашырға ашығығыҙ, тип кенә әйтке килгәйне.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов уҙғарған Башҡортостан Хөкүмәтендәге ултырышта 2030 йылға тиклемге осорҙа Төбәктең социаль-иҡтисади үҫеше раҫланды. Өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең иң мөһиме - кешелек потенциалын үҫтереү индексы һәм халыҡ иҫәбенә тулайым төбәк продукты. Иҡтисадтың реаль секторын үҫтереү йәһәтенән маҡсатлы күрһәткестәр сифатында хеҙмәт етештереүсәнлеге, халыҡ иҫәбенә инвестициялар, ауыл хужалығы продукцияһының үҫеше билдәләнгән.

✓Башҡортостан халыҡты социаль хеҙмәтләндереү өлкәһенә дәүләткә ҡарамаған ойошмаларҙы йәлеп итеүен дауам итә. Өфөлә үткән Волга буйы федераль округы төбәктәре дәүләт власы закондар сығарыу (вәкиллекле) органдары ассоциацияһы ултырышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов хәбәр итеүенсә, республикала ошо эш менән 118 коммерцияға ҡарамаған ойошма һәм хужалыҡ йәмғиәте шөғөлләнә. Һуңғы өс йылда коммерцияға ҡарамаған ойошмалар иҫәбенә социаль хеҙмәткәрҙәр һаны 2 мендән 3 мең кешегә тиклем артҡан.

✓Рәсәй хөкүмәте 2018 йылдың 1 ғинуарынан бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын 4 процентҡа күтәрергә ҡарар итте. 2019 һәм 2020 йылдарҙа ла бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын 4 процентҡа индексациялау ҡаралған. 4 процент 2017 йылдың йомғаҡтары буйынса өлгәшеү ихтималлығы булған инфляция күләменән юғарыраҡ. Йыл йомғаҡтары буйынса инфляция күләме 3 проценттан аҙыраҡ буласаҡ, тип белдерҙе 30 ноябрҙә Рәсәй телеканалдарына биргән интервьюһында ил хөкүмәте премьер-министры Дмитрий Медведев.

✓Өфөлә боҙ миҙгеле асыла. Тиҙҙән балалар ҙа, өлкәндәр ҙә һырғалаҡтарҙа рәхәтләнеп шыуа аласаҡ. Асыҡ һауалағы тәүге боҙ майҙансығы Ғафури исемендәге паркта урынлашҡан. Декабрь аҙағына тиклем Якутов паркында, "Аҡбуҙат" ипподромында, Урмансылар, Машина эшләүселәр парктарында, Гастелло исемендәге, "Төҙөүсе" стадиондарында, Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркында, "Локомотив" стадионында һырғалаҡтар асыу күҙаллана. Бынан тыш, мәктәп биләмәләрендә, ихаталарҙа хоккей майҙансыҡтары эшләй.

✓Олимпия комитеты йыйылышынан һуң 2018 йылғы Уйындарға флагһыҙ барырға булған рәсәйҙәрҙең ҡарарын хупларға ҡарар иттеләр. Алдан Рәсәй Президенты Владимир Путин Олимпия уйындарында нейтраль флаг аҫтында сығыш яһарға булған рәсәйҙәрҙе шулай уҡ хупланы.

✓ *Уға яулыҡтың, ҡатын-ҡыҙҙың башын яулыҡ менән ябыуының ер, космос, инәлек энергияһы менән, дин һәм башҡа фәлсәфәләр аша аңлатып тороу ҙа урынһыҙҙыр.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ...*

**"Аҡ яулыҡлы инәйҙәрем, һеҙҙе һағынам!" тип аталған баш менән бер хат килде редакцияға. Баймаҡ районынан Зөһрә апай яҙа уны: "Олоғая барған һайын үҙемдән олораҡ булған ҡатын-ҡыҙҙарға иғтибар итә, уларҙың төҫ-башына күҙ һала башланым, - тип башлана яҙма. - Тик миңә улар оҡшамай, кейемдәре лә, фиғелдәре лә. Элекке инәйҙәр яулыҡлы ине, улар уны яҙып ебәреп, үңәс-елкәләрен ҡаплап тороп ябына инеләр. Иҫәпләп ҡараһаң, күптәренә ул саҡта әле илле йәштәр самаһы ғына булған! Хәҙергеләр 70-75-тә лә сәстәрен бөҙрәләтеп, яланбаш йөрөй. Ул ғына ла түгел, малайҙар прическаһына күсеп бөттөләр. Яулыҡты ла аят-маҙарҙа ғына йөрөтөү йолаһына әйләндереп алдылар. Йәйге күлдәктәрен дә әйтер инем. Инде олоғайғас, бәлйерәгән балтыр, беләк иттәрен былҡылдатып, сирыш үңәстәрҙе асып, итәкһеҙ-еңһеҙ күлдәктәрҙә, ағарып-һирәгәйгән башты ялбыратып йөрөү ни төҫтөр? Икешәр метр ситсанан йәки башҡа тауарҙан тектер уңайлы итеп ике күлдәк, уҙа барһа, өсәүҙе - әллә күпмегә етә..." Бына ошондай эстәлекле хат: "Өләсәйҙәр, әйҙәгеҙ, яулыҡлы һәм күлдәкле булайыҡ", - тигән саҡырыу менән тамамлана.**

# ЯУЛЫҠТЫ ХӨРМӘТ ИТЕҮ...

## ҡанда ла, аңда ла һаҡлана әле



Ошо хатты уҡығас, бер хәлде иҫкә төшөрҙөм. Йыш ҡына кистәрен Салауат Юлаев һәйкәле янына ял итергә сыға ул әбей. Ябай ғына оҙон күлдәктә, яулыҡта була ул. Күптәр уға иғтибар итә һәм йыш ҡына хәйер бирергә ынтыла. Алмай инәй. "Аҡса һорап ултырмайым бит, һеҙҙең кеүек үк ял итеп ултырам", - тип уңайһыҙланыуын белдерә. Тик халыҡтың реакцияһы ҡыҙыҡ шул: йәнәшәләрендәге салбарҙа, яланбаш йөрөгән ҡыҙыл иренле инәйҙәргә төшмәй күҙҙәре, ә әлеге тыйнаҡ әбейгә ҡарап, күңелдәрендә ниндәйҙер йылы хистәр тыуа, күрәһең, - ярҙам иткеләре, ихласлыҡ күрһәткеләре килеп, хәйер һоналар. Йәғни, әбейҙең тыйнаҡ, инсафлы төҫө үҙе үк йәшерәк быуында яҡлауға, изгелек ҡылыуға ынтылыш уята. Ҡалайтаһың, йәштәребеҙ ҙә изгелек ҡылыуҙы аҡса, хәйер һоноуҙа ғына күрә шул...

Әлеге Баймаҡтан килгән хат миңә бик оҡшаны, сөнки үҙем дә ошо тема тураһында уйланып йөрөй инем. Хаттағы фекергә ауаздаш уйҙарым башыма бигерәк тә юлда, концерт-маҙарға, осрашыуҙарға барғанда, оло апайҙарға ҡарап ултырып әсенгәндә килеүсән. Беҙҙең әлеге оло быуын ҡатын-ҡыҙы коммунистик идеялар нигеҙендә тәрбиәләнгән, ғүмер иткән. Уларҙың аңында революция, азатлыҡ, хөрриәт һәм башҡа төшөнсәләр тап ана шул яулыҡ ташлау, сәсте ҡырҡыу, тәнде ялanғасландырыу кеүек анығ хәлдәр, йәшәйеш аша формалашҡан. Был йәшәйеш күп йылдар дәүерендә инде уларҙың ҡанын ярайһы ағыулап өлгөргән һәм быға улар ғәйепле лә түгел. Бөгөн килеп, ул быуынды ҡапыл яулыҡлы итеү, баштарын ҡаплатыу уларҙың иркен сикләү кеүек. Был үҙенә күрә психологик барьер. Апайҙар әхлаҡ нормаларына һыймағандан түгел, ә аңдары икенсе төрлө ҡалыплашҡанға ябына алмай яулыҡты. Мәҫәлән, ул ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгәндә яланбаш йөрөгән дә, ни өсөн ҡартайғас ҡына үҙ принциптарына ҡаршы килергә йә яһалма ҡыланырға тейеш әле? Ул бер ниндәй тәртип тә боҙмай, яулыҡлы күптәрҙән намыҫлыраҡ тормош юлы үткән, хеҙмәт иткән. Элекке уҡытыусы, шикһеҙ, шулай уйлай... Уға яулыҡтың, ҡатын-ҡыҙҙың башын яулыҡ менән ябыуының ер, космос, инәлек энергияһы менән, дин һәм башҡа фәлсәфәләр аша аңлатып тороу ҙа урынһыҙҙыр. Асылда, әлеге хәҡиҡәтте аңлар хәлдәге оло кеше (ололар ғына ла түгел) үҙе лә яйлап яулыҡҡа тартыла, әлбиттә.

Беҙ мәсьәләнең икенсе яғын - иң ябай яғын ғына ҡарайыҡ. Быуындар араһындағы айырмалыҡты сағылдырып торған өлөшөн генә. Мәҫәлән, автобусҡа күлдәкле, яулыҡлы инәй килеп инә икән, иманым камил, һикереп тороп урын бирәсәктәр. Ә ҡыҫҡа салбарҙағы, яланбаш, буянған әбейгә иғтибар итеүсе булмаҫҡа ла мөмкин. Бөгөнгө йәштәрҙең аңлап ҡабул итеүгә ҡарағанда күреп ҡабул итеү функцияһы яҡшыраҡ үҫешкән. Был ҡалала ғына түгел, ауылда ла, ғөмүмән, бөтә ерҙә лә шулай. Хатта бала ла әсәһен яулыҡ ябынғас ҡына ысынлап оло кеше итеп ҡабул итә башлай бит. Яулыҡтағы әбейгә ҡарата уның һөйөүе лә, йәлләүе лә, ихтирамы ла икенсе төрлөрәк булып китә.

Нисек кенә тимә, эш урындарында, урамда осраған яулыҡлы апайҙарға беҙҙең ҡараш та, мөнәсәбәт тә башҡа. Костюмдарына, күлдәктәренә иш итеп, прическаларына ҡулайлаштырып, түбәләрен ҡаплап яулыҡ һалған апайҙар барыбер ҙә үҙҙәренә ҡарата айырым хөрмәт уята. Сөнки беҙҙең аңда ла, ҡанда ла "яулыҡты хөрмәт итеү" тигән ҡанун юғалмаған әле. Шуға ла баяғы хат авторының:" "Өләсәйҙәр, әйҙәгеҙ, яулыҡлы һәм күлдәкле булайыҡ", - тигән саҡырыуына ҡушылғы килә ул... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, мөхтәрәм гәзит уҡыусыларыбыҙ? Фекерҙәр көтәбеҙ.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***17-се күҙәтеүем.*** "Юлдаш" радиоһы егеттәре "Ленинды күмергәме-юҡмы?" тигән темаға һөйләшеү ойошторҙо. Тауыштар 50-гә 50 самаһы менән уртаға бүленде. Мин уның һаман да ерләнмәүен илебеҙҙең һаман да үҙ юлын таба алмауында күрәм. Беҙҙең менталитет һаман да баҡыйлыҡҡа күсеүсене ер өҫтөндә ҡалдыралыр. Кем белә, бәлки, олигархтар киләсәктә уның кәүҙәһен үҙҙәренең байлығын һаҡлап ҡалыр өсөн файҙаланыр, бәлки, шуның өсөн дә тоталарҙыр. Ҡытай халыҡ республикаһы парламентында, мәҫәлән, 3 мең депутаттың барыһы ла долларлы миллиардер. Мин иһә ошо дүрт юллыҡты яҙҙым:

*Ильичты, тим, ерләмәйсә*
*Ҡотолмаҫ күңел бәйҙән.*
*Аллаһ бирәү, тик Ул ғына*
*Үлмәй ҙә, күмелмәй ҙә.*

***18-се күҙәтеүем.*** Беҙ һәр ваҡыт кемделер йәлләйбеҙ, ярҙам итәбеҙ, бынан "Минән дә ауырыраҡ хәлдәге кеше бар, минеке шөкөр", тип күңел тыныслығы табабыҙ. Ошоно файҙаланып аҡса эшләүселәр ҙә бар. Бер көн "Мир" фирмаһы туҡталышында бер егет: "Яңы ғына төрмәнән сыҡтым, Черниковкаға ҡайтып етерлек аҡса кәрәк, ярҙам итегеҙ", - тип ялбарҙы. Юллыҡ аҡса бирҙем. Иртәгәһенә тағы ла шул ерҙә үк йөрөп ята егетем. Был юлы: "Мине талап киттеләр, юллыҡ аҡса бирегеҙ", - тине. Мин уға: "Нимә, һин кисәнән бирле ҡайтып етә алмай йөрөйһөңмө?"- тигәйнем, шылғаяҡ ҡапыл юҡҡа сыҡты. Ситкәрәк киттем дә, туҡталышты күҙәтә башланым. Мине киткән тип белеп, егет тағы пәйҙә булды ла, һорана башланы. Яҡынса 5 минут самаһы ваҡыт эсендә 10-лаған кеше янына барып, шуларҙың яртыһын ышандырып, күпмелер аҡса һыға алды был. Автобуста йөрөү хаҡының 25 һумлығын иҫәпкә алғанда, теоретик яҡтан, яҡынса 1 сәғәттә 1500 һум, 10 сәғәттә плюс-минусы менән 10 мең, 1 айҙа 300 мең һум аҡса йыя алыры шикһеҙ.

"Аграр университет" туҡталышының ер аҫты үткәлендә бына 3 йыл инде бер кеше хәйер һорашып ултыра. Яҙлы-көҙлө, йәйле-ҡышлы миҙгелгә ҡарап ыҫпай кейенә ул, термос менән сәй эсә. Ҡыҫҡаһы, илебеҙҙә яңы һөнәр эйәләре барлыҡҡа килә...

***19-сы күҙәтеүем.*** Һәр яңы нәмә күптән онотолған иҫке, донъяла яңылыҡ юҡ, тиҙәр. Шулайҙыр. Мәҫәләнгә миҫал өсөн интернетты алайыҡ. Элек ул ни рәүешле булды икән? Кешеләр араһындағы мәғлүмәти-сәнғәти-мәҙәни-социаль бәйләнеш функцияһын беҙҙең халыҡта зат (нәҫел, ырыу) институты үтәгән. Ырыу башлығы, аҡһаҡал "интернеттың системный администраторы" функцияһын башҡарған, беҙ туғанлыҡ менән берҙәм, татыу, көслө булғанбыҙ. Тимәк, интернет беҙгә онотолоп барған зат институтын тергеҙергә булышлыҡ итеүсе бынамын тигән сара. Тик уның бер генә кире яғы бар шикелле: мөнәсәбәттәр тик виртуаллектә генә тороп ҡалмаһын ине, сөнки беҙ интернет аша "дуҫ" булғандар менән осрашҡан саҡта: "Ә, таныным, беҙ бит дуҫтар, ярар, мин һиңә яҙырмын, лайк ҡуйырһың, репост яһарһың..." - тип тиҙерәк хушлашыу яғын ҡарайбыҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Синоптиктар декабрҙең икенсе декадаһында һауа торошоноң ниндәй буласағын һөйләне. Рәсәй Гидрометеорология мәғлүмәттәре буйынса, 10-20 декабрҙә республика биләмәһендә уртаса тәүлек температураһының норманан 1-2 градусҡа юғары, республиканың көньяғында нормаға ярашлы булыуы көтөлә.

✓Ватан Геройҙары көнө сиктәрендә Советтар Союзы Геройҙары, Рәсәй Федерацияһы Геройҙары, Изге Георгий, Дан ордендары кавалерҙары, шулай уҡ Социалистик Хеҙмәт Геройҙары ҡотлауҙар ҡабул итте. Ошо уңайҙан Өфө ҡала хакимиәте вәкилдәре Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры Евгений Шерстобитовҡа иҫтәлекле бүләк тапшырҙы. Евгений Павлович 40 йыл ғүмерен Өфө синтетик спирт заводына бағышлай.

✓Башҡорт дәүләт университетының инженер факультетынан технологик машиналар һәм ҡорамалдар кафедраһы студенты Тимур Хәфсетдинов Мәскәүҙә уҙған "Рәсәй 2035" Бөтә Рәсәй конкурсында беренсе урын яуланы. Быйыл көҙгөһөн илдең бөтә төбәктәренән 1000 йәш кеше 2035 йылға тиклем Рәсәйҙең социаль-иҡтисади үҫеш стратегияһын әҙерләүҙә ҡатнашты, улар араһында Башҡорт дәүләт университеты студенты ла булды. Ситтән тороп ойошторолған этапта еңеүсе булып, егет финалға Мәскәүгә юлланды.

✓2019 йылда Өфөләге 53-сө Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарында 2 мең самаһы спортсы ҡатнашасаҡ. Ул туғыҙ дисциплина (еңел атлетика, футбол, йөҙөү, фехтование, пляж волейболы, баскетбол, грек-рим көрәше, ҡаяға үрмәләү, тхэквондо) буйынса ярыштарҙы үҙ эсенә ала. Бынан алда, 2013 йылда, Өфө VI Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул иткәйне. Ярыштарҙа 20 илдең 60 ҡалаһынан йыйылма командалар ҡатнашты. Спортсылар спорттың ете төрө буйынса 10 миҙал уйнатты.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр 13 декабрҙән 14-нә ҡарата төндә йылдың иң сағыу йондоҙ ямғырын - Геминиданың метеор ағымын күҙәтте. Нәҡ ошо төндә метеор ағымының иң ҙур әүҙемлеге күҙәтелде, әммә 19 декабргә тиклем йондоҙҙар атылыуын күрергә һәм теләктәр теләргә мөмкин.

**“Башинформ”дан.**

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



# БЕҘҘЕҢ ҺОРАУҘЫ ЛА ИШЕТТЕ...

**Кесе йома Рәсәй Президенты Владимир Путин 13-сө матбуғат конференцияһын уҙғарҙы. Был сара быйыл һайлау алды осорона тура килде. Владимир Владимирович быға тиклем 2018 йылдың 18 мартына тәғәйенләнгән һайлауҙарҙа Рәсәй Президенты вазифаһына кандидат булып дәғүә итәсәге тураһында белдергәйне.**

Матбуғат конференцияһында Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән йыйылған киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре В. Путинға туранан-тура һорау биреү мөмкинлегенә эйә. Әлбиттә, мәлдән файҙаланып, төрлө темалар буйынса һорауҙар яңғыраны һәм уларға яуаптар алынды. Өфөнөң "Йәмәғәт электрон гәзите" хәбәрсеһе Станислав Шахов ил башлығына төбәктәрҙең федераль бюджеттан аҡса алыу мәсьәләһенә ҡағылышлы һорау бирҙе.

- Һәр төбәктең баш ауырыуы - федераль бюджеттан аҡса алыу. Шартлы рәүештә әйткәндә, Башҡортостан 10 миллиард һумды үҙәккә күсерә, һуңынан бер өлөшөн кире алыр өсөн федераль министрлыҡтарҙың юлын тапай. Ошо йәһәттән, төбәктәргә үҙҙәре эшләгән аҡсаны күберәк ҡалдырыу өсөн һалым реформаһын үткәрергә уйламайһығыҙмы? Мәҫәлән, файҙалы ҡаҙылмаларҙы табыуға һалынған һалымдың 5 процентын. 2010 йылға тиклем Һалым кодексында ундай норма бар ине, һуңынан ул юҡҡа сыҡты. Был урындарҙа средстволарҙы һөҙөмтәлерәк ҡулланыу мөмкинлеген бирер ине, сөнки федераль средстволар һуң килә, шул сәбәпле юлдарҙы ремонтлау ҡар яуғас, декабрҙә генә башлана.

Владимир Путин был мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙар барыуын һәм төбәктәрҙең бурысын реструктуризациялау буйынса ҡарар ҡабул ителеүен белдерҙе. Шулай уҡ халыҡ, ниндәй өлкәлә йәшәүенә ҡарамаҫтан, бер тиң шарттарҙа йәшәргә тейешлеген һәм йылдар дауамында бюджеттарҙы тигеҙләү алып барылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ә субъекттар төрлөсә үҫешкән һәм бында уларҙың гәйебе юҡ. Бөгөн 12 донор субъекттың килемен башҡа төбәктәргә бүлеү ғәҙелерәк.

Реструктуризацияға килгәндә, илдең барлыҡ төбәктәренең кредит бурыстары ете йылға 5 процентҡа реструктуризацияланасаҡ. Һалым базаһын инфляция кимәлендә тәьмин иткән субъекттар 12 йылға кисектереү аласаҡ. Был уларға өҫтәмә рәүештә 430 миллион һум дөйөм файҙа алыу мөмкинлеген бирәсәк. Ундай субъекттар илдә 3-4 кенә.

Татарстан журналисының һорауы ла бөгөнгө көндә иң актуаль булған телдәр уҡытыу мәсьәләһенә һәм төбәктәрҙе үҫтереү тураһында таралған имеш-мимешкә ҡағылды. Президент илдә милли мәсьәләлә бер ниндәй киҫкенлек булмауын белдерҙе.

- Беҙҙең маҡсат - барлыҡ балаларға ла тигеҙ шарттар булдырыу. Әгәр кешеләр туған телен белеп тә, рус теленән артта һөйрәлһә, был Татарстан балалары өсөн насар булыр ине. Кешеләргә туған телен өйрәнеү мөмкинлеген бирергә кәрәк. Мәҙәниәттең һәм телдәрҙең күп төрлөлөгө - беҙҙең байлығыбыҙ.

Төбәктәрҙе үҫтереү мәсьәләһенә килгәндә, дәүләттең ундай планы юҡ, һәр халыҡ - ҙурмы ул, бәләкәйме, Рәсәйҙең башҡа халыҡтары менән бергә йәшәү юлын үҙе һайлай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ БУЛА



**2018 йыл Башҡортостанда Ғаилә йылы тип иғлан ителде. Был турала республика Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәк Хөкүмәте ултырышында белдерҙе.**

Республика етәксеһе әйтеүенсә, Башҡортостанда ярты миллиондан ашыу балалы ғаилә йәшәй. Уларға булышлыҡ итеү өсөн республика ҡаҙнаһынан йыл һайын 10 миллиард һумға яҡын аҡса йүнәлтелә. Был йәһәттән республика тәжрибәһе федераль кимәлдә лә танылыу тапты.

- Шуға бәйле, 2018 йылды республикала Ғаилә йылы тип иғлан итеү тәҡдимен индерәм. Әле минең ҡушыуым буйынса тейешле указ әҙерләнә. Был ҡарар быйыл ишле ғаиләләргә дәүләт ярҙамы сараларын көсәйтеү йәһәтенән Рәсәй Президенты иғлан иткән Балалыҡ ун йыллығы бурыстарына тулыһынса тап килә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов. - Хөкүмәткә Ғаилә йылының төп сараларын әҙерләү, тейешле министрлыҡтарҙы һәм ведомстволарҙы, район һәм ҡала хакимиәттәрен, предприятиеларҙы, йәмәғәт ойошмаларын уны тормошҡа ашырыуға йәлеп итеү бурысы йөкмәтелә. Ошо күп яҡлы эште бергәләп ойоштороорға һәм алып барырға кәрәк. Ғаилә йылының саралары ғаилә институтын үҫтереү, ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу буйынса дәүләттең, йәмғиәттең һәм бизнестың көсөн берләштерергә тейеш.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2018 йыл Рәсәйҙә Ирекмәндәр йылы тип иғлан ителде. Рөстәм Хәмитов һыҙҙәренсә, ошо ике йүнәлеш - волонтерлыҡ һәм ғаилә сәйәсәте - бер-береһен тулыландырырға тейеш.

- Волонтерлыҡ ирекмәндәрҙең төрлө форумдарҙа, сараларҙа ҡатнашыуы ғына түгел, тәү сиратта, көн һайын, шул иҫәптән ғаилә именлеге, йәмғиәтебеҙҙең ячейкаһын үҫтереү өсөн даими эшләү икәнлеген беләбеҙ, - тип билдәләне республика Башлығы. - 2018 йыл йомғаҡтары буйынса файҙа алырбыҙ һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшербеҙ, тип ышанам. Ләкин бының өсөн, әлбиттә, эшләргә кәрәк.

# ЙӘШ БЕЛГЕСТӘР ӨСӨН



**Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышын үҫтереү буйынса I форум даирәһендә ауыл хужалығы белгестәрен йәлеп итеү һәм беркетеү буйынса пландар билдәләнде.**

Хеҙмәт ресурстары темаһы буйынса түңәрәк ҡор барышында Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы дәүләт ярҙамы механизмына киләһе үҙгәрештәр индерҙе:

- юғары белемле белгестәр өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе - 500 мең һумғаса, урта профессиональ белемле белгестәр өсөн 300 мең һумға саҡлы арттырыу;
- эш биреүсенән уртаса айлыҡ эш хаҡын уртаса тармаҡ әһәмиәте кимәленән кәм булмауын талап итеү;
- муниципалитеттарға йәш белгестәргә ярҙам итеү программаһын булдырыуға йөкләмә биреү;
- эш хаҡына 7000 һәм 4000 кимәлендәге айлыҡ өҫтәмәләрҙе бөтөрөү;
- дәүләт ярҙамын алыусылар һанын 140 кешегә саҡлы кәметеү - юғары белемле 70 белгес һәм урта профессиональ белемле 70 белгес.

Был шарттарҙы тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә йәш белгестәрҙе тармаҡта нығытыу 2025 йылға тиклем 20 проценттан 50 процентҡа саҡлы артасаҡ тип күҙаллана, ә ауыл хужалығы предприятиеларында кадрҙар ағымы 20 проценттан уҙмаясаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ағымдағы йылдың август айында Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының киңәйтелгән кәңәшмәһендә йәш аграрийҙар өсөн дәртләндереү сараларын 500 мең һумға ҡәҙәр арттырырға тәҡдим итте.

# БЕРӘҮҘӘР ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘ...

**Өфөлә Иван Якутов исемендәге паркты реконструкциялау дауам итә. Һуңғы ике йылда бында ҙур күләмле эш башҡарылған. Иң оло паркты төҙөкләндерергә эшҡыуарҙар, ҡаланың муниципаль предприятиелары ярҙам итә.**



Әлеге ваҡытҡа реконструкцияның икенсе этабы тамамланған: йәйәүлеләр юлдары реконструкцияланған, 1500 метр оҙонлоғондағы велосипед юлы төҙөкләндерелгән, парк аллеяларында һәм Һалдат күле тирәләй яҡтыртыу системаһы яңыртылған. Һыу сығанағының яр буйы тулыһынса ремонтланған. Шулай уҡ бында ағастар ултыртылған, газондар һалынған, клумбалар һәм сәскәлектәр булдырылған. Барлыҡ эштәр физик мөмкинлектәре сикләнгән категория ихтыяжын иҫәпкә алып башҡарылған. Паркта заманса ҡоралмалдар һәм резина ҡатламы менән көпләнгән балалар майҙансыҡтары йыһазландырылған, яҡтылыҡ терәктәре һәм видеокүҙәтеү камералары өсөн терәүҙәр ҡуйылған, төргәкле газон һалынған, евроконтейнерҙар, төрлө формалағы эскәмйәләр, вандализмға ҡаршы яҡтыртҡыстар ҡуйылған. Төп аллеяла паркты уҙған быуаттың 50-се йылдарында биҙәгән композициялар нигеҙендә эшләнгән скульптуралар биҙәй.

Киләһе йылда паркта ике төп этап тормошҡа ашырыласаҡ - дөйөм туҡланыу урындары һәм аттракциондар парктары реконструкцияланасаҡ. Ошоға бәйле муниципалитет граждандарҙың парк архитектураһы, ҡала мөхитен төҙөкләндереү һәм уның дизайны буйынса барлыҡ тәҡдимдәрен тыңларға әҙер. Ләкин ҡала халҡы араһында парктағы төҙөкләндереү эштәрен өнәмәүселәр ҙә юҡ түгел. Иван Якутов паркында вандалдар тағы ла Һалдат күле майҙанындағы дүрт декоратив яҡтылыҡ сығанағын ватҡан, гранит парапеттың мөйөшөн емергән. Шулай уҡ скульптураларға ла зыян килтерелгән. Күл эргәһендәге клумба-

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Яңы йылса Башҡортостан-2018" проекты эшләй башланы, йәғни Ҡыш бабай тирмәләр буйлап йөрөй һәм байрам сараларында ҡатнаша. Быйыл биш ҡунаҡ тирмәһе ҡуйыла: Өфөлә, Бөрөлә, Стәрлетамаҡта, "Ҡандраҡүл" һәм "Абҙаҡ" тау саңғыһы комплекстарында. 17 декабрҙә иртәнсәк Ҡыш бабай "Урал легендаһы" поезында Абҙаҡҡа юл тота. 18 декабрҙә Ҡыш бабай Өфөләгә үҙәк ҡунаҡ тирмәһенә килә, 24-ендә республиканың көньяҡ районларына юл ала.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтындағы Башҡорт теленең машина фонды хеҙмәткәрҙәре менән бергә статистика тәржемәһен ойоштороуҙа ҡатнаша. Хәҙер һәр яңылыҡ һөйләмләп һүтелә һәм Glosbe бөтә донъя универсаль тәржемә параллель билингваль текстарҙың мәғлүмәттәр базаһына индерелә.

✓Быйыл Кремлдә Яңы йыл ширшыһы 26 декабрҙә үтә. Башҡортостандан Мәскәүгә 140 кешенән торған делегация бара. Уларҙан 114 кеше 8-13 йәштәге уҡыусы һәм 28-е оҙатып барыусы (педиатрҙар, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар). Дәүләт Кремль һарайында уҙасаҡ дөйөм Рәсәй яңы йыл шыршыһынан тыш, балалар өсөн Измайлов Кремле һәм башҡа урындар буйлап экскурсия ойоштороласаҡ. Был сәфәргә аҡса республика ҡаҙнаһынан бүленә.

✓Башҡортостанда "Башнефть" йәмғиәтенең автозаправкалау станцияларында бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡ йәнә артты. АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 36,70 һум тора, АИ-92 ATUM - 37,30 һум, АИ-95 ATUM - 39,70 һум. Дизель яғыулығының бер литры әле 40,10 һум тәшкил итә. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, бер йыл эсендә республикала бензин уртаса 4,3 процентҡа, дизель яғыулығы 7 процентҡа ҡиммәтләнде.

✓Төркөстанда Хужа Әхмәт Йәсәүи ҡалаһында ТӨРКСОЙ даими советының XXXV ултырышы үтте. 2018 йылда Төрки донъяһының мәҙәни баш ҡалаһы итеп Төркиәнең Кастамону ҡалаһы һайланды. Гала-концертта 11 илдән һәм төбәктәрҙән талантлы йырсылар һәм бейеүселәр ҡатнашты. Башҡортостандан төрлө музыка ҡоралдарында уйнаусы Зәһир Зәйнетдинов һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты, халыҡ йырҙарын башҡарыусы Зилиә Бәхтиева сығыш яһаны.

✔ *Йомаҙил Йомағужиндың да еңеүселәр араһында булыуы ҡыуандырҙы. Алла бойорһа, ул тәҡдим иткән "Төньяҡ амурҙары" һәм XV - XVI быуаттарҙа йәшәгән "Һабрау сәсән" исемле урамдарҙа ла йөрөгә насип булыр.*



рҙағы таштарҙы күлгә ташлағандар. Уларҙы әлегә алыу мөмкин түгел, сөнки боҙ йоҡа, ә инде яҙғыһын боҙ ирегәс, таштар һыу аҫтына китәсәк. Иң әсендергәне - вандалдарҙың Мәңгелек ут эргәһендәге стеланы ватып, Граждандар һуғышы ваҡытында революция хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың фамилиялары яҙылған табличканы йолҡоп алыуы. Был күренештәр буйынса тейешле ғариза яҙылып, хоҡуҡ һаҡлау органдарына тапшырылған.

Әйткәндәй, 24 ноябрҙә Конгресс-холл районында коммуналь хеҙмәттәр ямғыр һыуы коллекторының канализацияға эре сүп-сар төшөүҙән һаҡлап торған фильтр ролен үтәгән 41 рәшәткәне урланыуын асыҡланы. Яуыз ниәтлеләрҙе аллеяның үҙәктә - БДУ корпусы менән Конгресс-холл араһында урынлашыуы ла, күҙәтеү камералары булыуы ла туҡтатмай. Уғрылыҡ буйынса барлыҡ материалдар һәм дәлилдәр ғариза менән бергә хоҡуҡ һаҡлау органдарына тапшырылған.

тантанаһында Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Гүзәл Аҫылова. - Унда тәүгеләрҙән булып сауҙа хеҙмәтләндереүен ойоштороу мәсьәләһе киҫкен торған муниципалитеттар ҡатнашты. Проектта ҡатнашыусыларҙы һайлап алғанда әлегә тиклем сауҙа нөктәләре булмаған тораҡ пункттарҙың 60 процент сикте артыуы төп шарт булып торҙо".

Бүздәк районы хакимиәте башлығы Азат Арыҫланов фекеренсә, автокибеттәр эшләй башлау менән хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрер тип көтөлә.

"Бүздәк районындағы 17 ауылда сауҙа нөктәләре юҡ ине, был - 680 кеше, - тип билдәләне ул. - Был иһә ауыл халҡының йәшәү сифатына бәйле ауырлыҡ тыуҙырҙы, улар кәрәкле тауарҙар артынан район үҙәгенә барырға мәжбүр булды".

Башҡортостан Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, автокибеттәрҙә халыҡты махсус әҙерләнгән маршрут һәм график буйынса хеҙмәтләндереү ҡаралған. Бынын өсөн улар аҙыҡ-түлекте тейешле шарттарҙа һаҡларға мөмкинлек биргән ҡоралмалар менән йыһазландырылған. Күсмә сауҙаны үҫтереү буйынса проектты бойомға ашырыуға республика ҡаҙнаһынан 15 миллион һум аҡса бүленгән.

# ӘҘӘБИ МӘКТӘП БУЛАСАҠ



**Башҡортостан Әҙәби мәктәп асыу өсөн 1,5 миллион һумлыҡ федераль грант алды.**

БР Яҙыусылар союзы рәйесе Зәки Әлибаев белдереүенсә, һәр ҡала һәм районда төрлө жанрҙа ижад иткән (шиғырҙар, хикәйәләр, повестар) һәләтле йәштәрҙе эҙләү иғлан ителә. Иң яҡшы 30 автор Өфөгә саҡырыла. Ҡатнашыусылар 17-25 йәштә булырға тейеш. Улар өсөн төрлө оҫталыҡ дәрестәре менән ҙур аҙналыҡ программа ойоштороу ҡаралған. Әҙәби мәктәпкә ҡабул итеү 2018 йылдың авгусына тиклем дауам итә, сентябрҙә иһә йомғаҡ яһау күҙаллана. Мәктәптә ҡатнашыусыларҙың әҫәрҙәре йыйынтыҡта донъя күрәсәк. "Беҙ сағыу, һәләтле авторҙарҙы табырға теләйбеҙ. Төпкөлдә лә яҙышҡан, махсус белеме булмаған ижад кешеләрен осратырға мөмкин. Абруйлы ҡәләм оҫталарынан торған комиссия Әҙәби мәктәптә ҡатнашыусыларҙы һайлап алып, оҫталыҡ серҙәре менән бүлешәсәк", - тине Зәки Әлибаев. Союз рәйесе һүҙҙәренсә, элегерәк гәзит һәм журнал редакциялары йәш яҙыусылар семинарҙары, йәш хәбәрселәр слеттары уҙғара ине. Хәҙер Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ошо йолаңы тергеҙергә ниәтләй.

# ТӘГӘРМӘСЛЕ КИБЕТ КИЛӘ...



**Башҡортостандағы 10 районға алыҫта урынлашҡан һәм халыҡ аҙ йәшәгән тораҡ пункттарҙа сауҙа итеү өсөн тәғәйенләнгән автокибеттәрҙең асҡыстары тапшырылды.**

"Тәгәрмәсле" магазиндар республикаһың Архангел, Әлшәй, Баҡалы, Белорет, Бүздәк, Ейәнсура, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Күгәрсен һәм Көйөргәҙе райондарына юлланды. "Төбәктә күсмә сауҙаны үҫтереү буйынса проект пилот режимында тормошҡа ашырыла, - тип хәбәр итте асҡыстарҙы тапшырыу

# ҺАБРАУ СӘСӘН УРАМЫ БУЛАСАҠ!



**Өфө ҡала Советының сираттағы ултырышында 15 ноябрҙә иғлан ителеп, 6 декабргә тиклем дауам иткән урамдарға, скверҙарға, майҙандарға исемдәр тәҡдим итеү буйынса конкурсҡа йомғаҡ яһалды.**

Конкурс комиссияһына ошо осорҙа 100-ҙән ашыу тәҡдим килгән һәм һөҙөмтәлә түүгә алты еңеүсе билдәләнде. Уларҙың тәҡдиме менән киләсәктә баш ҡалала опера йырсылары Федор Шаляпин (бәлки, проспект булыр) менән Дмитрий Хворостовский, Өфө ҡала башҡарма комитетын 1961 - 1969 йылдарҙа етәкләп, ҡала үҫешенә ҙур өлөш индергән Сергей Воронинский исемендәге урамдар, Йырлаусы фонтандар майҙаны, Әсә, Шиғриәт һәм Моң (Мелодия) скверҙары барлыҡҡа киләсәк. Шулай ҙа беҙҙе милләттәшебеҙ Йомаҙил Йомағужиндың да еңеүселәр араһында булыуы ҡыуандырҙы. Алла бойорһа, ул тәҡдим иткән "Төньяҡ амурҙары" һәм XV - XVI быуаттарҙа йәшәгән "Һабрау сәсән" исемле урамдарҙа ла йөрөгә насип булыр. Еңеүселәр ҡала округы Советының дипломдары һәм Өфө тураһындағы альбом менән бүләкләнде. Шулай уҡ һәр ҡатнашыусыға махсус сертификаттар ебәреләсәк. Ҡала округы Советы рәйесе В. Трофимов белдереүенсә, тәҡдимдәр Өфө ҡалаһының Баш архитектураһына тапшырыласаҡ.

Әйткәндәй, конкурс үткәрелде лә бөттө түгел, ул артабан да дауам итәсәк һәм йылына ике тапҡыр еңеүселәр билдәләнәсәк. Тимәк, милләтебеҙҙең арҙаҡлы ил-азаматтарының, ҡатын-ҡыҙҙарының исемдәрен, иғтибарға лайыҡ атамаларҙы мәңгеләштереп ҡалыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмай, конкурста әүҙем ҡатнашыу - беҙҙең изге бурыстарыбыҙҙың береһе булып тора.

## ИҒТИБАР!



# ҠЫШ МӘШӘҠӘТТӘРЕ

**Өфө ҡалаһының коммуналь хеҙмәттәре үҙ эшен һауа торошо үҙгәреүенә ҡарап ойоштора. Әлеге ваҡытта ҡала хеҙмәттәре боҙлауыҡ, юлдарҙы ҡар ҡатламынан таҙартыу менән шөғөлләнә. Эшкә 200 берәмек техника һәм 900 урам таҙартыусы йәлеп ителгән.**

Өфөлә территорияларҙы төҙөкләндереү һәм ҡарау буйынса яуаплылыҡ зоналары билдәләнгән интерактив карта эшләй. Уның ярҙамында территорияны таҙартыу өсөн яуаплыларҙы асыҡларға һәм күрһәтелгән телефон аша ҡайҙа таҙартыу эштәре кәрәклеген хәбәр итергә мөмкин. Әйткәндәй, "Башинформ" агентлығы өфөләр өсөн тормоштоң бөтә осраҡтарына ла "кыш-ҡы" телефон белешмәһен әҙерләгән.

**Ихатала боҙлауыҡ, ҡыйыҡтар таҙартылмаған, унан боҙбармаҡтар һәленеп тора икән, шылтыратығыҙ:**

Дим районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 281-22-30, 293-70-61;

Ленин районының торлаҡ хужалығы тресы: 293-56-40, 251-68-60;

Киров районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 293-11-00, 256-36-88;

Совет районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 223-12-42, 223-87-75;

Октябрь районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 292-73-00, 235-66-95;

Орджоникидзе районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 293-13-10, 260-52-67;

Калинин районы Торлаҡ хужалығы идаралығы: 293-35-11, 238-65-11;

Торлаҡ хужалығы идаралығы МБУ-һының Үҙәк диспетчер хеҙмәте: 235-48-00, 235-95-35.

**Юлдар ҡарҙан таҙартылмаһа:**

Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм юлдарҙы төҙөкләндереү идаралығы: 251-38-11

Ҡар почтаһы: sneg@ufacity.info (тиҙҙән эшләй башлаясаҡ)

**Торба ярылһа:**

Берләштерелгән диспетчер хеҙмәте: 291-24-24

"БашРТС" Авария-диспетчер хеҙмәте: 260-82-55

"УИС" МУП-ының диспетчер хеҙмәте: 246-37-33; 246-37-27

"Уфаводоканал"-дың авария хеҙмәте: 284-15-30.

**Юлдарҙа көтөлмәгән хәл-торош килеп тыуһа:**

Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы дежур часы: 235-51-11; 233-04-62; 233-27-31

Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы ЮХХДИ-ның Юл-патруль хеҙмәте полкы: 235-13-61;

Өфө ҡалаһы буйынса Эске эштәр идаралығы ЮХХДИ-ның Юл-патруль хеҙмәте полкы: 237-80-50.

**Барлыҡ ашығыс осраҡтарҙа:**

Өфө ҡалаһының "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112": 112

Башҡортостан Республикаһы буйынса Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының баш идаралығы: 233-99-99.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бил ауыртҡанда

❖ Бил ауыртҡанда уколдар ҡаҙатыу хәлдә бер аҙға ғына яҡшырта. Был ауыртыуҙан ҡотолоу өсөн ҡара торма менән балдан әҙерләнгән шифа ярҙам итер. 1 өлөш араҡы, 2 өлөш бал, 3 өлөш торма һутын болғатып, йоҡлар алдынан билде ыуырға. Төнәтмәне быяла һауытҡа һалып, һыуыҡта һаҡларға. Бер нисә көндә һыҙланыу онотолор.

## Ҡауаҡ

❖ 1 ҡалаҡ зәңгәр сәскә үләненә 200 мл ҡайнар һыу, 200 мл аш һеркәһе ҡойорға, болғатырға һәм аҙна дауамында көн һайын баш тиреһенә һөртөргә.

## Цистит

❖ 2 балғалаҡ ваҡланған ҡыяр орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут талғын утта торорға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 45 көн.

## Тын юлы сирҙәре

❖ Ангина, фарингит һәм башҡа тын юлы сирҙәре менән яфаланһағыҙ, 1 балғалаҡ ала миләүшә сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм 2 ҡалаҡ төнәтмәне көнөнә 4-5 тапҡыр эсергә. Һауыҡҡансы дауаланырға. Бынан тыш, 100 мл медицина спиртына 1 ҡалаҡ ала миләүшә сәскәһе һалып, 7-10 көн төнәтеп, 1 өлөш төнәтмәгә 3 өлөш һыу ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә. Тамаҡты сайҡатыу өсөн 10 мл төнәтмәгә 1 стакан йылы һыу өҫтәргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр сайҡатырға.

❖ Киҙеү, ОРЗ, һалҡын тейгәндә арҡаға, түшкә, муйынға май менән массаж эшләйҙәр. 5-6 сәғәттән һуң тағы ҡабатлайҙар. Массаждан һуң ауырыуға тир ҡыуыусы үләндәрҙән яһалған сәй эсереп, урап һалалар.

❖ Көслө йүткергәндә пипетка менән телдең төбөнә 3-5 тамсы май тамыҙырға. Дауаланыу курсы 7 көнгә тиклем.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Беҙҙе компьютер, робототехника синыфтары, спорт залының байлығы ҡыҙыҡһындыра. Әбделмәмбәт мәктәбенең яңы технологияларҙы үҙләштереү һәм спорт буйынса Рәсәй кимәлендә лә уңышлы сығыштар яһауы билдәле.***

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Бәҙәр һуғышы

Ул замандарҙа ғәрәптәрҙә ҡоралын ергә ташлап һәм һул ҡулын күтәреп әсиргә бирелгән яугир әсиргә алыусының шәхси мөлкәте һаналған. Әсир яугирҙар хәрби табыштың дөйөм бүленешенә инмәгән һәм иң ҡиммәтле табыштарҙан һаналған - улар өсөн туғандары бик күп аҡса түләгән. Шуға ла әсир яугирҙарҙы ғәрәптәр үлтермәҫкә тырышҡан.

Ләкин был яу башҡа яуҙарҙан ҡырҡа айырылған. Мөһәжирҙәрҙең, бигерәк тә элекке ҡолдарҙың, ҡөрәйш мәжүсиҙәренә ҡарата нәфрәте бик көслө булған. Шуға күрә яу тамамланып та өлгөрмәй, Билал исемле элекке ҡол етәкселегендә ҡөрәйш мәжүсиҙәренең элекке ҡолдары үс ала башлай. Был хәлде Мөхәммәт бәйғәмбәр һәм уның иң яҡын ярҙамсылары күреп ҡалып, туҡтата.

Был яуҙа мосолмандарҙың ун дүрт кешеһе - алты мөһәжир һәм һигеҙ ансар - һәләк була. Яуҙа мөһәжирҙәр ансарҙарға ҡарағанда өс тапҡыр аҙыраҡ булыуға ҡарамаҫтан, һәләк булған ҡөрәйш яугирҙарының яртыһы уларға тура килә. Был яуҙа баһадир Хәмзә менән Ғәли батыр дан ала, сөнки улар тарафынан һәм уларҙың ярҙамы менән ҡырҡҡа яҡын ҡөрәйш үлтерелә. Ошо яуҙан һуң баһадир Хәмзәгә - Ислам Арыҫланы, ә Ғәли батырға Ислам Ҡылысы тигән данлы исемдәр бирелә.

Яуҙа һәләк булған мосолмандарҙы хөрмәтләп ерләйҙәр, ә мәжүсиҙәрҙең кәүҙәләрен тәрән соҡорға ырғытып, күмеп ҡуялар. Мәжүсиҙәр өсөн доға ҡылырға ла рөхсәт ителмәй. Тик шулай ҙа мәжүсиҙәрҙе соҡорға ырғытҡан ваҡытта мөһәжирҙәрҙең дә күҙ йәштәре түгелә, сөнки улар араһында туғандарын танайҙар. Бер мөһәжирҙең, үлеләр араһында атаһын танығандан һуң сәсе ҡапыл ағарып сыға.

Икенсе көн мосолмандар таң менән, әсирҙәрҙе эйәртеп, Мәҙинәгә юллана. Әсирҙәр араһында Әбү Суфияндың Ғәббәс исемле улы, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең кейәүе - Мәккәлә тороп ҡалған Зәйнәб ҡыҙының Әбүл Әс исемле ире лә була.

## Хафизаға өйләнгәне

Мөхәммәт бәйғәмбәр Бәҙәр һуғышынан Мәҙинәгә бөйөк дан ҡаҙанып ҡайта. Был еңеү уның яҡлыларҙың һанын арттыра. Үҙенә тейеш булған табышты ул тотошлай тиерлек ярлыларға өләшеп бирә.

Әсирҙәр өсөн алған аҡса ла иҫ китмәле күп килем килтерә, сөнки Мәккә ҡалаһының бай һәм абруйлы кешеләре был юлы әсиргә байтаҡ эләгә. Мәҫәлән, Ғәббәстең бер үҙе өсөн генә ун ике мең дирһәмлек алтын алалар. Ғөмүмән, әсирҙәр өсөн алынған аҡса яу табышына ҡарағанда күп тапҡырға күберәк килем килтерә.

Шул уҡ ваҡытта мосолмандар әсирҙәрҙең бер өлөшө өсөн аҡса алмай. Мәҫәлән, ҡөрәйш мәжүсиҙәренең ҡайһы берҙәре Ислам динен ҡабул итеп, Мәҙинәлә тороп ҡала. Йәки, әсирҙәр араһындағы берәүҙең туғандары бөлгөнлөккә төшкәнлектән, яугир туғаны өсөн аҡсаның бик аҙ өлөшөн генә түләй ала. Был яугир үҙ азатлығының хаҡын яйлап үҙе түләйәсәге тураһында һүҙ бирә. Уны ҡайтарып ебәрәләр. Һәм, әйтергә кәрәк, һүҙендә тора ул. Шулай уҡ ҙур ғаиләләре булған ярлыларҙы бер ниндәй түләүһеҙ ҡайтаралар. Уларҙан мосолмандарға ҡаршы бер ҡасан да ҡорал күтәрмәйәсәктәре тураһында ант иттерелә.

**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Бөрйән районының Әбделмәмбәт ауылы журналистар өсөн ят урын түгел. Ниндәй редакцияла ла улар хаҡында beләләр һәм: "Ә-ә-ә! Ҡыпсаҡтар шәп ул, бигерәк тә мәктәптәре шәп!" - тип тә өҫтәп ҡуялар. Һәм улар сираттағы тапҡыр шәплектәрен иҫбатланы - мәктәптәрендә Матбуғат көнөн билдәләне. Республиканың "Киске Өфө", "Йәшлек", "Йәншишмә", "Башҡортостан", районларының "Таң" гәзиттәре һәм "Шоңҡар", "Аҡбуҙат" журналдары редакцияларынан вәкилдәр саҡырып, матбуғат менән дуҫлыҡтарын, уҡыусыларҙың һәм ауыл халҡының милли баҫмалар яҙмышына, ғөмүмән, илдә барған милли мәсьәләләргә лә битараф түгеллеген иҫбатланы.**

# АФАРИН, ҠЫПСАҠТАР!

Урман яғында ауылдар алыҫтан күренмәй ҙә инде. Тау-таш һәм боролмалар араһындағы тар юлдан киләһең-киләһең дә, ер аҫтынан үҫеп сыҡҡан кеүек ҡапыл ғына күҙ алдында ауыл пәйҙә була. Ҡыпсаҡ (ауылдың боронғо атамаһы) та шулай Урал армыттары араһына һыйынып, ирәйеп кенә ята. Өфөлә әле ҡара ер туҙаны туҙғып ятып ҡалған булһа, бында ҡыш хөкөм һөрә. Ҡырпаҡ ҡар донъяны ағартып уҡ ташлаған. Мөрйәләрҙән быу булып йыбырлап йылы сығып тора. Тимәк, хужалар инде мейестәрен йылытып, баҫырға әҙерләнә. Был инде иртәнсәктең көнүҙәгенә ауа башлаған мәле, иртәнге туғыҙ-ундар тирәһе.

Мәктәп тәңгәлендә туҡтап, бергилке ауыл һиллеген, бер ҡайҙа ла ҡабаланмаған, сәбәләнмәгән кешеләр тормошон күҙәтеп торҙоҡ. Ауыл халҡы ситтән килгәндәр менән ҡыҙыҡһынмай. Беҙҙе лә күргән, ҡайһылары таныған хәлдә лә, тыныс ҡына иҫәнләшәләр ҙә үтеп китәләр, хатта боролоп та ҡарамайҙар. Был да бөрйәндәрҙең - урман халҡының бер ҡыҙыҡ ғәҙәте бит ул. Был яҡтар бер ваҡытта ла сит кешегә артыҡ иғтибар күрһәтмәйҙәр, бик белгеләре килгәндә лә, улар менән ҡыҙыҡһыныуҙарын һиҙҙермәйҙәр. Алсаҡланып, сөсөләнеп, күҙгә инеп бармайҙар, хисләнеп сиселеп китмәйҙәр, ҡолас ташлап ҡаршы йүгереп сыҡмайҙар, үпәсләшеп оҙатмайҙар. Тыйнаҡ ғорурлыҡ артындағы ихласлыҡтарын, ҡырыҫыраҡ ябайлыҡтарын бары иғтибарлы булғанда ғына тоярһың.

Мәктәп ишеген ашатлауыбыҙ булды, тыштағы һиллектән бер нәмә лә ҡалманы ла ҡуйҙы. Бында гөрләп торған айырым тормош икән дә баһа. Холда уҡ уҡыусыларҙың бөтөнләй тәнәй генәләре ҡаршыланы. Йырлап, йырлаған ыңғайы тыптырлап, бармаҡтарын шартлатып тора үҙҙәре. Ирекһеҙҙән беҙҙең дә ҡулдар сәпәкәйләне, күңелдәр йырға ҡушылды.

Мәктәп директоры Инсур Рәмил улы Үтәбаев мәктәп буйлап экскурсия ойоштора, һәр кабинеттың тәғәйенләнеше, унда башҡарылған эштәр, уңыштар, алдынғы уҡыусылар, абруйлы уҡытыусылар, ҡаҙаныштар хаҡында бәйнә-бәйнә һөйләй. Беҙҙе бигерәк тә компьютер, робототехника синыфтары, спорт залының байлығы ҡыҙыҡһындыра. Белмәгәндәр өсөн Әбделмәмбәт мәктәбенең яңы технологияларҙы үҙләштереү һәм спорт буйынса республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә уңышлы сығыштар яһауы хаҡында әйтеп китәйек. Ябай ауыл мәктәбендәге балаларҙың һәр яҡтан да әүҙем, минең ҡарамаҡҡа хатта үтә лә тығыҙ һәм ҡыҙыҡлы көн итеп ятыуҙары, моғайын, мәктәп хакимиәте һәм айырым уҡытыусыларҙың тырышлығынан тыш, ошо ерлек шауҡымынан да торалыр. Борон-борондан "ҡыпсаҡ" тигән дандары бар бит уларҙың.

Конференцияның беренсе өлөшөндә саҡырылған матбуғат вәкилдәре, бүленешеп, төрлө синыфтарҙа класс сәғәттәре үткәрҙе. Миңә 9-сы класс эләкте. Класс етәкселәре Айгөл Үтәбаева етәкселегендә үҫмерҙәр менән әҙәби әҫәрҙәр, уларҙағы йәштәргә ҡағылышлы темаларҙы, бөгөнгө быуын проблемаларын анализлап үттек. Дәрестең үҙенсәлеге шунда - бында ата-әсәләр ҙә саҡырылғайны. Ололар, моғайын, балаларының ҡыҙыҡһыныуҙарын, уйланыу, белергә теләү юҫыҡтарын самалап ултырғандыр, тимен.

Артабан ата-әсәләр, ағинәйҙәр, уҡытыусылар ҡатнашлығында дөйөм ултырыш ойошторолоп, ауылдың арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙары, өлгөлө әсәләр, үрнәк алырлыҡ ғаиләләр, һәләтле балалар хаҡында телмәрҙәр һөйләнде. Әйткәндәй, конференцияның бер темаһы Әсә көнөнә арналғайны. Шуға бәйле, ҡатын-ҡыҙҙың бөгөнгө йәмғиәттә тотҡан урыны, уйнаған роле хаҡында психологик күҙәтеүҙәр кимәлендәге тос фекерҙәр ишетелде. Күренеп тора, бында күҙ буяу өсөн уҡылған докладтар түгел, ә күҙ алдында булғанды күҙәтеү һәм шуларҙан сығып һығымталар яһау алға ҡуйылған. Был һөйләшеүгә журналистар ҙа әүҙем ҡушылып, оло бер ҡор килеп сыҡты.

Матбуғат көнөн һыҙыҡ өҫтөнә алып, китапханасы Мәүлиҙә Ғәликәева ауыл һәм мәктәп буйынса гәзит-журналдарға яҙылған һәм милли үҙаңды алғы планға ҡуйған ғаиләләрҙе исемләп тигәндәй һанап үтте. Уның әйтеүенсә, һәр өй тиерлек ниндәйҙер башҡорт матбуғатын алдыра һәм уҡый. Был тәңгәлдә лә башҡаларға үрнәк булырҙайҙары бар ҡыпсаҡтарҙың.

Аҙаҡтан шундай уҡ күмәк көс менән әҙерләнгән концерт ҡарап, тәмле сәйҙәр эсеп, урман төпкөлөндә гөрләп йәшәп ятҡан был үҙенсәлекле мәктәп менән хушлашып, юлға сыҡтыҡ.

Мәҡәләмде уҡыған уҡыусы, бәлки, ниңә был ауыл мәктәбен улай күккә күтәреп маҡтай әле, тип тә уйлар. Ундай уй килгәндәргә, шиктәрен таратыу өсөн, интернеттағы ошо мәктәпкә бәйле булған бер нисә төркөмдөң генә исемен атайым. Бына улар: "Спорт менән йәшә, ҡыпсаҡ!", "Тимербатыр" лагеры - "Аҡыллы ҡышҡы каникулдар", "Әбделмәмбәт мәктәбе" һ.б. Физик тәрбиә уҡытыусыһы булған Зиннур Боҫҡоновтың "ФотоЗинНур" төркөмөндәге профессиональ рәссам күргәҙмәләре, башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Миңнур Ҡасимованың әҫәрҙәре үҙҙәре генә лә балаларҙың ниндәй ҡулдарҙа тәрбиәләнеүен үҙҙәре өсөн үҙҙәре һөйләй.

Әйткәндәй, Әбделмәмбәт мәктәбе республика балаларын ҡышҡы каникулдарға йыя. Был лагерҙа ҡала балалары ауыл йәшәйеше менән яҡындан танышып, саңғыларҙа елеп, катокта йүгереп, саналарҙа шыуып, атта йөрөп, үрҙә һөйләгән роботтар ҡороу серҙәренә төшөнөп, инглиз телен өйрәнеүҙә белемдәрен арттырып ҡайтасаҡ. Ә инде урман һауаһын, тәбиғәтен һәм кисерәсәк тойғолар солғанышын әйтеп тораһы ла түгел.

Бөгөн, күп мәктәптәр журналистарҙан йөҙ борған, улар күҙенән ялтарып, йәшенеп ҡалырға тырышҡан ҡатмарлы көндәрҙә, күрәһегеҙ, Бөрйән районының Әбделмәмбәт мәктәбе ишектәрен шарран асып, Матбуғат көнө үткәреп ташланы. Күрһәтер байлыҡтары, бүлешер шатлыҡтары, ғорурланыр ҡаҙаныштары һәм ғәм алдына сығарып баҫтырып, арҡаларынан тупылдатып һөйөр аҡыллы балалары булғанғалыр. Афарин, ҡыпсаҡтар!

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**



✔ *Мәскәүҙең Көнсығыш китапханаһы баҡсаһындағы Ҡырымдан килтерелгән таш балбалдың да ҡыпсаҡ сығышлы, ә тап Башҡорт хан һыны булыуы төрлө дәлилдәр менән иҫбатланған.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# КЕМ УЛ БАШҠОРТ ХАН?



**Һәүәҫкәр тарихсы Йәдкәр Бәшировтың ошо көндәрҙә генә донъя күргән "Башҡорт хан" тип аталған баҫмаһы тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ.**

➔ **Башҡорт хан урыҫ кенәзе Мстиславтың үгәй атаһы була, тигән мәғлүмәт быға саҡлы тарихта йәшәп килде, әммә фараздар формаһында ғына ине. Һеҙ китабығыҙҙа быны иҫбатлайһығыҙ, шулай бит?**

- Ҡыпсаҡ ойошмалары башлыҡтары, шул иҫәптән Башҡорт хан да черниговское, смоленск һәм Бөйөк Киев кенәзлектәре менән тығыҙ бәйләнештә була. Ул Бөйөк Киев кенәзлегенең тәхете өсөн барған ыҙғыштарҙа йыш ҡына хәл иткес роль уйнай. 1511 йылда Киев кенәзлеге батшалығы өсөн Руть йылғаһы ярында Юрий Долгорукий менән Изяслав Мстиславович ҡаты бәрелешә. Кенәз Владимир Заводович Черниговский Изослав Мстиславовичты яҡлап сыға. Башҡорт хан был алышта Черниговскийға ярҙам итә. Ҙур юғалтыуҙар менән Изяслав еңеү яулай, әммә кенәз Черниговский һәләк булып ҡала. Кенәз үлгәс, уның ғаиләһе эсендә үк тәхет вариҫы хоҡуғына эйә булған кескәй Мстиславҡа ҡурҡыныс янай. Владимирҙың ҡатыны Ольга улына яҡлау эҙләп Башҡорт ханға килә. Киләһе ваҡиғалар ағышында ханға кейәүгә сыға. Шулай итеп, урыҫ кенәзе Владимир Черниговскийҙың улы Башҡорт хан тәрбиәһендә үҫә. Әммә ул замандарҙа урыҫ кенәзлектәрендә лә, дала киңлегендә көн иткән халыҡтарҙа ла бары тик ҡан туғанлыҡ ҡына һанлана һәм хөрмәт ителә. Шунлыҡтан, Башҡорт хан да, Мстислав үҙе лә был "туғанлыҡтарын" файҙаланмай.

➔ **Рәсәй киңлектәренең төрлө мөйөштәрендә табылған таш балбалдарҙың ҡыпсаҡтарҙыҡы булыуын дәлилләй киләләр. Мәскәүҙең Көнсығыш китапханаһында һаҡланған балбалды һеҙ Башҡорт хандыҡы, тип яҙаһығыҙ.**

- Ун икенсе быуаттың икенсе яртыһында ҡыпсаҡтарҙа таш ҡырҡыу кәсебе яҡшы үҫешә. Тикшереүсе-белгес Н.И. Веселовский 1915 йылда уҡ таш балбалдарҙың ҡыпсаҡтар ҡулынан эшләнгәнен иҫбатлағайны инде. Археологтар ҙа ошоно уҡ күрһәтте, әммә быларға артыҡ иғтибар итеүсе булманы. Беҙҙең көндәрҙә имен ҡалған статуялар музейҙарға инеп ултырып, шулай уҡ өйрәнелмәй һаҡланып яталар.

Мәскәүҙең Көнсығыш китапханаһы баҡсаһындағы Ҡырымдан килтерелгән таш балбалдың да ҡыпсаҡ сығышлы, ә тап Башҡорт хан һыны булыуы төрлө дәлилдәр менән иҫбатланған. Академик Ғайса Хөсәйенов әле 1958 йылда уҡ Мәскәүҙә уҡығанында китапхананың төп бинаһы эсендә 4 метр бейеклектәге балбал тороуын һәм ул балбалдың быға са күрелгән һындарҙан ҡырҡа айырылыуын яҙа. Һында сағылдырылған кешенең тап ҡыпсаҡ сығышлы булыуы ла һәм уның юғары чинлы, мәртәбәле, хатта бөйөк булыуы ла аңлашылып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был һын мәрмәрҙән ҡойоп-ҡоршап түгел, ә таш-ҡая киҫәген һырлап, йышып-шымартып башҡарылған.

Бөгөнгө көндә был һын китапхананың баҡсаһына сығарып ҡуйылған. Үҙем дә барып күрҙем. Оҙонсараҡ бит, ҡушыла яҙып торған ялбыр ҡара ҡаштар. Ҡаш аҫтынан бик үткер, ҡаты ҡарашлы күҙҙәр төбәлә. Танауы тура, мыйығы, йоморо ғына ҙур булмаған һаҡалы бар. Башында тажға оҡшаған бай биҙәкле баш кейеме, өҫтөндә шундай уҡ бай елән. Кейеме һәм тышҡы ҡиәфәте башҡортҡа оҡшаған. Салбары һәм аяҡ кейеме бик уңайлы, күркәм тегелгән. Батыр кәүҙәһе, ҡарашы, йөҙтөҫө уның һуғышсы ғына түгел, ә интеллектуаль яҡтан да юғары үҫешкән кеше икәнен сағылдырып тора.

Юғары чинлы аристократтарҙы балбалдарҙа һүрәтләгәндә уның кейем орнаменттарын, тән төҙөлөштәрен, йөҙ һыҙаттарын асыҡ сағылдырырға тырышҡандар. Бында уның хәрби сифаттары ла күренергә тейеш булған. Әлеге һында ла хандың байлығы, мәртәбәле булыуы һәр деталдә, һәр биҙәктә күренеп тора. Һәм, әлбиттә, бындай һындар бары тик тарихи даны булған һәм хакимлыҡ иткәндәргә генә яһалған.

Әлеге мәлдә был балбал китапхананың баҡсаһында "Ҡыпсаҡ һуғышсыһы" тигән исем аҫтында тора. Бите һәм кәүҙәһенең ҡайһы бер өлөштәре ярайһы уҡ зарарланған. Киләсәктә был аманат башҡорт ерҙәренә ҡайтарып алынһа, бик шәп булыр ине.

➔ **Йәдкәр Әхәт улы, халҡыбыҙҙың шундай шәхесе булып та, хатта үҙебеҙҙең тарихсылар тарафынан да быға саҡлы өйрәнелмәүе нисек аңлатыла? Кемдәргәлер ғәйеп ташлағы ла килмәй, әммә күңелдә бер үпкә төйөрө тороуын да йәшереп булмай...**

- Урта быуаттар тарихын өйрәнгән ваҡытта "Ваҡыт фантомы" тигән бер арауыҡ бар. Ул арауыҡ үҙ эсенә 297 йылды ала! Һәм бында үҙ-ара мөнәсәбәттәре менән тарих ағышын үҙгәртә алырҙай Византия, Көнбайыш Европа, Греция, Осман империяһы кеүек илдәр йоғонто яһай. Ун алтынсы быуат аҙағында, Византия тарҡатылғас, Көнбайыш Европала монахтар төркөмө үҙ мәҙәниәттәренә ҡарата позицияларын үҙгәртә башлай һәм шуның менән тарихи яҙмаларға ла төҙәтмәләр индерәләр. Улар Осман империяһының ролен кәметеп күрһәтеү, Греция һәм Египет цивилизацияларын артҡы планға күсереү һәм Көнбайыш Европа мәҙәниәтен нигеҙгә ҡуйыу өсөн тырышалар. Ә Көнбайыш Европа был мәлдә бик ярлыланған һәм милли идеяға мохтаж була. Шул сәбәпле христиндар йылъяҙмаларҙы хәл-ваҡиғаларға яңы даталар ултыртып күсереп яҙа. Ғалимдар фаразлауынса, тап шул быуатта Иосиф Скалигерға сәйәси заказ бирелә һәм ул тарихи йылъяҙмаларға 300 йыллыҡ үҙгәреш индерә. Был үҙгәрештәр арҡаһында төрлө тарихи инештәрҙең мәғлүмәттәре тура килмәй башлай һәм Башҡорт хан осорон өйрәнеү ҙә ауырлыҡтар тыуҙыра. Мәҫәлән, Башҡорт хан ун икенсе быуатта йәшәй, ә "башҡорт" атамаһы һигеҙенсе быуат яҙмаларында уҡ була. "Башҡорт иле" хаҡында шулай уҡ һигеҙенсе быуатта уҡ әйтелә һәм әлеге ун икенсе быуатта йәшәгән хан исеме менән бәйләнә кеүек. Күп тарихсылар ошо тәңгәлде ашатлай алмай һәм ҡулдарын төшөрә лә ҡуя. Әммә был осор хаҡында төплө мәғлүмәттәр бар һәм бары ҡыйыу рәүештә эҙләнергә, эшләргә генә кәрәк.

**Йәдкәр Әхәт улы менән тәҡдим ителгән һөйләшеү "Башҡорт хан" китабының бик аҙ өлөшөн генә аса. Шунлыҡтан, ата-бабаларыбыҙҙың башҡорт халҡы булып формалашҡанға тиклемге тарихы, формалашыу дәүере, шул дәүерҙәге башлыҡтары, билдәле шәхестәре һәм дәүләт-ара мөнәсәбәттәре факттар, документтар нигеҙендә бәйән ителгән баҫманы һәр кемдең үҙ ҡулына тотоп уҡыуы зарур.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**

**(Аҙағы. Башы 48-49-сы һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Танып

Таныптар ике ырыуҙан тора: һыу танып (һул танып) һәм ҡара танып (ҡыр танып). Ҡаҙансылар менән ҡайпандар уларға ҡыпсаҡтар дәүерендә үҙаллы ҡәбилә булып ингән. Таныптарҙың ата-бабалары XII-XIII быуаттарҙа Минзәлә өйәҙе башҡорттары менән бергә Йүрүҙән, Ҡариҙел, Танып йылғалары буйына күсенгән. Минзәлә ғәйнәләре таныптарҙы үҙҙәренең туғаны тип һанай. Этнографик тикшеренеүҙәр таныптарҙың урындағы халыҡ менән ныҡ ҡатнашыуы хаҡында һөйләй. Тышҡы ҡиәфәте буйынса улар Волга буйының мари, удмурт, мордва халыҡтары менән ныҡ оҡшаш. Ғәли Соҡоройҙоң "Ҡара Танып ер бирҙе" шиғри шәжәрәһендә шундай һығымта яһала: "...таныптар Башҡортостандың төньяғында XVI быуаттың икенсе яртыһында, ирәктеләр килерҙән күпкә алда йәшәгән..."

XV быуатта Батыйҙың ағаһы Шибан олоҫында барған киҫкен сәйәси көрәш ҡара табындарҙың бер төркөмөн ватанын ташлап китергә мәжбүр итә. Уралдың көнбайышына улар бөтөнләй башҡа юлдан китә. Ғәли Соҡорой үҙенең "Тәзкирәт лильихвәнвә-әл-әхбәб" хеҙмәтендә бабаһы Әхмәт шәйехтең үҙенең Миәс йылғаһы буйындағы йәйләүенән Чусовая йылғаһы буйлап китеп, Камаға барып сығыуы хаҡында яҙа. Шуға күрә лә ул шунда барып еткәс тыуған ейәненә Сулман тип исем ҡуштыра. Ғәйнәләр Сулманға үҙҙәренең биләмәһендәге Барҙы йылғаһы буйына төйәкләнергә рөхсәт итә.

Таныптар тарихи яҡтан Себер даруғаһы башҡорттарына ҡарай, ә башҡорттарҙың Танып ырыуҙар берекмәһенең бер нисә быуатлыҡ тарихы бар. XVII быуат башының урыҫ документтарына ҡарағанда, ул саҡта үҙаллы Танып, Балыҡсы, Ирәкте улыстары барлыҡҡа килә. Улыстарҙа йәшәүселәрҙең һаны артыу һөҙөмтәһендә Ҡыр Танып, Һыу Танып, Ҡайпан һәм Ҡаҙансы түбәләре ойоша.

XVI быуат урталарына башҡорттар Камаға терәлеп ятҡан ерҙәрҙән, бигерәк тә уның уң яҡ ярынан китергә мәжбүр була. Мәҫәлән, төньяҡтағы ғәйнәләр XVIII быуатта Тулваның бер генә ҡултығында түгел, шулай уҡ Сылва йылғаһының һул ярында үҙенең аҫаба ерҙәрен һаҡлап ҡала. Йәнәй, гәрәй, уран һәм ғәйнә аҫабалары Каманың һул яғын һәм уның ҡушылдығы булған Иж йылғаһының көньяғын биләй. Был территорияла урыҫ ауылдары һаман да башҡорт атамалары менән йөрөй. Шуларҙың икеһе: Бисура, Үҙәк. Был ерҙәрҙә йәшәүселәрҙең телендә һәм мәҙәниәтендә башҡорт билдәләре әле булһын осрай.

Танып башҡорттарының этно-тарихи риүәйәттәрендә уларҙың урындағы халыҡтар менән ҡатнашыуы сағылыш таба. Мәҫәлән, таныптар биләмәһенең көнсығышында йәшәүселәре риүәйәтендә: "Беҙ - мариҙарҙың вариҫтары. Беҙ - мари йолаларын ташлап, мосолман динен ҡабул иткән халыҡ... ҡарттарыбыҙ Истанбулға барҙы һәм беҙ мосолман булып киттек..." - тигән юлдар бар.

Урындағы халыҡ башҡа халыҡтың теле һәм мәҙәниәте йоғонтоһон да кисерә. Хәҙерге заманда удмурттар йәшәгән ерҙәрҙе XV-XVI быуаттарҙа башҡа этник берәмектәр биләгән. Мәҫәлән, Иж йылғаһы буйында бәйләр, йәнәй, ғәйнәләр, ә Чепцы йылғаһы буйында удмурттарҙыҡы түгел, ә бисермәндәрҙеке тип һаналған бигер-шай ҡәбиләһе йәшәй. Тик XVIII быуатта ғына удмурттарҙың хәҙерге йәшәгән территорияһы билдәләнә.

Башҡорттарҙың танып ырыуы вариҫтары хәҙерге көндә Асҡын, Тәтешле, Балтас, Ҡариҙел районында йәшәй.

**(Дауамы бар).**

*✓ Милли мәҙәниәттәрҙе һәм аҙ һанлы халыҡтарҙы һаҡлау йүнәлешендә милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу буйынса методик күрһәтмәләр барлыҡҡа киләсәк. Был документты беҙ тиҫтәләрсә йылдар күтәбеҙ.*



**Республика бер нисә ай дауамында билдәһеҙлектә йәшәне. Йәмәғәтселек умарта күселәй гөжләне. Ата-әсәләр һайлау алдында ҡалды. Былар барыһы ла мәғариф системаһындағы үҙгәрештәргә бәйле туған телдәрҙе, шул иҫәптән башҡорт телен һәм дәүләт телдәрен уҡытыу буйынса килеп тыуған хәл-торошҡа бәйле булды. Һәр заман өсөн риторик яңғыраған: "Булырғамы, булмаҫҡамы?", "Нимә эшләргә?" тигән һорауҙарҙың беренсеһенә Башҡортостанда йәшәгән милләттәр бер төрлө яуап бирһә, икенсеһе һаман асыҡ ҡала: нимә эшләргә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға бөгөн Башҡортостан Республикаһы Мәғариф өлкәһендә тикшереү һәм күҙәтеү идаралығы начальнигы Айбулат Вәкил улы ХАЖИН яуап бирә.**

# МИЛЛИЛЕК - УЛ НИГЕҘ,

## нигеҙҙе алып ташлаһаҡ, ҡоролма емереләсәк...



**▸ Республиканың аҫаба халҡы булған, республикаға исем биргән милләт теленең яҙмышына бөгөн асыҡлыҡ индеме - был һорау, моғайын, барлыҡ айыҡ аҡыллы замандаштарыбыҙҙы борсойҙор. Әңгәмәне ошо һорауҙан башлайыҡ, булмаһа.**

- Уҡыу йылы башланыр алдынан мәсьәлә асыҡланды, федераль ведомство яғынан да, республиканың министрлыҡтары һәм ведомстволары яғынан да позицияны аныҡ аңлау барлыҡҡа килде. Ни генә булмаһын, туған телдәр уҡытыласаҡ! Башланғыс синыфтарҙың планын алып ҡараһаҡ та, унда туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу мотлаҡ тормошҡа ашырылырға тейеш. Төп дөйөм белем биреү стандарттарын алһаҡ та, туған телдәр һәм туған телдә әҙәби уҡыу мотлаҡ бар. Ҡайһы берҙә был предметтарҙы ҡушырға тәҡдим иткән фекерҙәр яңғырай, ләкин улар айырым ике үҙаллы предмет. Уҡыу планында улар айырым күрһәтелергә тейеш. Әгәр тикшереү ваҡытында был ике предметты ҡушыу асыҡлана икән, иҫкәртеү яһала, сөнки был Стандарттарҙы боҙоу булып тора. Эйе, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының федераль компоненты был предметтарҙы берләштереү мөмкинлеген бирә һәм министрлыҡ та шуны тәҡдим итә. Әммә был берләштереүҙе 8-9-сы, 10-11-се кластарҙа һәм белем биреү ойошмаһы ошо уҡыу предметтарына милли төбәк компоненты (мәҙәниәт, тарих, этнография һ.б. мәғлүмәттәрҙе) өҫтәгән осраҡта ғына индерергә була. Ә инде 1-7-се кластарҙа туған тел һәм әҙәби уҡыу айырым дисциплиналар булып тора.

Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуға килгәндә, бында ла хәл-торош аңлашыла. Элек норматив төрлөлөк юҡ ине. Дәүләт телен уҡыу планының инвариатив өлөшөнөмә, әллә вариатив өлөшкәмә индереү асыҡ ҡына билдәләнмәгәйне. Шуға күрә буталсыҡлыҡтар тыуа торғайны. Хәҙер ул Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығынан 2017 йылдың 9 октябрендә ебәрелгән хаты нигеҙендә уҡыу планының вариатив өлөшөнә индерелде.

**▸ Йошкар-Олала уҙған Дәүләт советы ултырышында ил башлығы В. Путин милли, этномәҙәни белем биреү, рус һәм туған телдәрҙе һаҡлау мәсьәләләре буйынса үҙ фекерен белдергәндән һуң, әллә күпме бәхәстәр булды. Ил башлығының сығышына һеҙҙең шәхсән ҡарашығыҙ ниндәй?**

- Владимир Владимировичтың яуабына бәйле ыңғай мәлдәрҙе лә билдәләргә кәрәк: беренсенән, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының барлыҡ башҡарма власть органдарында урындағы үҙидаралыҡтар территорияһында милли дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу өсөн яуаплы вазифалы кешеләрҙе билдәләргә ҡушылды. Элегерәк һәр муниципалитет башлығының шундай урынбаҫарҙары бар ине. Ләкин һуңғы йылдарҙағы оптималләштереү саралары, ҡыҫҡартыуҙар һөҙөмтәһендә был вазифалар ҙа ҡыҫҡартылды. Милли сәйәсәт, шул иҫәптән милли мәғариф менән хәҙер бер нисә орган шөғөлләнә, әммә берләштереүсе орган юҡ. Мәғариф бүлеге үҙ тармағын ҡарай, мәҙәниәт бүлеге - үҙенекен, спорт комитеттары - үҙ мәсьәләләрен хәл итә. Хәҙер иһә һәр муниципалитетта юғарыла әйтелгәндәрҙе берләштереүсе кеше буласаҡ, һәм был эш яңы йылға тиклем тормошҡа ашырылырға тейеш. Икенсенән, милли мәҙәниәттәрҙе һәм аҙ һанлы халыҡтарҙы һаҡлау йүнәлешендә милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу буйынса методик күрһәтмәләр барлыҡҡа киләсәк. Был документты беҙ тиҫтәләрсә йылдар көтәбеҙ. Рус теле буйынса совет, Милли сәйәсәт буйынса советтар бар. Әммә Рәсәй субъекттарына нисек эшләргә, милли сәйәсәтте нисек үткәрергә тигән күрһәтмә норматив планда ла, кәнәш формаһында ла булманы. Эйе, "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" закон бар, әммә ул милли сәйәсәт өлкәһендәге документ түгел. Ул бары тик телдәрҙе һаҡлауға йүнәлтелгән. Әлбиттә, тел - мәҙәниәтте үҫтереү нигеҙе. Әммә йолаларҙы, гөрөф-ғәҙәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау, уҡыусыларҙы тәрбиәләгәндә этнотуризм, этно, тыуған яҡтарҙы өйрәнеү йүнәлештәрен файҙаланыу, этномәҙәни белем биреү өлкәһенә бәйле башҡа саралар билдәләнмәгәне. Методик кимәлдә улар бар ине, хәҙер иһә был эш норматив кимәлгә күтәрелде.

**▸ Бер кемгә лә сер түгел, бөгөн беҙҙә мәктәптәрҙе дәреслектәр менән тәьмин итеү иң төп проблемаларҙың береһе булып тора, ә элекке китаптар менән уҡытыу закон боҙоу тип баһалана...**

- Ысынлап та, федераль исемлеккә ингән дәреслектәрҙең булмауы закон боҙоу тип иҫәпләнә. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 26-сы пункты дәреслектәр менән тәьмин итеү тураһында аныҡ әйтә: уҡыу планының инвариатив өлөшөндә тормошҡа ашырылған һәр предмет, шул иҫәптән туған тел булараҡ башҡорт теле лә дәреслектәр менән тәьмин ителергә тейеш. Федераль исемлектә юҡ икән, тимәк, ул дәреслек түгел. Әлеге ваҡытта туған телдәрҙән башҡорт теле буйынса - башланғыс, татар теленән - башланғыс һәм төп звено, сыуаш теленән башланғыс звено дәреслектәр менән тәьмин ителгән.

Хәл-торошсан сығыуҙың ниндәй юлын тәҡдим итәбеҙ? Беренсенән, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә барлыҡ дәреслектәрҙе уҡыу әсбабы итеп ҡайтанан баҫтырыу. Был, беҙ закон боҙоуға сик ҡуйҙыҡ, тигәнде аңлатмай, бары тик уны бер аҙ йомшартабыҙ, баҫымды кәметәбеҙ генә, сөнки бары тик вариатив өлөштәге предметтар ғына әсбаптар менән уҡытыла. Был да Стандарттар менән билдәләнгән. Беҙгә дәреслектәрҙе ентекле эшләргә кәрәк, булғандары өҫтәмәләр, үҙгәртеүҙәр, төҙәтеүҙәрҙе талап итә. Уҡытыу-методик комплекттары булмаған предметтар буйынса ла уйланырға урын бар. Әгәр субъекттар кимәлендә уҡыу әсбаптары юҡ икән, улар белем биреү ойошмаһы кимәлендә булһа ла тормошҡа ашырылырға тейеш. Шуға күрә уларҙың йөкмәткеһен, белем биреүҙе тамырынан үҙгәртергә кәрәк. Был проблеманы беҙ үҙебеҙ тыуҙырҙыҡ, һәм уны беҙҙең өсөн берәү ҙә килеп хәл итмәйәсәк. Мәсьәләгә үҙебеҙ нөктә ҡуйып, ошо уҡыу йылын предметты популярлаштырыуға һәм уны актуаллештереүгә бағышларға тейешбеҙ.

Шулай ҙа иң ҡатмарлы хәл башҡорт, татар, сыуаш телдәре буйынса түгел, ә туған тел булараҡ уҡытылған рус теле буйынса килеп тыуҙы. Бөгөн уҡыусыларҙың күпселеге, мәҫәлән, Өфөлә 118 мең уҡыусының 70 проценты туған тел тип рус телен һайлай. Әгәр башҡа туған телдәр буйынса дәреслектәр, методик әсбаптар булһа, туған рус теле буйынса бөтөнләй бер нәмә лә юҡ. Тиҙ арала был мәсьәлә хәл ителер, тип өмөтләнәбеҙ.

**▸ Ата-әсәләрҙең туған тел булараҡ рус телен һайлауының сәбәптәренең береһе, моғайын да, туған тел булараҡ рус телен уҡытҡанда уҡыусыларҙы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләүҙер?**

- Тикшереүҙәр барышында асыҡланыуынса, туған рус телен дәүләт рус теле менән алмаштыралар. Был - Стандарттарҙы тормошҡа ашырыуҙа тупаҫ хата. Бында иҫкәртеү генә түгел, ә Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекс ҡулланыла. Белем биреү учреждениеһы етәксеһе лә, Стандарттарҙы үтәмәүсе уҡытыусылар ҙа язаға тарттырыласаҡ. Дәүләт рус теле һәм туған рус теле - икеһе ике предмет, ике дисциплина, һөҙөмтәләр ҙә төрлөсә.

**▸ Башҡорт теле уҡытыусылары белдереүенсә, хәҙер класс журналдарын русса ғына тултырырға тигән талап булған икән. Хатта башҡорт теле дәресе буйынса ла...**

- Дәүләттә рәсми эш алып барыу "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законға ярашлы, дәүләт телендә алып барыла, урындағы закон менән тулыландырыла. "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы закон буйынса эш ике телдә - башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла ала. Был осраҡта, журнал белем биреү ойошмаһының рәсми документы булып тора, һәм уларҙың билдәлә һаҡлау ваҡыты бар. Шуға күрә, журнал йә рус телендә, йә рус һәм башҡорт телдәрендә тултырылырға тейеш. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре биттәре, әлбиттә, башҡортса тултырыла.

**▸ Уҡытыусыларҙың күп ваҡыты отчет тултырыу менән үтә...**

- Үкенескә күрә, бының менән килешәм. Бында министрлыҡ ҡына ғәйепле түгел, талаптар юғарынан килә. Моғайын да, был хәлдән сығыуҙың иң оптималь юлы - барлыҡ мәғлүмәттәрҙе электрон формаға күсереү, бер ни тиклем рәткә килтереүҙәр, сөнки һорау булғанда, ҡайһы бер документтарҙы эксель формаһында бер аҙ үҙгәртеү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Ни тиһәң дә, отчеттар, һандар бер үк, бары тик улар төрлө вариацияларҙа, төрлө формаларҙа талап ителә. Бөгөн бер һан бер колонкала торһа, иртәгә икенсеһендә күсә. Отчеттарҙы шулай яйға һалып алғанда, көсөргәнеште бер аҙ кәметергә мөмкин.

**▸ Элек башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытҡанда икенсе линия әсбаптары ҡулланыла ине, бөгөн өсөнсө линияға күсеү мәсьәләһе күтәрелә. Ошо осраҡта икенсе линияла ҡалырға мөмкинме - был һорау ҙа уҡытыусыларҙы борсой.**

- Икенсе линия - туған телдәр. Өсөнсөһө - дәүләт телдәре. Әгәр балалар дәүләт телен һайлаған икән, уларҙы бер нисек тә туған тел дәреслеге менән уҡытып булмай. Дәүләт телдәре дәүләт теле дәреслеге буйынса уҡытыла.

**▸ Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеүҙән баш тартҡан уҡыусыларҙы башҡалар дәрестә булған саҡта нимә менән мәшғүл итергә?**

- Был сәғәт барышында уларға ла белем алыу мөмкинлеге бирелә. Тик дәрестәр уҡытыу планының мотлаҡ иҫәпләнгән өлөшөнән түгел, ә факультатив йә өҫтәмә белем биреү өлкәһенән булырға тейеш. Әммә балалар ваҡыт уҙғарып, буш йөрөмәһен.

**1-4-се синыфтарҙа Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса туған телгә 3 сәғәт ҡаралған. Уларҙы ике сәғәткә тиклем ҡыҫҡартырға йәки 4 сәғәткәсә арттырырға мөмкинме?**

- Теге йәки был предметты уҡытыуға бүленгән сәғәттәр белем биреү ойошмаһы автономияһы ҡарамағына ҡарай. Бары тик уҡытыу-тематик планлаштырыу һәм предмет уҡытыусылары һорауы буйынса күпмелер сәғәтте бүлергә мөмкин, әммә туған тел мотлаҡ 3 сәғәт уҡытылырға тейеш, тигән регламент юҡ. Ул 4, хатта 5 сәғәт тә була ала. Мәктәптәр сәғәттәрҙе үҙҙәре бүлә. Беҙ бары тик ике нормативҡа нигеҙләнәбеҙ: беренсеһе - СанПин. Беренсе синыфтар өсөн аҙнаһына 21 сәғәт билдәләнгән икән, уны беҙ бер нисек тә арттыра алмайбыҙ; икенсеһе - белем биреүҙең билдәле кимәлендә Стандарттарҙы тормошҡа ашырыуҙың минималь һәм максималь сәғәттәре күләме. Башланғыс звенола ул - 3345, төп белем биреү звеноһында 6020 сәмаһы сәғәт.

**Әгәр мәктәптә параллель синыфтар юҡ икән, туған телдәрҙе, мәҫәлән, башҡорт телен уҡытыуҙы нисек ойошторорға?**

- Муниципаль берәмектәрҙең БР Мәғариф министрлығы менән килешеүендә кластарҙы ҡалала 20 һәм унан күберәк, ауылдарҙа 14 һәм унан күберәк бала булғанда бүлергә мөмкин. Әгәр ауыл мәктәбендә 13 бала икән, уны бүлеү мөмкин түгел. Шулай ҙа муниципалитет өҫтәмә финанстар бүлгәндә хәл-тороштан сығырға мөмкин, сөнки ата-әсәләрҙең, балаларҙың законлы вәкилдәренең фекерен иҫәпкә алмау ҙа законға тура килмәй. Класта 1 бала уҡырға теләйме, 3-мө, 7-ме - был уларҙың ҡануниәт менән нығытылған хоҡуғы. Шул уҡ ваҡытта "Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында" закондың 14-се статьяһында белем биреү ойошмаһының мөмкинлектәре хаҡында яҙылған. Йәғни, белем усағының, муниципалитет өҫтәмә финанслау бүлә икән, бер балаға ла туған телен уҡытыу мөмкинлеге бар. Шуға күрә, килешеүҙәр төҙөгәндә сиклəүҙәр булмаһын, күпме бала туған телен уҡырға теләй - шунса уҡыһын, нисә төркөм кәрәк - шунса булһын өсөн тырышырға кәрәк. Был артыҡ күп сығымдар талап итмәй.

**Яңыраҡ Рособрнадзор хеҙмәткәрҙәре республиканың мәғариф системаһын тикшерҙе. Тикшереү һөҙөмтәләре нисек?**

- Рәсәй Президентының август аҙағында Йошкар-Олалағы кәңәшмәлә биргән күрһәтмәләре беҙҙә нисек тормошҡа ашырылыуы тикшерелде. Рособрнадзор хеҙмәткәрҙәре республика баш ҡалаһының һәм райондарының 30-ға яҡын мәктәбен ҡараны һәм өҫтә әйтелгән күрһәтмәләрҙең үтәлеүен билдәләне. Шулай ҙа уҡыу-уҡытыу буйынса методик тәьминәт мәсьәләләре тулыһынса хәл ителмәгән - уларҙы республика етәкселеге контролгә алды һәм контролдә тота. Шуға күрә, был проблемаларҙың да яҡын арала хәл ителеүенә ышаныс бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Айбулат Вәкил улы әңгәмә барышында шундай матур һүҙҙәр әйтте: "Хеҙмәт юлын башлаған йәш педагог Ушинский үҙенең иң беренсе мәҡәләһендә былай тип яҙа: "Миллилек - һәр кешенең күңелендә бар нәмәнән тәрәндәрәк ята. Унан да тәрәндәрәк бер нәмә лә юҡ. Ул - нигеҙ. Ҡалғандары - өҫкө ҡоролма ғына. Базисты алып ташлаһаҡ - ҡоролма емереләсәк. Был миллилек үҙеңдең туған телеңде таныуҙан башлана. Шуға нигеҙҙе алып ташлаһаҡ, бөтөн ҡоролманы емерәсәкбеҙ". Аңлағанға - ишара.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## икенсе туған телем кеүек



**Үҙеңдең кем икәнеңде белгең килһә, күршеңдән һора, тиҙәр. Бөгөн туған телебеҙ, милләтебеҙ, илебеҙҙең киләсәген ҡайғыртып һүҙ күтәргәндә йәнәшәбеҙҙә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең дә был мәсьәләләргә ҡарата фекерен белге килә, әлбиттә. Ошо маҡсатты күҙҙә тотоп, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты проректоры Семен Николаевич Черновҡа өндәштек.**

**➔ Семен Николаевич, беҙ һеҙҙе саф башҡорт телендә һөйләшкән рус кешеһе булараҡ беләбеҙ. Телде нисек өйрәндегеҙ һәм тормошта ул һеҙгә кәрәк булдымы?**

- Мин икенсе милләт кешеһе булһам да, башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә уҡыйым һәм башҡорт телендә хаттар яҙам. Кеше маңлайына яҙылғанын күрә, ти башҡорттар. Атай-әсәйем партия ҡушыуы буйынса Башҡортостанға эшкә килгән һәм башҡорт ауылында төпләнеп тороп ҡалған. Мин бала саҡтан ауыл балалары менән уйнап, башҡортса һөйләшеп үҫтем. Беренсе синыфҡа башҡорт мәктәбенә уҡырға барҙым, башҡорт телен икенсе туған телем кеүек күрәм. Башҡортостанда йәшәгәс, башҡорт телен белеү минең өсөн бар яҡлап уңайлы, сөнки республикала был телдә аралашҡан кешеләр күп. Республиканың ике дәүләт телен дә яҡшы аңлауым, һөйләшеүем бары тик ярҙам ғына итә, русса ла, башҡортса ла төрлө кешеләр менән иркенләп аралаша, аңлаша алам. Был фекеремде балаларыма ла аңлатып үҫтерергә тырыштым, бөгөн улар башҡорт телендә минең кеүек үк юғары кимәлдә һөйләшә белмәһә лә, яҡшы аңлайҙар.

**➔ Бөгөн мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡыу-уҡытыу буйынса төрлө бәхәстәр сығып тора. Һеҙ был мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Оҙаҡ йылдар Сибай ҡалаһында мәктәп директоры булып эшләнем, шул дәүерҙә үк ҡайһы бер белем усағы етәкселәренең башҡорт телен уҡытыу буйынса ҡарашы оҡшамай торғайны. Беҙҙең мәктәптә башҡорт теле дәрестәре һәр саҡ булды, шулай уҡ "Тыуған яҡты өйрәнеү" дәресе лә уҡытыла ине. Унда балаларға Башҡортостандың тәбиғәте, башҡорт халҡы һәм уның йолалары, әҙәби, мәҙәни ҡаҙаныштары тураһында мәғлүмәттәр бирелә ине. Һөҙөмтәлә, бөтә балаларҙа ла телгә, мәҙәниәткә, туған республикабыҙға ҡыҙыҡһыныу бер кимәлдә булды. Үҙемдең балаларҙы шулай уҡ башҡортса уҡытырға тырыштым, улар факультатив дәрескә йөрөнө. Өлкән улым 6 синыфҡа тиклем башҡорт телен өйрәнде. Ҡыҙғанысҡа күрә, тейешле шарттар булмағас, балалар яйлап башҡорт телен уҡыуҙан ситләште. Күп мәктәптәрҙәге дәрестәр теҙмәһендә башҡорт теле дәресен йә "нулевой", йә иң һуңғы дәрес итеп ҡуя торғайныдар. Бала иптәштәре йоҡлап ятҡанда "нулевой" дәрестә ултырырға, йә бөтәһе лә ҡайтып киткәс, мәктәптә ултырып ҡалырға теләйме ни? Балаларҙың психологияһы шулай, улар белем кәрәк тип уйламай. "Уҡытыусығыҙ ауырып киткән, бөгөн дәрес булмай", тиһәләр ҙә "Ура!" ҡысҡырып ебәрә бит улар. Тимәк, мәктәптә башҡорт теле дәрестәренә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр өсөн шарттар ҙа, мәктәп коллективының рухлы булыуы ла кәрәк. Шәхсән үҙемә килгәндә, башҡорт телен уҡытыуға бик ыңғай ҡараштамын. Кеше ни тиклем телдәрҙе күберәк белә, шул тиклем яҡшы. Бына мин Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романын, Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһын башҡортса уҡыным. Төп нөсхәлә ул әҫәрҙәрҙе бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итәһең, бер генә һүҙ тотош дәүерҙе аңлатырға мөмкин.

**➔ Башҡорт халҡының холҡо, йәшәү рәүешенә ҡағылышлы фекерҙәрегеҙ ниндәй?**

- Ғүмер буйы башҡорттар араһында йәшәп, башҡортса һөйләшеп, үҙем дә башҡортҡа әйләнгәнмен инде мин. Ләкин мин быны ғорурланып әйтәм, бер ҙә кәмһенмәйем. Ошо оло тарихлы, мәҙәниәтле, иҫ киткес халыҡтың бер өлөшө булыуыма ғорурланам. Кешеләрҙең төрлөһө була, һәр милләттең яҡшыһы ла, яманы ла, батырҙары, атаҡлы ир-егеттәре, ҡатын-ҡыҙҙары була. Шуның кеүек, башҡорт халҡының да батырҙары, яҙыусылары, сәнғәт, иҡтисад, спорт - бөтә өлкәләр буйынса ла данлыҡлы егет-ҡыҙҙары күп. Ләкин мине бына нимә борсой: кемдәрҙер телем, милләтем тип хәбәр һалдыра, ә үҙенең эшләгән эштәре һөйләгән һүҙенә тап килмәй. Хатта студенттар менән аралашҡанда ла әйтәм: иң көслө тәрбиә алымы - ул үҙ миҫалыңда тәрбиәләү. Нимә һөйләйһең, шулай эшләйһең. Ә бер нәмә һөйләп, бөтөнләй икенсе төрлө эшләп, өсөнсө төрлө уйлап йөрөү ярамай. Һуңғы осорҙа бына шундай кешеләр демократияны буш ҡыуыҡ һүҙҙәргә әйләндерҙеләр, шул әҙерәк кәйефте ҡыра. Хатта ҡайһы берәүҙәр: "Мин башҡорт халҡы өсөн йәшәйем", - ти, ә үҙе халҡына, республикаға файҙалы бер нәмә эшләмәгән. Шуға, ошондай "батырҙар" менән һаҡ булырға кәрәк.

Ғөмүмән, мин кешене милләтенә ҡарап айырмайым. Иң мөһиме, кешенең тәртибе, холоҡ-фиғеле, атҡарған эштәре йәмғиәт ҡиммәттәренә, традицияларға, закондарға тап килһә - шундай шәхестәр менән аралашыуы оҡшай. Ә башҡорт халҡы иҫ киткес эшһөйәр, уның фольклоры үҫешкән, милли кейемдәре ниндәй сағыу, үҙҙәре баҫалҡы. Башҡорт игелекле, ярҙам итергә әҙер тора. Хатта үҙе етешһеҙ йәшәһә лә, кемгәләр ярҙам итеп, нимәһендер бүлеп бирергә әҙер генә тора.

Әлбиттә, ниндәй милләт араһында ла хәҙерге көндә эскән, эшһеҙ ятҡан кешеләр бар. Бигерәк тә ауыл йәштәре аптырата. Ауылда йәшәгән таныштарыма барһам, күршетирәнән йәштәр килеп сыға, һөйләшкән арала уларҙың "Ауылда эш юҡ", тигән һүҙҙәрҙе ҡолаҡҡа салына. Был хәбәр көләмәс кеүек яңғырай минең өсөн, сөнки нимәнимә, ә ауылда эш етерлек. Бер абзыйҙан: "Бына был кемдең текмәһе, бағанаһы сереп ҡолаған бит инде", - тип һорайым. "Минеке", ти абзый. Ә нишләп яңы бағана ултыртып, текмәне яңыртмаҫҡа инде? Уға аҡса кәрәкмәй, урман эргәлә генә. "Ҡалай күршең матур өй һалған, ике ҡатлы, бөхтә, семәрләп тороп эшләп ҡуйған. Ул нимә менән шөғөлләнә һуң?" - тием аптырап. Мыҫҡыл иткән кеүек яуап иштелә: "Эй, ул беҙҙең коммерсант. Ул миндек байләп, шуны һатып йәшәй"... Бына шундай хәлдәр, һөйләшеүҙәр борсолдора. Һау-сәләмәт ир-егеттәр, эш юҡ, тип илап тора. Башҡорттар араһында ла шундай ялҡаулыҡҡа һалышып, үҙ йүнен үҙе күрергә, тырышырға теләмәй йәшәүселәр күбәйеп бара, ҡыҙғанысҡа күрә...

**➔ Халыҡҡа әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?**

- Вуз етәксеһе булараҡ, миңә йәштәр менән бик тығыҙ бәйләнештә эшләргә, уларҙың донъяуи, тәрбиәүи һәм башҡа проблемаларына ҡолаҡ һалырға, хәл итешергә, кәңәштәр бирергә тура килә. Шуға әйтер һүҙемде нәҡ республика йәштәренә төбәйем. Тәрбиәгә нигеҙ тәү сиратта ғаиләлә һалына. Баланың шәхесе 3-5 йәшкә тиклем формалаша, йәш ата-әсәгә шул иң мөһим осорҙо һис кенә лә иғтибарһыҙ үткәреп ебәрергә ярамай. Быны иҫәпкә алып, беҙ ғаиләле студенттарыбыҙға айырым иҫтәк аҫтыҡ, улар үҙ сабыйҙарын үҙҙәре тәрбиәләһен, шул уҡ ваҡытта уҡыуын да ҡалдырмаһын, тип. Әйткәндәй, бына ошо 3-5 йәшкә тиклемге арауыҡта бала төрлө телдәрҙе лә тиҙ үҙләштерә, шул мәлдә уға еңел генә бер нисә телде өйрәтеп ҡалырға була. Ғөмүмән, йәштәргә балалары тәрбиәһенә иғтибарлы булырға кәрәк, тип әйтмәксемен. Сөнки рухлы, телһөйәр, илһөйәр киләсәк быуынды үҫтереү улар ҡулында.

Рухи тәрбиә йәһәтенән ғаиләлә лә, мәғариф учреждениеларында ла маҡсатлы эш алып барылырға тейеш. Беҙгә хәҙерге заманда бигерәк тә рухлы быуын үҫтереүгә иғтибар итеү зарур, сөнки рухлы кеше тап баяғы телгә алған насар ғәҙәттәргә бирелмәй. Уның эшләгән эше лә, һөйләгән һүҙе лә бер була, халыҡтың киләсәген дә хәстәрләүсән шәхес булып формалаша. Әлбиттә, рух бөтәһенә лә бирелмәй, бигерәк тә етәкселәргә етмәй ул. Шулай ҙа йәш быуын был турала ла уйланһа, бик яҡшы булыр ине. Кеше туған телен дә, халҡын да, үҙен дә яратырға тейеш. Әгәр ҙә ул үҙен яратмай икән, эргәһендә торған кешене лә ярата белмәй, ул саҡта халҡында ла эше булмай уның. Унан инде, йәштәр бирелгән мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланып, йәмғәт эштәрендә, уҡыуҙа, спортта, фәндә - бөтә өлкәләрҙә лә әүҙем ҡатнашып, юғары белемле һәм яҡшы белгес булырға ынтылһындар ине, тип теләйем.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# СУРЫТЫП АЛАЙЫҠ ӘЛЕ!

## Йәғни халҡыбыҙҙың булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, аҙ ғына шаштырыу өҫтәп һөйләү ғәҙәтен иҫкә төшөрөп алайыҡ



### САМОЛЕТТА

- Бер заман район үҙәктәренә кукурузник тигән бәләкәй генә самолет йөрөп ҡалды бит.

- Уңайлы була торғайны ул, ни тиһәң дә. Ашыҡҡан саҡта, һә тигәнсә барып етелә ине баш ҡалаға.

- Йыш йөрөлдө инде уның менән. Летчигы, самолетты һинең өсөн генә йөрөтәбеҙ, тип шаярта торғайны.

- Һин депутат булып алдың түгелме ни бергилке?

- Булдым. Эшселәрҙән - фәләнсә депутат, малсыларҙан - фәләнсә депутат, тип ғәҙел план бирелгән саҡта эләгеп ҡалдым мин дә.

Бер саҡ киттем тағы шул самолет менән баш ҡалаға. Шунда бер өлкән генә ағайҙы ла оҙатып ҡуйҙылар. Ағай, тип, илле-илле биштәрҙә булғандыр уҙа барһа. Күтәрелә башланыҡ һауаға. Самолет күтәрелгән һайын, ағайҙың күҙе аҡая бара. Шөр ебәрә, ахыры.

- Ай, әттәгенәһе, балалар ишле ине бит әле. Ай, Хоҙайым, әбейем хаҡына иҫән ҡалайым инде, - ти был үҙ алдына. Самолет тигеҙ урындан, арыу ғына барһа, тыныслана. Инде генә таулы ерҙәр башланһа, оҙон арба һымаҡ дыһырдоһор килә бит. Теге ағай тағы ҡурҡа башлай.

- Ай, әттәгенәһе, балалар ишле ине бит әле. Ай, әттәгенәһе, ҡатыным яңғыҙ башы ни эшләр икән? Әллә алдағы туҡталышта төшөп кенә ҡалайым да ҡуяйым микән?

Ағай ысынлап ҡурҡа ине. Нисек итеп йыуатайым икән, тип уйлап киләм. Тау өҫтөнән үткән саҡта ғына һелкетә, үтә ул, тип әйтеп ҡарайым, иғтибар ҙа итмәй.

- Ысынлап та, колхоз арбаһы һымаҡ була торғайны шул. Кеменә ҡарама, ауыҙында сепрәк була торғайны.

- Һөйләшеп бармаҫҡамы?

- Ни эшләп һөйләшмәҫкә булһын инде? Унда ауыҙына сепрәк тыҡмаһаң да һөйләшерлек рәт ҡалмай торғайны ул, күңел болғана ине. Һин нисек түҙгәнһеңдер улай, кеше йыуатырлыҡ дәрәжәлә.

- Мин инде таулы ергә етһәк, эсемде эскә үткәштергәнсе тартам да, яйлап ҡына тын бирә башлай торғайным. Өйрәнеп бөтөлгәйне инде.

- Ағай, алдағы туҡталышта төшөп ҡалырбыҙ ҙа ҡуйырбыҙ, былай булмаҫ, минең дә түҙемем бөттө, - тигән булдым, уның хәленә инеп. Кешенең хәленә инһәң, ыҡҡа килеп, һүҙеңә ҡолаҡ һала бит ул.

- Һин ни ғүмер буйы бисәләр командиры булғас, кеше яйына төшөнөп бөткәнһең инде.

- Ни эшләп бисәләр командиры булды?

- Ферма мөдире булды ул. Һауынсылар командиры.

- Бер аҙ серем итеп алаһыңмы, тип тә әйткәнһең түгелме ни?

- Улай тип тә ҡараным. Ҡайҙа ул, тигән була. Ул-был була ҡалһа, уянып та, һикереп тә өлгөрмәм, ти.

- "Ҡайышын нисек ысҡындырырға бының?" тип һорашҡан түгелме ни?

- Әлдә һин хәтерләйһең. Мин күбеһен онотоп бөткәнмен шул. Ул-был була ҡалһа, һикереп ҡалырбыҙ. Ҡайышын нисек ысҡындыралар бының, - тип һораша шул ағайым.

- Ҡайышын ысҡындырып тормайһың уның. Ултырғысы менән ҡуша тәкмәсләйһең. Шуның өсөн ҡулайлаштырып эшләгәндәр. Мягкая посадка, тигәнде ишеткәнең бармы? Ана шул ултырғыс менән ҡуша төшөүҙе әйтәләр бит, тием. Тәүҙә мин төшөрмөн, шунан һин һикерерһең, тием.

- Үҙең дә инде. Былай ҙа шөр ебәреп килгән кешене.

- Ике генә сәғәт килергә бит Өфөгә. Минутлап булһа ла алдаштырып алып барайым, тип һөйләнгән булам инде. Нисек итеп ҡапыл ғына торорға, нисек тәкмәсләргә - барыһын да ишаралап күрһәтеп һөйләйем ағайға.

- Үҙенән бигерәк бисәһен, балаларын йәлләп килеүен әйт әле һин уның.

- Шуға иғтибар иттем шул ағайға. Үҙен иҫкә лә алмай. Әйләнгән һайын балаларым да бисәм, тигән була. "Һинең дә хәлең мөшкөлмө? - тип һораны, икәүләшеп һикерербеҙ тигәс. - Төшәйек, ҡустым, төшәйек. Түҙер әмәл ҡалманы. Был ни, ауҙарып китмәҫ тимә. Тәкмәсләһәк тә, туңҡанлаһаҡ та - нисек тә ҡалайыҡ берәй туҡталышта" , - тигән булды. Бер аҙҙан Өфөгә лә еттек. "Төштөк, ағай", - тием. Хатта йәһәт йыйынды инде ағайың. Төшкәс, ҡарап торҙо ла: "Аһ, Өфө лә инде, ҡустым, килеп еткәнбеҙ икән дә. Аллаға шөкөр, балаларым ишле минең, ҡустым. Шулар бәхетенә имен генә килдем инде, тигән булды.

### ЗАҺИТТЫҢ МАШИНА АЛЫП ҠАЙТҠАНЫ

Ағайымдың иҫке машинаһында арыу ғына йөрөй башлағайным инде. Шуға яңы машинамды ҡыуып алып ҡайтҡан саҡта, ҡурҡмайынса, кәләште ултыртып алдым. Трассанан имен-аман үттем. Ҡала урамдары бер аҙ шөрләтә бит, әй. Тирә-яҡҡа ҡарау юҡ. Тик алда, тик юлда, тик светофорҙа ғына ике күҙ. Ҡыш, етмәһә, буранлабыраҡ тора. Кәләш - эргәмдә, һиҙәм, миңә ҡарағанда нығыраҡ борсола, тик борсолоуын эш менән баҫа. Минекенә ҡарағанда ла ҡатыраҡ уның эше. Ике яҡты ла, артты ла, алды ла ҡарап барырға, миңә ҡиммәтле күрһәтмәләр бирергә тейеш. Юл буйы тулы кеше. Улары ла үҙемдең саҡ килгәнде белмәйҙәр, ултыртыуҙы һорайҙар. Бер бармаҡ, ике бармаҡ күрһәтәләр. Эстән генә әйтеп киләм инде, бер-ике түгел, өс бармаҡлыҡ өс кешегә урыным бар ҙа ул, туҡтап, яңынан ҡуҙғалып китеүҙәре мең ғазап. Һеҙгә түгел, заправкаға ла туҡтаманым, бензинды канистрға тултырып алғайным, шуны ҡоя-ҡоя киләм.

- Бер тапҡыр туҡтап ҡарағайны ул, колонкаға тап килтерә алмай, үтә лә китә, үтә лә китә.

- Шунан кәләш әйтә, алыҫтараҡ туҡта ла, этеп алып барайыҡ. Кеше юҡта ғына, ти. Йәнәһе, машинабыҙ боҙолған инде. Баш эшләй ул минең кәләштең, Аллаға шөкөр. Таныш-тонош күреп ҡалһа, ғүмерлек лаҡапҡа ҡалырһың, тип, икенсе яйын таптым. Заправка тапҡырында туҡталып өйрәнгәнгә тиклем канистр менән йөрөттөм бензинды. Ҡала урамы буйлап киләм бер саҡ. Кәләшкә әйтәм, ҡайнештәрҙе алыҫтан уҡ күреп барырға кәрәк, тейем. Кәләш ҡайнештәрҙең кем икәнен белә инде. Алдан уҡ аңғарткайным.

- Улары кем була һуң? - тип һорай һөйләүсенең балдыҙы.

- Бажай ҙа машина йөрөтә бит, белмәйһеңме ни? - Заһит балдыҙына йылмайыбыраҡ ҡарап ала. - Апайыңдан һора. Беҙҙең терминдарҙы вис белә.

- Гаишниктарҙы шулай тиҙәр. Аҡса һорай ҙа торалар бит, ҡайнештәр һымаҡ.

- Апайың хәҙер кемдең ҡасан нимә күрһәткәненән тотош аңлай. Бармаҡ күрһәтһә, нисә кешегә урын һорай, ҡайнештәр таяҡтарын һелкетеп торһа - туҡтарға кәрәк, йоҙроҡ күрһәткәндәренә үҙе лә күрһәтә китә.

- Күрһәтеп китә тип, бер тапҡыр ныҡ асыуға тейгәс, машина ишегенән быяланың төшөрҙөм дә ынтылып тороп үҙем дә йоҙроҡ күрһәттем. Яй ғына килгәс, анларға тейеш бит инде шофер кеше, уҙ ҙа кит, Заһит тиҙләгән кәмәтә биреп тороп юл бирә. Ни эшләп йоҙроҡ күрһәтергә?

- Үтә яй килгәс, туҡтатып, еҫкәп ҡарап та бөттөләр инде. Шулай итеп, Медногорск урамы буйлап киләбеҙ. Урам сатына килеп еткәйнек, бер ир ҡыҙыл утҡа яйлап тороп юл аша сығып бара. Тормозға саҡ баҫып өлгөрҙөм. Шулай ҙа ипле генә килеп төкөнөм шикелле тегегә. Ах, харап булдыҡ, тинем дә юл сатында машинаның аварийкаһын тоҡандырып, һикереп төштөм.

- Йөҙө ап-аҡ булды Заһиттың.

- Үҙ ғүмеремдә кешегә тырнаҡ менән дә сиртмәгән кеше әҙәм тапатһын әле. Ағармаҫ урындан ағарырһың. Машинанан төштөм, тейәп алып бара һалайым больницаға, тип уйлайым бит инде. Быны гәжәп, юҡ бит теге әҙәм. Күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды. Бисә әйелә һалып машина аҫтын ҡарай. Унда ла юҡ теге. Мин әлеге лә баяғы, бисәгә ҡарайым, уның да башы етерлек түгел. Ҡайҙа булды һуң? Юҡ икән юҡ, кит тә бар бит инде. Намыҫ ҡушмай. Булған хәлде күҙ алдынан үткәрәм. Аҡрын ғына сығып бара ине ир кеше урам аша, ҡулында бер әйбере лә бар ине. Мин иплап кенә килеп төкөнөм тегегә. Шунан ул юҡ булды.

- Әйҙә, ҡуй, яңы бәлә көтөп торма, - тип ҡарайым Заһитҡа, юҡ, ҡуҙғалмай. - Әҙәм балаһы бит, табып, күңелде тыныслап китәйем. Аҙаҡ ҡайҙан табам мин уны, нисек танайым? - ти.

- Аҙаҡ нимәгә кәрәк ул һиңә?

- Күңелде тыныслап ҡуйыр өсөн. Юғиһә, машинама ултыра алмам бит башҡаса. Күңелде өйкәп тик торор ул, ти. Тере икәнен, үҙ аяҡтары менән атлап китеүҙәрен күреп тынысланайым, ти.

- Шул саҡ... Йәшәһен дә йәшәһен инде бисәкәйем, һин дә апайың һымаҡ уяу бул, балдыҙкайым, бажайға йөшәү рәхәтерәк булыр, апайың ул яҡҡа бик сос. Уң яҡлап юл сitendәге бейек көрттә ике аяҡ һелкенеп торғанын шәйләп ҡалған бит, рәхмәт яуғыры бисәкәй. Күп уйлап тормай, һикер тегенең эргәһенә.

- Мин ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалдым да, ана тора теге, тейем. Ҡайҙа тора, ти Заһит. Ана, баш түбән тора, тейем. Ялт итеп ҡалды. Һикерҙе көрткә. Һикереү ягына берәүгә лә ал бирмәне уҡыған саҡта ла.

- Ысынлап, һеҙ әҙнә менән беренсе класстан бергә бит әле.

- Беренсе класта дәфтәремә ҡара тамыҙғас, тиҙ генә яңыға алмаштырып биргәйне, был ҡыҙыҡай минеке булаҫаҡ, тип ҡарар иттем.

- Ете йәштә килә ти кешегә ундай уй.

- Килә. Зирәк кешегә килә. Беҙҙең нәҫелдә әүлиәләр булған. Шуларҙан ҡалған зирәклек.

- Шунан, шунан - һикерҙең теге кеше янына.

- Мин сосмон һеләүһен һымаҡ, ул минән дә сосораҡ булып сыҡҡан. Күҙ асып йомған арала нисек өлгөргән ул көрткә һикереп?

- Үлем ҡурҡынысы янағанда, кешегә әллә ҡайҙан көс килә ти бит ул.

- Шулайҙыр. Атыуса төкөп тә әйҙем, шул ыңғайға юҡ та булды. Тартып сығарҙым тегене. Баштүбән тороп хәле бөткән. Рәхмәттән башҡаны әйтмәй, бахырың. Шул тиклем арыным баштүбән тороп, машина аҫтында ла былай булмаҫ ине, һин бит аҡрын килә инең, моғайын, тапамаҫ инең, тип тә уйлап бөттөм, ти.

- Танып ҡалдыңмы?

- Һөйрәп сығарғас, машина янына шыуып төштөк инде. Ҡайҙа бараһың. Шул арала кеше йыйылып киткән. Хәҙер кеше шундай урынға театрға ҡарағанда эркелешеп килә бит ул. Театр уйлап сығарылғанды күрһәтә, ә был - тере тамаша. Шулайтып, бисә ҡотҡарҙы бәләнән. Теге рәхмәттәр әйтеп, ары атлай ғына башлағайны, көрттә тороп ҡалған пакеты иҫенә төшөп, кире боролған. Бисәкәй шатлығынан тау аҡтарырҙай булып тора ине, көрт йырып инеп тә китте, тегенең пакетын килтереп тә сығарҙы. Бисәләрҙе бушҡа уйлап сығармаған инде Хоҙай олатай. Рәхмәт яуғыры! Шулай ҡайтып еттек ауылға. Хәҙер иртән торһам да, кис ятһам да ирендәр бер доғаны ҡабатлай: Хоҙайыма рәхмәт, бисәм һау булһын.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ярлы йә ялҡау кешенең теле лә ярлы, ашау-эсеүҙән ары китмәй, ә ҡулы эш белгән, күҙе эш күргән, теле эште һөйләгән кешенең фекере киң, донъяһы етеш, уның күңеле лә бай, теле лә тулы.*



*АҒИНӘЙҘЕҢ ӘЙТКӘНЕ*

**Минең тыуған ағым Оло Эйек йылғаһы буйында "ынтымат кеше" тигән һүҙ бар: ул бик һирәк яңғырай, сөнки ундай һүҙгә тура килгәндәр ауылға берәү булһа - бик яҡшы. Ынтымат - йыйнаҡ, аккурат, алдан хәстәрле һәм маҡсатына ынтылышлы, тигәнде аңлата. Ысынлап та, ҡомартҡыны таныған, һаҡлаған, уның асылын, дәрәжәһен, әһәмиәтен аңлаған, әләф-тәләф итмәгән, кәрәк урыны-ваҡытында йәтешле ҡуллана белгән ынтымат кешеләр халыҡ араһында айырылып тора.**

# ЫНТЫМАТ САНИЯ ИНӘЙ

Ошондай ынтымат кешеләрҙең береһе - Сания Хәсән ҡыҙы Усманова менән мин 2010 йылда башлап таныштым. Республика Халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһы мөдире Кәримә Шәрип ҡыҙы Кайдалова менән бергә Өфө йылғаһы буйҙарына юл тоттоҡ. Ул бер нисә йыл буйы беҙҙе шул яҡҡа әйҙәләй: "Балаҡатай районы Билән ауылындағы "Тамбур" халыҡ клубы тураһында телевизион фильм төшөрөргә ваҡыт етте, улар республика фольклор байрамдарына ҡайыулы күлдәктәрен кейеп бара һәм бар халыҡты таң ҡалдыра, һандыҡ төптәрендә ятҡан "ҡайыуҙы яуҙыҡ, эскәтир, күлмәк" һымаҡ байлыҡтарын донъяға сығара", - ти. Һәм, ниһайәт, беҙ Балаҡатай ҡайыусыларын тыуған яҡтарында күрҙек. Билән, Кәркәй, Ҡайып, Әшәй халҡының йыр-моңон яңғыратҡан "Серҙәштәр" фольклор ансамблен тыңлайбыҙ, шулай уҡ баяғы элмә (тамбур) ҡайыуын тергеҙеүсе "Тамбур" этнографик төркөмөнә лә улар йөрөй икән. Был ҡатындар сағыштырмаса йәш - 50-60 йәшлектәр. Етәкселәре Венера менән Сәйҙә Әхтәмовадан балаҡатай ырыуы башҡорттарының кейемен төплө белеүсе өлкән быуын хаҡында һораша башлағас, улар Сания Усманованы телгә алды.

***Тормош юлы, туған-әкрәбәләре.*** Уның өйөнә барып ингәс тә ғәжәп йор телле, асыҡ зиһенле инәйҙе күреп, ҡыуанып киттем. Сания инәй Усманова һикһәнде ҡыуа, пенсияға сыҡҡандан бирле биш намаҙын ҡалдырмай, бик бөхтә һәм йыйнаҡ тора. Ул - хеҙмәт ветераны, дүрт миҙалы бар, 1931 йылғы, Балаҡатай районы Кәркәй ауылыныҡы. Ире Усманов Рахманғол Ҡайынғол ауылынан булған, вафатына ун йыл үткән. Өс бала тәрбиәләп үҫтергәндәр - ике ул, бер ҡыҙ. Ул күршелә генә йәшәгән ике улының ғаиләһенә кинәнеп, ҡартынан ҡалған йортта әлегә бер үҙе тора. Мал тота, бәйләм бәйләй, боронғоса күлдәк-камзулдар тегә. Уның һаҡсыллығы, хәтеренең төҙөклөгө, элекке кәсептәрҙе бөгөнгөләй итеп һөйләп биреүе һоҡландыра.

***Тел тамыры - эш-хеҙмәттә.*** Сания инәй менән әңгәмәнең тағы ла бик мөһим һәм ҡыҙыҡлы ягы шул - ул балаҡатай ырыуы башҡорттарының телендә һөйләшә, уның телмәрен өйрәнеп, башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш һөйләше буйынса фәнни хеҙмәт яҙырға була. Мәшһүр телсе ғалимә, башҡорт диалекттары һүҙлеге һәм картаһын төҙөгән фән докторы Нәжибә Мәкүтова тап ошо төбәктә бик күп һүҙ йыйыларын йыйып, әҙәби телде байытҡан. Сания инәй Усманова менән һөйләшкәндә күренекле ғалимә, "Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген" төҙөүҙә ҡатнашҡан Урия ханым Яруллинаның һүҙҙәре иҫкә төшә: "Телде һаҡлаусылар - булдыҡлы, егәрле, етеш һәм бай йәшәгән башҡорт ҡатындары. Ярлы йә ялҡау кешенең теле лә ярлы, ашау-эсеүҙән ары китмәй, ә ҡулы эш белгән, күҙе эш күргән, теле эште һөйләгән кешенең фекере киң, донъяһы етеш, уның күңеле лә бай, теле лә тулы".

***Ҡулында - эш, телендә - һүҙ.*** Ғалимәнең фекерен раҫлаған кеүек, Сания инәй һүҙ башлай: "Таштамаған ул үҙ телен беҙҙең халыҡ. Һөнәрҙе күп белде, һәр береһенә һүҙе-атамаһы бар. Инәйем, беҙ әсәйҙе инәй тибеҙ, инәйем һәләк тигәнсе оҫта булды, үҙе



әҙерләгән киндерҙе үҙе һуғып, кейем тегеп, беҙҙе кейендерҙе. Ағыбыҙҙа әсәй әҙерләп-иләп-тегеп биргән аяҡ кейеме булды. Имәнес күп, йәғни ифрат күп текте ул аяҡ кейемен, бөтә кеше белде уның оҫталығын, - тип хәтер йомғағын яйлап ҡына һүтә башлай Сания инәй, шунан берәм-берәм үҙенең зат-ырыуын иҫкә ала: - Нәсел ҙур булған, ҡарттайым Дилмөхәммәт хәҙрәт ине. Беҙ бурсыҡ араһынан. Эй, бурсыҡҡайым, тип ярatҡандыр инде балаһын - һимеҙ генә, тәйөрөм генә булғандыр инде балаһы. Түбән яҡта - ҡалаҡтар араһы, ә Жәләл ҡарттың тоҡомо - ҡуяндар..."

Закир Хәсән улы - ағайым, бер туғаным, совхозда иң беренсе управляющий, ауыл советы председателе. Ул эшләгәндә пенсия аҡсаһы башлап килде, Закир улымдың аҡсаһы, тип ҡыуана ине әбейҙәр..."

***Аяҡ кейемдәренә "төшеп киттек..."*** Сания Хәсән ҡыҙы үҙе бала саҡта кейгән аяҡ кейемдәрен бөгөнгөләй асыҡ хәтерләй, уларҙың нисек эшләнешен бәйнә-бәйнә һөйләп китә: "Аяҡ кейемебеҙ сабата булды. "Майҙап (майлап) ашаһаң, сабата ла тәмле". Шундай әйтем бар. Сабатаны Фазыл бабай эшләне, йүкә ҡабығынан сабата үрҙе. Йәш йүкә ҡабығы һыҙырабыҙ, алып барып бирһәк, яңы сабаталы булабыҙ. (Йүкә ҡабығын киптереп, он итеп тә тарттыралар, ашарға ла ярай ул. Уҫаҡ - осина, уны ауһаҡ, тибеҙ. Ауһаҡтың ҡабығын да ашаныҡ. Астыҡ (аслыҡ) бөтәһен дә ашарға мәжбүр итте).

Ҡышҡы аяҡ кейемен мал тиреһен иләп яһанылар. Инәйем оҫта булды, уның эшен күреп, беҙ ҡыҫылып-ярҙамлашып йөрөнөк. Арыш онон ҡайнатып, асытҡы эштәйҙәр. Һыйыр тиреһен һыҙырып, майынан таҙартып, йылы мунсала асытҡыға тығып ултырта, йылы ғына көйө тоталар - мунса гел йылы булһын. Йөнө әҙәләп бөткәнсе ҡарап ҡына тора. Уртаса йәшәгән тал ҡабығын тапай балта менән, шунан уны көнө буйы ҡаҙанда ҡайната, һары-көрән булып буяуы сыға, шуға теге тирене һалалар - күн булып сыға һыуынғас - дубить итеү була. Был тире күндән аяҡ кейеме тегелә. Һыйыр тиреһенән сарыҡ, ҡата, башмаҡ тәпәш, бейек башмаҡ - ҡунысты (ҡунислы) галош - шлепанцы, ситеккә шул кәрәк, йәмде (йәмле) була.

Кейгәнебеҙ **тула ойоҡ** булды. Ул нисек бәйҙәнә? Һарыҡ йөнөн йыуан итеп иләйһең, сыраҡтан дамбыр әнә кеүек ырғаҡ эшләп алалар, шул ырғаҡ менән йыуылмаған йөндән бәйма һымаҡ итеп ҙур оҙон ойоҡ бәйләйҙәр, шуны эсе һыуҙа һабындап ныҡ итеп ыуып-ыуып йыуалар. Аҙаҡ тандыр ғына мейестә киптереп алалар. Бешегә йөнө ныҡ тартылып ултыра, шул тула ойоҡ була.

**Ҡынжыраҡ** - ҡыныйраҡ, тибеҙ, ул күндән тегелә. Малды һуйғас, оло мал булырға тейеш - тубыҡ өлөшө айырым тунап алына. Тупсыуын, йәғни ҡаты ерен тунап алалар. Шуны талға һалалар - йомошатырға, уны асытҡыға һалмайҙар. Йөнөн тышта ҡалдырып, йөҙҙәгөнә - өҫ ягына - күн ҡуялар, табанда - тире, өҫтә - күн була. Үксәһен кәкрәтеп эшләйҙәр. Шуға **бышым** тегәләр - ҡалын киндер туҡыманан эшләнә - ике ҡаттап (ҡатлап) тегәләр, йөйө артта ҡала. Киндер бауҙы ишәләр ҙә өҫ яҡлап бышым эсенән үткәрәләр - артҡа килеп төшөп тора, шуны бәйләп ҡуялар.

**Сарыҡ** та шулай эшләнә, тик уның табаны ла, йөҙҙәге лә күндән була.

**Ҡата** - күндән була, йөҙҙәге лә, табаны ла. Ҡунысы бейек була, күндән эшләнә. Ҡунысына бышым тегелә, өҫтәп тегеп ҡуйыла, бау менән бәйләнә ҡынйыраҡ кеүек. Табаны мул булһын өсөн бөрөп тегәләр. Инәйем беҙгә гел тегеп кейҙерҙе. Ҡунысты (ҡунисы) галош кеүегерәк бейек була.

**Тәпәш башмаҡ, бейек башмаҡ** - тоташ күндән була. Үксә ҡуйылмай, әҙерәк кенә үксәлек ҡуялар - ҡаты-ҡото күнен ҡатлай ҙа ағас сөй эшләп, үксәне тишеп ныҒытып ҡуялар. Ҡайындан эштәгәндәр. Эс яҡҡа тырпайып сыҡһа, ауырттыра, сүкеш-фәлән менән туҡмап, тигеҙләтеп һуғып алаһың.

Китап яҙҙы был хаҡта Мурзанов Мөхәбулла, һорашып, яҙып сығарҙы, уға Мөхәмәтова Факия ла яҙып бирҙе. Балаҡатайҙағы Ғафура килтергән ул китапты Өфөнән".

***Ҡатын-ҡыҙ кейеме тураһында һөйләгәне.*** **"Шәлде һуғып** ябындылар - ситенән дүрт яҡлап уратып суҡ ҡуялар. Һарыҡ йөнөн иләп тереп алаһың да урынға (туҡыу-һуғыу станогы) оҙатып тырып алып һуғаһың, йөнен теләгәнсә ябын - йылы була, ныҡ була. Буяп тороу-фәлән булманы. **Ефәк шәл** - боронғоса "алалап" кәрән менән һуғылған, сукты (ситтәре суҡлы) була ("алалап" - "аҫалап" тигәнде аңлата, "кәрән" - ул махсус буяу менән кәрән төҫкә буялған йөн йәки киндер еп. Ҡаратал ҡабығын ҡайнатып буяу яһаныҡ).

**Әҙрәс бишмәт** - ҡатындарҙың һыйға киймәгә махсус тектергән бишмәте - тышы бәрхәттән, уҡа йә тәңкә баҫыла, эслеге һырыла.

**Билде (билле) камзул,** бәрхәт тышлы, эслек ҡуялар. Түгәрәкләп икешәр ҡат уҡа тегәләр. Туҡыма тауарҙын буйы, арҡауы (арҡырыһы) була бит. Тауар ыңғайына беселә, ыңғайына тегелә, тигәндәй. Тиҙ туҙмай рәтен белеп текһәң.

**Бишмәт** - сатин, бәрхәт тауарға бер ҡат эслек ҡуйып, йөн һалып, һырып тегелде боронғоһо, беҙ үҫкән саҡта юҡтыҡ (юҡлыҡ) булғас, мамыҡ ҡуйып һырыған бишмәт кейҙек. Тамғалар бишмәттә була ине.

**Сыба** - йылы сәкмән була ул (тәйһән, тәйән кейеүгә - көндәлеккә).

**Түшелдерек** эстән кейелә, бер ҡат **ситса күлдәк** өҫтөнән.

**Кәүҙәле алъяпҡыс**, тибеҙ, уныһы йәштәргә килешеп торған бер төрлө алъяпҡыс була. Кәүҙәле алъяпҡыстың арҡа - ябыҡ, түш - ябыҡ, бер яҡтан ҡултыҡ аҫҡа хәтле тегелә, икенсе яҡтан - элмәле ягында - дүрт һәҙәп (төймә) ҡуйыла".

***Баш кейемдәре, ҡалпаҡтар, сикә-ҡалпаҡ, тупый-ҡалпаҡ тураһында.*** "Ҡалпаҡ тигәс, ул ниндәй ҙә булһа **биҙәк эшләнгән** баш кейемен аңлата. Йәшерәк ҡатындар, килендәр тик **сикә-ҡалпаҡ** кейә. Сикә-ҡалпаҡ тәпәш кенә була, маңлайҙы ҡаплатыбыраҡ, алға төшөрөп кейелә, биҙәге генә күренеп тора. Тәңкәнән дә, уҡанан да, елбәҙәктән дә эшләйҙәр биҙәкте - берике иле кинлегендә, бер ярым сантиметр тирәһе. Сикә-ҡалпаҡты тоҡон еп менән елкә ягына тарттырып бәйләйҙәр, ҡуҙғалмай-нитмәй ныҡ тора, өҫтөнән яулыҡ бәйләйҙәр. Ниндәй матур тауар бар, шуны яулыҡ иттек, ерлеге бер төҫлө булғандың мөгөшөн (мөйөшөн) ҡайып ябына торғайыҡ. Бөгөнгөләй кашемир яулыҡтар һыйға ғына, йәғни ҡунаҡ-байрамға ғына булды.

Оло ҡатындар **тупый-ҡалпаҡ** кейә, ул теүәтәй кеүек йомро була, башҡа ятып, көпләнеп кенә тора. Тупыйҙы күпселеген ҡарсыҡтар кейә. Тупыйҙы төрлөсә һырыйҙар. Ҡамсат бүрек кеүек тә һырып кейәләр. Маңлайсаһына мәрйен-аҡыҡтар тегелә, шуға күрәме, ҡайсаҡ "аҡыҡ-ҡалпаҡ", тигән булып ебәрәләр.

Элек төрлө **уҡа** күп булды, тубалсылар (ҡырҡтартмасылар) йөрөй, тигән була торғайнылар. Ҡалпаҡ эшләмәгә төрлө нәмә алдыҡ уларҙан. Ҡалпаҡтың маңлай тәңгәлен биҙәмәгә кәрәкле ҡый-ҡыуат алабыҙ (ваҡ-төйәк):

**Өрфиә** - сукелгән ҡалай тәңкә, чеканный бляша, тигән булырҙар ине. **Ҡытай** - ялтыр ваҡ мәрйен, ул бик күп булды. **Балдаҡ** тигәне - уртаһы тишек түңәрәк ялтыр тәңкә булды. **Уҡа** - алтынлы-көмөшлө төрлө яҫылыҡтағы таҫма ине, фабричныйҙары ла осраны. **Елбәҙәк** - төрлө төҫтә емелдәп торған йылтыр йоҡа таҫма. **Ыырға** - көмөш тәңкәләрҙе сүкеп-ялғап эшләнгән биҙәүес, һирәк булды, ҡиммәтле буләк булып йөрөнө, муйсаға тегеп ҡуйылды, ҡолаҡҡа таҡмаға ла эшләнгәне бар ине.

Йәш килендәр сикә-ҡалпаҡ кейә, яулыҡ ябына, сәсте үрә, толомона сулпы тағa. Түшенә муйса кейә".

***Сын көмөштән булды беҙҙең муйса, ти Сания апай һәм дауам итә:*** **"Муйса** бик күп булған беҙҙең яҡта. Ҡатындарҙың күкрәген-түшен ҡаптап (ҡаплап) торған түшелдеректең бәләкәйерәге - **әмәйлек**, ҙурырағы - **муйса**. Муйса шау тәңкәнән тора, өҫ яҡлап эре көмөш тәңкәләр - һумдыҡтар (һумлыҡ) тегелә, уларҙы аҫтан-өҫтән уратып, вағыраҡ тәңкәләр теҙелә. Эреһе лә, вағы ла теҙеп тегелә, туры ла, ҡыйшыҡ (ҡыйыш) та китә. Күпме тәңкәң бар, тегә бир. Свердлау (Свердловск), Рәүҙә (Ревда) зауыттарында (завод) эшләгән ир-ат бай ҡайта, ҡатындары көмөш тәңкәле муйса кейә. Тәңкәне тишәләр ҙә тағалар. Муйсалар бик күп ине лә бит, жыйып сыктылар бит трактор эштәргә (эшләргә)!

(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

✓ ***Оло әбейҙәр ҙә муйса кейә, тик тәңкә урынына таҫма тегә - рәт-рәт ҡатлап таҫма йөрөтә, еңелгә килә, тәңкә сылтырауы нимәгә ул әбей кешегә, һөйәктәре шылтырамаһа ла бик арыу.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ДӨРӨҪ ТУҠЛАН

■ Балағыҙ ҡайһы бер ризыҡтарҙы үҙһенмәйме? Франция ғалимдары асыҡлауынса, бала ике йәштәр тирәһендә һайлана башлай. Күп балаларҙың был ғәҙәте 3 йәште уҙғас, юҡҡа сыға. Аҙыҡ менән беҙ организмға кәрәкле витаминдарҙы алабыҙ, шулай ҙа баланы үҙ теләгенән тыш ашатырға тырышыу ҙа кәрәкмәй. Башлыса улар емештәрҙән, йәшелсәнән һәм үҙенә таныш булмаған сит ризыҡтан баш тарта. Эш хатта шуға барып етә, ярһыған бала ашарға теләмәгән нәмәһен иҙәнгә ташлап ебәреүе лә бар. Шуға ла был йәһәттән проблемалар бар икән, тәү сиратта бала менән бергәләп ашарға әҙерләп ҡарағыҙ. Яратмайым тип бер тапҡыр баш тартҡан ризығын ҡабат-ҡабат тәҡдим итеүҙән тыйылмағыҙ. Аҙыҡты төрләндереп әҙерләү ҙә файҙалы. Үҙенә ят булған ризыҡты беренсе тапҡыр өйҙә түгел, әйтәйек, ҡунаҡта тәмләп ҡараһын. Ризыҡты өҫтәлгә биҙәп биреү ҙә ярҙам итә.

■ Тәүге тапҡырҙан уҡ кешегә нисек оҡшарға икәнен беләһегеҙме? Бары тик баш ҡағырға ғына кәрәк. Ошолай эшләгәндәр башҡаларға яғымлыраҡ, яҡшыраҡ булып күренә икән. Хоккайдо университеты ғалимдары 18 йәштән өлкән 49 ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙҙы тикшереп ҡараған. Уларҙың барыһына ла ҡәтғи ҡиәфәтле йөҙҙәргә ҡарағанда йылмайып баш ҡағыусы кешеләр күпкә яғымлыраҡ тойолған.

■ Дөрөҫ туҡланыу сирҙәрҙе булдырмай. Тафтс университеты хеҙмәткәрҙәре 7 төр аҙыҡ-түлектең хаҡын төшөрөп, диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән үлеүселәрҙең иҫәбен кәметергә була, тип иҫәпләй. Ҡайһы бер емешеләккә, йәшелсәгә, ярмаларға, сәтләүектәргә хаҡты 10 процентҡа кәметеп, эшкәртелмәгән иткә, татлы эсемлектәргә күтәргәндә, үлем статистикаһы ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине, ти улар. Мәҫәлән, Америка масштабында ғына йылына 23 мең үлемде кисектереү мөмкин булыр ине. Әгәр ҙә хаҡтарҙы 30 процентҡа үҙгәртһәң, үлем түбәнәйеүе күрһәткесе 3 тапҡырға кәмейәсәк. Ғалимдарҙың сығышында шулай тиелә: "Иң ҙур үҙгәрештәр емеш-еләккә һәм йәшелсәгә хаҡтарҙы төшөрөп, татлы эсемлектәргә күтәреү менән бәйле буласаҡ. Был халыҡты дөрөҫ туҡлана башлауға этәрер ине".

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары экспертары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡыныҫын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырыға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

*АҒИНӘЙҘЕҢ ӘЙТКӘНЕ*

# ЫНТЫМАТ САНИЯ ИНӘЙ

**(Башы 11-се биттә).**

Шау көмөш тәңкә юҡ бит ул хәҙер. Бөгөн тәңкә зырғып (кире ҡаҡлығып) тик тора, тишеп булмай.

Муйса бөтәбеҙҙә лә булды, тинем. Инәйем үҙе эшләне. Муйса дүрткел була - трапеция кеүек, өҫ яғы тарыраҡ, аҫ яғы киңерәк. Дүрт урындан бау тегеп, кәүҙәне уратып артҡа бәйләнә. Шуның менән бесән сапҡандар - буй-һынды һәләк ныҡ тота ла ул! Шунан **һағылдырыҡ** таға, **ҡалпаҡ** кейә, **ҡушъяулыҡ** ябына килен кеше. Һағылдырыҡ тартылып тора эйәген уратып, ыҫпаяҡай була бит - муйынфәләне күренмәй элмәйеп. Һағылдырыҡ килен булып төшкәндә үк кейелә. Бер йола бар: яңы төшкән киленде шау боронғоса кейендереп, бесән саптырғандар, ураҡҡа төшөргәндәр, оло мейес алдында ҡоймаҡ ҡойҙорғандар - тире тамһын да тиҙерәк ерекһен, тигәндәр. Насар аҡыл түгел бит? "Килен кеше - ким кеше, алабайға тиң кеше," тиһәләр ҙә, килендең ҡиәфәте бик күркәм булған. Артында сулпыһы сылтырап йөрөгән, сулпыһы булмаһа, бауҙың буйына өс ҡат итеп тәңкә тегеп алған - сылтырап торһон өсөн.

Оло әбейҙәр ҙә муйса кейә, тик тәңкә урынына таҫма тегә - рәт-рәт ҡатлап таҫма йөрөтә, еңелгә килә, тәңкә сылтырауы нимәгә ул әбей кешегә, һөйәктәре шылтырамаһа ла бик арыу.

Электән **кейемгә тәңкә ҡайыу** ғәҙәте булған. Совет власы сыҡҡас, тәңкәле кейемдәрҙе жыйып (йыйып) алғандар, мәжбүри бирергә ҡушылған. Трактор эшләргә кәрәк, тип әйттеләр, тигән була торғайнылар. Музейҙарҙан килеп тә байтаҡ әйберҙе жыйып киткәндәр.

***Ир-ат та кейемһеҙ йөрөмәй...*** Малайҙарға, ир-атҡа көн дә киймәгә **теүәтәй** (түбәтәй) тегәләр, өлгө менән тегеләә улар, һигеҙ өлгөнән ялғана тегеп, йомороға әйләнә. **Ҡырпыулы бүрек** - һарыҡ тиреһенән йоморо бүрек тегелә лә ҡырлатып аҡ тире - тар ғына аҡ ҡырпыу ҡуйыла, шул ҡырпыуҙы бүрек, ти торғайылар (торғайнылар), һарыҡ йөнө эскә ҡарап тора, бүрек тышты (тышлы) була, тышы - эшбит (йоҡа йөн туҡыма материал, тик сатин түгел). Ир-ат шуны кейҙе. Салауат батырҙың йәшел ҡамсат бүрке лә ана шулай йәшел эшбит менән тышланған, ҡиммәтле шәшке тиреһе менән ҡырлатылған ҡамсат бүрек булған инде. Байҙарса кейенгән бит ул, затлы тоҡом, старшина.

***Балаҡатай ырыуы ҡатындары элмәне белгән борондан...*** **Ҡайыу. Элмә** ҡайыу. Электән бар ҡайылған кейемдәр, беҙ белгәндән кейәләр. Ҡайыусы оҫта Мәликә әбей Айҙаҡайҙыҡы ине. Кәркәйгә Айҙаҡайҙан килде, ҡыҙы бында кейәүгә сыҡҡайны. Мәликә әбей һаңғырау ине, колхозда эшләй алманы, әммә бөтә ауылды ҡайып кейендерҙе. Ғүмеренә ҡайыны. Үлер саҡта ҡулының арты шеште. Уның ҡайыуҙары печатте (печатле) ине, хәҙерге ише түгел. Ғүмере буйы ҡайыны. Үтереп ҡайый. Печаттап ҡуя (Бик оҫта, тигән һүҙ быныһы. - **Авт.**). Мәликә оҫта килгәнсе лә ауылда ҡайыусылар бар ине. Сабира ла оҫталыҡҡа иреште һуңға табан ғына. Сабира апай Мәликә оҫтаға еткерҙе. Уның әсәһе Зәрә Закир ҡыҙы - Кәркәйҙеке ине. Имәнес күп (бик күп) ҡайыны улар, бөтә ауылға еткереп торҙолар.

Өй эсен жыйыштырыуға ҡайылған нәмә күп булды. **Буй ҡорма - ҡорғанаҡ**, тиҙәр, мейес башынан, ишек-тәҙрә баштарынан уратып ҡорола. Өй һәләк йәмде (бик йәмле) була.

Ҡашыяҡты (ҡаршы яҡ, ҡашығаяҡ яғы өсөн бүлмә) шаршау менән бүлеп ҡуялар. Ул шаршауһыҙ кейәүгә барыу - ғәрлектең дә ғәрлеге, ләкин ауыр замандарҙа уныһы ла онотолдо. Шулай ҙа, һүҙгә ҡалмайым тигәне, кешенән алып тороп булһа ла шаршау менән оҙатты киленде. Шаршауы менән ҡайны өйөндә бер мөйөштө бүләләр уға.

***Таҫтамал тураһында әйтмәй булмай...*** Һәләк дан (матур) була уныһы. Киндерҙән, етендән һуҡҡанды әйтәм. Күтәрелгән таҫтамал - һуҡҡан таҫтамал була. Инәйем һәләк күп һуҡты таҫтамалын да, шаршауын да. Урын артында шәбеләр менән күтәреп, күп ултырҙым мин дә. **Шәбе** - уны талдан шымартып эштәйҙәр (эшләйҙәр), урынға тартылған-оҙатылған ептәрҙең араһына тығып аралап-күтәртеп баралар. Шәбенән сүптәп ултыра бирәү, икенсеһе ептән ала. Был ваҡ эш ул, **сүптәү**, тиһәң, беҙҙеке яҡтыҡы кеше шундуҡ аңдай (аңлай). Ике кеше ултырып сүптәйһең - берәмләп-бертекләп тартып күтәреп ултыраһың таҫтамалдың үрәнәген - уныһы, оя, тип атала, бер күҙен дә яңылышырға һис ярамай, тотош сүптәүең боҙола. Кәшемир ептәр менән күтәрәһең **оя-оя**, хатта ваҡаҡа эш (ваҡтың да ваҡы) ул. Күҙ кәрәк, иҫ кәрәк, елкә кәрәк, тигәндәй... Һуғыуҙың эше күп, әрәсәһе (мәне, мәшәҡәте) етерлек. **Епте оҙатыу, күтәртеү, сүптәү** эше бар. **"Түгеү"**, тибеҙ - бер биҙәктең яртыһынан йәнәшәлә икенсе биҙәк яңынан башлана. **"Көрөҫтән алыу", "Ҡылыстан алыу"** тибеҙ. "Бер түгәй, бер ялан" - еп нәҙек булһа, буйын оҙатырға икенсе еп үткәрә өҫтәп, балаҫ ныҡ була.

***Туйға яҡынайҙыҡ түгелме?..*** Кейеү егетенә **"суптарҙы ыштан"** (киндерҙән сүптәрләп һуғылған ҡыҫҡа ба-

*ШАҢДАУ*

# АРЫҪЛАН ДА, ҺАРЫҠ ТА ТҮГЕЛБЕҘ,

## кеше булыуыбыҙға шөкөр итәйек!

**Гәзитебеҙҙең "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын уҡымайынса ҡалдырмайым. Ундағы аҡыл эйәләре әйткәндәр менән килешеүселәр ҙә, килешеп етмәүселәр ҙә булыуы - тәбиғи. Һәр кем үҙенсә фекерләй. Бына шуларҙы даими рәүештә уҡып бара торғас, бәғзе ваҡыт шуларҙың береһендә үҙеңә фекер үҫтерерлек орлоҡ та табыла.**



Күптән түгел, гәзиттең 47-се һанында ана шул рубрикалағы риүәйәттең аҙаҡҡы өлөшөнә иғтибар иттем. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһен иҫкә төшөрәйек: "Ҡуйы урман араһында йәшәгән бер тылсымсы үҙенең һарыҡ көтөүенән көн дә бер һарыҡты тотоп, һуйып ашай торған булған. Әммә һарыҡтар, был хужаның ниәтен һиҙенеп, ҡасып, йәшеренеп, уға ҡатмарлыҡтар тыуҙыра башлағас, тылсымсы үҙенең тылсымын эшкә егә. Ул һәр һарыҡтың күңеленә "Һин - һарыҡ түгел, ә ана теге - һарыҡ, һин минән ҡурҡма, мин бит һарыҡтарҙы ғына ашайым", тигән үәсүәсә ҡыла. Бынан һуң, үҙен кеше, арыҫлан йә бүре итеп тоя башлаған һарыҡтар тылсымсынан ҡасыу түгел, хатта уның был эшендә ярҙамсыға әүерелә. Үҙҙәрен бер аҙ "сәйер" тота, тип һанаған башҡа һарыҡтарҙы хужаға күрһәтеп, бер-береһен тоттора ла башлайҙар..."

Урыҫтарҙа ошондай әйтем йөрөй: "Сказка - ложь, да в ней - намек: добрым молодцам урок". Бына ошо риүәйәтте уҡып сыҡҡас, шунда уҡ үҙебеҙҙең атай-олатайҙарыбыҙҙың күптәнге түгел (бер быуыттан да әҙерәк) тарихы күҙ алдына килде. Утыҙынсы йылдар... "Күрше - күршене, туған - туғанды ошаҡлап, властарға тоттороп" йөрөгән дәүерҙәр хаҡында уҡып, әле булһа тетрәнәбеҙ. Ул мәлдәрҙә барлыҡ халыҡ вәкилдәренең, шул иҫәптән беҙҙең милләттәштәребеҙҙең дә һәммәһе үҙен "совет кешеһе" тип тойғанлығы асыҡ. Юғарыла иҫкә алған риүәйәтте уҡып, шул дәүер менән сағыштыра башлау менән, ысынлап та, халыҡтың ҡайһы бер өлөшө үҙен бүре, хатта арыҫлан итеп

✔ ***Шул тиклем бай тел - Балаҡатай яғының һөйләше. Ҡыҙыҡ, был төбәк теле Силәбе һәм Ҡурған яғы ялан ҡатайҙары һәм көнсығыш һөйләштәге һүҙъяһалыш формаларын, ғәйнә һүҙҙәрен бергә туплаған...***



лаҡлы эске ыштан) һуғыла - сискәләре (сәскәләре) әҙ генә, һирәк кенә, урыны-урыны менән генә күтәрелгән була. Туйға килешкән саҡта уҡ кейәүгә тип әҙерләгән нәмәне күрһәтәләр. Йәнәһе, энә-еп тота белмәһәң, ҡара уны, ҡыҙый...

***Морондоҡ нимә ул тимәгеҙ, бик кәрәк кеше ул.*** **Морондоҡ инәй, морондоҡ** әтей була. Киленде кем килтерә, шул билдәләй. Йәғни, килен төшөргән ҡәйнә, алдан әйтеп, буласаҡ киленгә морондоҡ инәй-әтей билдәләп ҡуя. Кейәү яғынан ҡыҙ туғандар килен кешегә морондоҡ инәй булырға тейеш түгел, бары тик ир туғандар яғынан ғына - ире менән ҡатыны бергә - морондоҡ инәй-әтей була ала. Уларҙың береһе килен килгәнсе йә үлеп китһә, йә берәй эш менән ситкә сығып китергә тура килһә (яуға, эш-хеҙмәткә), был пар киленгә морондоҡ инәй-әтей була алмай, уны, һис шикһеҙ, парлы "морондоҡ" ҡаршыларға тейеш. Килен уларға тәғәйенләп бүләк әҙерләй - морондоҡ инәйгә алъяпҡыс ҡайып килтерә, морондоҡ әтейгә ҡайыулы таҫтамал бирә. Морондоҡ инәй менән әтей был бүләктәрҙе бик ҙур хөрмәт белдереп, ҡабул итә, киленде ҡоттап, яҡшы һүҙҙәр әйтеп, теләктәр теләп, морондоҡ инәй алъяпҡысты кейә, морондоҡ әтей таҫтамалды үҙенең яурынбашына ҡуйып, килен төшөргән ерҙә хужа булып, күҙ-ҡолаҡ булып ҡатнашып йөрөй. Кейәүҙең ата-инәһе менән килендең морондоҡ инәһе-атаһы бер-береһенә **"уртаҡ"** тип өндәшә башлай.

Морондоҡ инәй яңы төшкән киленде уны-быны менән таныштырып, өйрәтеп, сер бүлешеп, ғүмер буйы ҡурсып тора торған бер яҡын кеше була. Морондоҡ әтей ҙә киленгә, йәш ғаиләгә ярҙамға, кәңәшкә гел генә әҙер тора. Минең дә морондоҡ ҡыҙым бар. Ул миңә, әней, ти, мин, ҡыҙым, тием. Бөтә кеше шулай яҡын итә, борондан ҡалған йола. Балалары миңә ҡартинәй, ти, хатта балаларының балалары ла мине ҡартинәй, тип йөрөтә.

Килендең килеүенә морондоҡ инәй көтөп тора. Бал ҡаптыра, май ҡаптыра, мендәргә баҫтыра. Ҡәйнә үҙенсә **тыпыстай** - әҙерләнә, йүгереп йөрөй, бейеп йөрөй, кинәнеп ҡаршы ала.

Киленде **һыу баштатыу** (һыу юлы күрһәтеү, һыу башлатыу) - оло йола. Уны ла морондоҡ инәй хәстәрләй - силәген-көйәнтәһен әҙерләй, килендең бүләктәрен барлап ҡуя.

***Элдекте беҙ бик нығ белдек...*** Килен бүләктәре араһында **"элдек"** тигән бүләк була, төрлө йөн ептәрҙән үреп-ишеп, остарына суҡлап, бала-сағаға, йәштәргә таратырға күп итеп эшләнә ул, егерме-илле элдек була. Һикһәнтуҡһанға ла еткерәләр, әкрәбәһе күп булғаны. Күрше-күлән тиҙ генә жыйылышып, эштәп бирәбеҙ элдеген дә, таҫтамалын, алъяпҡыстарын да ҡайышабыҙ. Элдекте бергә ишәһең, кис ултырып, берәү тотоп тора, икенсеһе ишә. Кеше булмаһа, берәй нәмәгә элеп тормаға кәрәк. Йәш ғаилә бәхетлебергә йәшәмәгә тип теләп үрелә ул. Элдек яһамаға элек йөн ептән бигерәк, киже йәки етен еп тотона торғайнығ.

Киленде һыу баштатыуға (башлатыуға) алып киткәндә морондоҡ инәй, кейәү егете бергә була, элдекте шунда тараталар. Кейәү егете ҡыйыҡ башына менеп, жыйналған халыҡ өҫтөнә элдек ырғыта. Бала-саға ярышып йыйып ала. Һәләк күңелле була. Бала-саға, йәштәр зыу килеп таратып ала, берҙе алһа, тағы һорайҙар... Әбейҙәр ҙә болаша... Беҙҙә элдекһеҙ туй үтмәй. Иң көтөп алынған күренеш, иң матур иҫтәлекле бүләк - элдек. "Кем туйында булдығыҙ, элдектәре ҡандай матур эштәлгән",- тип кинәнешеп ҡарайҙар туйҙан ҡайтҡас. Тәҙрә башына элеп ҡуябыҙ, көҙгөгә эләбеҙ. Таштамайбыҙ, оҙаҡ һаҡтайбыҙ элдектәрҙе, жыйылып китә төрҙә-төрҙәһә.

***Килен күреү - йәшәмәккә юл биреү.*** Морондоҡ инәй менән морондоҡ әтей **күрнис** (күренеш) ваҡытында ла иң төп башлаусы, ойоштороусы, килендең бирнәһен күрһәтеп, уға ярҙам итеүсе, бүләктәрен таратыусы, төшкән йортонда урынлаштырыусы була. Ауыл халҡы, күрше-тирә, кейәүҙең туғандары килен күрергә, бирнәһен ҡарарға, **күрнис алырға** тип килә. Килен бүләге - ҡыҙҙарға ҡайыуҙы алъяпҡыстар, малайҙарға ҡайыуҙы ҡулъяулыҡтар инде.

Килендең ҡулдәктәрен дә ҡарайҙар, тегелешен тикшерәләр, сағыштыралар, өйрәнәләр. **Һоҫтандап тегеү** тигән бер ысул сыҡты - встречная складка - һоҫтан (складка) һайын аҡ һәҙәп (һиҙәп, төймә) ҡуйыла. Уғата матур була.

**Кейәү мендәре** - 30-ға 40 сантиметр тирәһе ҙурлығы, мөгөштәре суҡтанып тора (мөйөштәре суҡланып), ҡайылған була (ҡайыулы). Кейәү ҡыҙы оҙатып алып ҡайтып киткән саҡта мендәрен эләктереп, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып алып сығып китә ҡыҙҙы атай өйөнән. Уны еңгәйҙәр бирә, шаяртыпкөләп тапшыралар кейәүгә. Бирнә араһында була ул мендәр.

## Әңгәмә тамам

Ынтымат шәхес - Сания инәй Усманованың белгән-күргәненең, хәтирәләренең иге-сиге юҡ. Берҙән, йөр-шаян теле кинәндерә, икенсенән, башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш диалекты үҙенсәлектәрен күреп, яңы йондоҙ аҫҡандай, ғәжәпләнәһең - шул тиклем бай тел - Балаҡатай яғының һөйләше. Әҙәби телгә шул һинйыларҙы тиҙерәк индерәһе ине, бер һүҙен дә туҙҙырмай һаҡларға ине. Ҡыҙыҡ, был төбәк теле Силәбе һәм Ҡурған яғы ялан ҡатайҙары һәм көнсығыш һөйләштәге һүҙъяһалыш формаларын, ғәйнә һүҙҙәрен бергә туплаған... Мин Сания инәй менән һөйләшкәндәрҙе мөмкин хәтле үҙгәртмәй һаҡларға тырыштым был яҙмала - тере телдең көсө, дәрте, телмәр ағышы ла һиҙелер, тип өмөтләндем.

Йәнә, башҡорт милли музыка ҡоралдарынан был төбәктә ҡумыҙҙың ни хәтле нығ таралыуы хаҡында тулы мәғлүмәт бирә ул. Ҡумыҙсылар тотош ансамбль менән теҙелешеп уйнағаны, төрлө ҡумыҙҙарҙы күҙ алдына килә, ағас, ҡаурый, һөйәк ҡумыҙҙарҙан һирпелгән тылсымлы сың-моңдар ҡолаҡҡа яғыла...

**Сәрүәр СУРИНА.**

хис итеп, ҡалған күпселекте һарыҡҡа тиңләгәндер һымаҡ тойғолар ҡала...

Әсәйем мәрхүмәнең үҙенең атаһы, йәғни, Мөхәммәтйән ҡартатайым хаҡында һөйләгәндәре һаман хәтеремдә. Ҡырҡ дүрт йәшендә ҡартатайым Беренсе Бөтә донъя ("ярман") һуғышына алынып, күпмелер һуғыштан һуң, немецтарға пленға төшөп, шунда тағы биш йылға яҡын йөрөп ҡайтҡанда илдә инде совет власы урынлашҡан була. 1933 йылда ауылдағы ике активист йәш егет властарға бер ниндәй граждандар һуғышында ла ҡатнашлыҡ күрһәтмәгән, тик һунарсылыҡ менән генә шөғөлләнгән, дин юлында булған ҡартатайым өҫтөнән (уға инде 63 йәш була) "кулак"лыҡта ғәйепләп "донос" яҙып бирә. Оҙаҡламай милиционерҙар килеп, ҡартатайҙы Баймаҡҡа алып та китәләр. Күпмелер ваҡыттан һуң суд була. Судта әлеге ялыу яҙған егеттәр "был ҡарт фәлән йылда өйләнеп, ата-әсәһенән "башҡа" сыҡҡанда, уның фәләнсә йылҡыһы, һыйыры, һарыҡтары булған. Өҫтәүенә, батраҡлыҡта малай тота..." тигәнерәк формала суд органдарына "күрһәтмә" биргән. Ҡартатайым (1870 йылда тыуған, Лениндың йәштәше!) фронтовик, "донъя күргән" кеше, ярайһы ғына ҡыйыу, һүҙгә лә оҫта булғандыр, күрәһең, ҡойолоп төшмәгән. Ул өйләнеп, башҡа сыҡҡанда, бына ошо егеттәрҙең хатта әсәләре лә әле тик имгәкләп йөрөгән сабый балалар ғына булыуы хаҡында һөйләп биргән: "...Судья иптәш, һорағыҙ әле, был малайҙар минең ҡасан һәм күпме мал-мөлкәтем булғаны хаҡында шунса мәғлүмәтте ҡайҙан алғандар икән? - тигән ҡартатайым ҡыйыу ғына. - Икенсенән, миндә хәҙерге көндә "батраҡ" тип аталған малайҙың аслыҡ йылында атаәсәһеҙ, үкһеҙ етем ҡалған бала булыуы хаҡында бөтә ауыл халҡы белә. Мин уны ҡарап үҫтереүҙе үҙ өҫтөмә алғанмын..." Судья был хаҡта әлеге егеттәрҙән һорағас, улар ялыуҙы башҡаларҙан ишеткән имеш-мимештәр буйынса яҙғанлығын танырға мәжбүр була. Һәм, ышанаһығыҙмы, юҡмы: ҡартатайым аҡлана! Уны суд залында уҡ азат итеп, өйөнә ҡайтарып ебәрәләр. Ул заман өсөн кеше ышанмаҫлыҡ хәл була был. Әлеге ғәҙел, ҡыйыу судьяның артабанғы тормошон, әлбиттә, белмәйем, әммә уға ахирәттә Аллаһы Тәғәлә әжер-сауабын насип итһен, тип һорайым. Ул саҡта ҡулға алып та, кешене аҡлаған осраҡтар, оло үкенескә, бик һирәк кенә булған бит...

Ялыу яҙған ике егеттең береһе ҡартатайым менән фамилиялаш, хатта алыҫыраҡ ҡына булһа ла туған тейеш тә булған бит, ауыҙыңа май тунғыры!.. Ул, юғарыла әйтмешләй, үҙен бер аҙ "бүре" образында күрергә тырышҡан һарыҡҡа оҡшаш, тип күҙ алдына килеп баҫты хәҙер. Ни өсөн? Ҡартатайым, аҡланып, күп тә тормаҫтан, әлеге ялыусы йәш егеттәрҙең береһен ниҙәлер ғәйепләп, алып та китәләр. Уның да, моғайын, төрмәгә ултырырлыҡ һис бер енәйәт ҡылмағанлығы хаҡында фаразлау кәрәктер. Әммә был ошаҡсы кешегә лә икенсе бер ошаҡсы ғәйеп таҡҡан бит...

Был, ҡәҙерле туғандар, теге йәки был кешегә үсәү түгел, әлбиттә, ә шул осорҙа йәшәгән бар халҡыбыҙҙың башына төшкән оло ҡайғы. Шулай уҡ үҙҙәрен "арыҫлан"ға һанап йөрөгәндәрҙең дә баштары киткән миҫалдар етерлек тә баһа! Илленсе йылдар башында "Ил атаһы" донъялыҡтан киткәс, ҙур ғына урындар биләгән НКВД етәкселәренең үҙҙәренең дә әлеге "һарыҡ"тарға сыҡҡан хөкөм ҡарары менән уртаҡлашыуы быға асыҡ миҫал. Ниндәйҙер яңылыш әйтелгән бер һүҙ арҡаһында ла иркенән мәхрүм ителгән кешеләр шулай уҡ бихисап булған. Бына шундай ауыр осорҙо үҙ башынан үткәргән халҡыбыҙ.

Юғарыла әйткән рубриканың аҙағында ошондай һорау ҡуйылған: "Ә һин үҙеңде кем тип уйлайһың: арыҫланмы, бүреме, әллә кешеме?" Минеңсә, беребеҙҙең дә үҙебеҙҙе арыҫлан, йәиһә бүре итеп тойорға хаҡыбыҙ юҡ. Әле Рәсәй, донъя яңылыҡтарынан ишетеп-күреп торабыҙ. Йә унда, йә бында "арыҫлан"мы ул, "бүре"ме, ҡапҡанға эләккеләп торалар. Былдай нәмәнән һис кем дә гарантияланмаған. Шунлыҡтан, һәр кемебеҙ ҙә үҙебеҙҙе фәҡәт кеше тип кенә һанарға тейешбеҙ, әммә һарыҡ тип түгел...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

*Әгәр тормош менән алыша башлаһаң, ул һәр саҡ еңеүсе була. Күңел тыныслығы теләйһегеҙме? Үҙегеҙ менән булған нәмәләрҙе "насар" һәм "яҡшы"ға бүлеүҙән туҡтағыҙ.*

### Уңыш

Бер крәҫтиән йәшәгән. Уның улы, хужалығында бер аты булған. Бер ваҡыт аты юғалған һәм күршеләре уны: "Эх, ҡалай насар булған, атың юғалған", - тип йәлләгән. "Кем генә белә инде, насармы, яҡшымы икәнен", - тигән ҡарт. "Аңлашылып тора инде, насар булған", - тип һығымта яһаған күрше-тирә. Бер аҙна үткәс, ат үҙе генә түгел, бер өйөр ҡырағай аттар эйәртеп ҡайта. Күршеләре тағы ла йыйылышып: "Ҡалай шәп булған, атың да ҡайтты, тағы нисәмәне эйәртеп алып ҡайтты", - ти. Крәҫтиән: "Шәпме, насармы икәнен кем белә инде", - тип яуаплай. Икенсе көн улы ҡырағай аттарҙы өйрәтергә була һәм береһенән ҡолап төшөп, аяғын һындыра. Күршеләре хужаны йыуатып: "Улыңа ҡалай насар булған", - ти. Крәҫтиән тағы үҙенсә яуаплай: "Кем белә инде насармы, яҡшымы икәнен". Күршеләре түҙмәй, быны әрләп ташлай: "Әлбиттә, насар, ә һин - ҡарт ахмаҡ!" Бер аҙна ла үтмәй, ауылға хәрбиҙәр килеп тула һәм барлыҡ сәләмәт егеттәрҙе үҙҙәре менән алып китә, крәҫтиәндең аяғы һынған улы тороп ҡала. Тағы ла күршеләре йыйылып: "Ҡалай яҡшы булған", - тип ҡыуаныша. Крәҫтиән генә иҫе китмәй: "Кем белә инде... " - тип яуаплай.

Ғүмер буйы ваҡиғаларҙы "яҡшыһы - бында, насары - тегендә" тип бүлергә мөмкин. Әммә бында бер мәғәнә юҡ. Тотош картинаның бер процентын да күрмәйенсә, нисек итеп үҙең менән фажиғә булды, тип әйтә алаһың. Тормошонда барыһы ла арҡыры килеүгә ышанаһың икән, шулай буласаҡ та. Әгәр көндәр буйы асыулы йәки ҡурҡып йөрөһәң, бер нәмә лә яҡшыға алып килмәйәсәк. Донъяға ҡарашың үҙгәреү менән тирә-яғың да үҙгәрәсәк. Мәҫәлән, самолетта урын етмәне, ти, һәм һеҙ үҙегеҙҙе: "Ҡалай насар, мин ашығам, мине кешеләр көтә, нисектер ошо рейсҡа эләгергә кәрәк", - тип "ашай" башлайһығыҙ. Әммә ошо көйөфтә булыуығыҙ хәлдәрҙе ҡатмарлаштыра ғына. Эргәгеҙҙән үтеп китеүселәр этеп-төртә, кемдер өҫтөгөҙгә кофе түгә, һуңынан багажығыҙ юғала. Әгәр һеҙ тормош менән көрәшәһегеҙ икән, тормош барыбер еңеүсе булып сыға!

Әммә үҙегеҙгә: "Тормошомда осраҡлыҡтар булмай. Шулай килеп сыҡҡан икән, тимәк, мин тап ошо урында булырға тейешмен", - тиеү менән барыһы ла яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлай. Ҡайһандыр элекке дуҫығыҙ пәйҙә була йәки һеҙ яңы кешеләр менән танышаһығыҙ, китап уҡып алыр өсөн мөмкинлек сығыуға ҡыуанаһығыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә - тормош йәйләнә! Әгәр күңел тыныслығы теләйһегеҙ икән, ваҡиғаларҙы "яҡшы" һәм "насар"ға бүлеүҙе туҡтатығыҙ. Ябайлаштырып әйткәндә, тирә-яҡты һәм ундағы ваҡиғаларҙы ҡабул итеүҙең ике генә ысулы бар:

*Донъя - ул тотош хаос.*

*Донъяла бөтөн нәмә яҡшы, һәйбәт.*

**Эндрю МӘТЬЮЗ.**

**(Дауамы бар).**



## 18 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 02.15, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 01.15 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 9-я и 10-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Ошибка", "Закон парных случаев". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Каприз". Детективный сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**Профилактика на канале.**
**14.00 "Итоги недели".**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 20.15 Новости.**
**16.45 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Учим башкирский язык".**
**17.15 "Провинция Аньхой" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 23.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Вечерний телецентр" (12+).**
**19.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.00 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Ак Барс" (Казань)- "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Невероятное путешествие мистера Спивета". Худ. фильм (6+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 19 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.25, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.25 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.35 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 00.30 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 11-я и 12-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.15 Ночные новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". "Ограбление инкассаторов", "Шантаж". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Достойный представитель". Сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая перемена". Сериал (6+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Гость". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 20 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.25, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.35 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 00.30 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 13-я и 14-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.15 Ночные новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Конечная остановка". Сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая перемена". Сериал (6+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 24.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.00 "Ирина Роднина. Женщина с характером" (12+).**
**17.45 "Орнамент (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. ХК "Сочи" (Сочи) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**00.30 "Ограбление по-французски". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (12+).**

## 21 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.05, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.40, 03.25 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 02.20, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 01.25 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 15-я и 16-я, заключительная, серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Женщина для двоих". Сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая перемена". Сериал (6+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Ирина Роднина. Женщина с характером" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Грязные игры". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 22 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 04.20 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
23.30 "Голос". Новый сезон (12+).
01.30 "Вечерний Ургант" (16+).
02.25 "Родительский беспредел". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Полицейский участок". "Насилие", "Засада". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.15 "Недотрога". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
03.20 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая перемена". Сериал (6+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**
**14.00 "Кунелем-мондары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан"**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Неизвестный Башкортостан"**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**24.00 "Отпетые напарники". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.15 М.Гафури. "Красная звезда" (12+).**

## 23 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Максим Перепелица". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Спорт".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Георгий Вицин. "Чей туфля!"
11.20 "Летучий отряд".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.15 "Александр Зацепин". "Мне уже не страшно..." (12+).
14.00 Юбилейный вечер Александра Зацепина (12+).
15.50 "Сергей Бодров". "В чем сила, брат?" (12+).
16.50 Футбол. Чемпионат Испании. "Реал" (Мадрид) - "Барселона". Прямой эфир.
19.00 "Угадай мелодию".
19.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
21.15 "Время".
21.20 "Голос" (12+).
23.15 "Прожекторперисхилтон" (16+).
23.50 "Короли фанеры" (16+).
00.40 "Бумераг". Драма (16+).
02.35 "Обратная сторона полуночи". Триллер (16+).

### РОССИЯ 1
04.40 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
14.00 "Она сбила летчика". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!". Ток-шоу
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Крылья Пегаса". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.55 "В плену обмана". Худ. фильм (12+).
02.55 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Детективный сериал.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Князь Владимир" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Это мы!" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**11.45 "Замандаш".**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Дарю песню" (12+).**
**15.20 Хоккей. КХЛ. ХК "Сибирь" (Новосибирская область) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**18.00 "Звездный Байыҡ" (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 01.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**24.00 "Все могу". Худ. фильм (16+).**
**02.15 М.Карим. "Страна Айгуль" (12+).**

## 24 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10, 03.50 "Модный приговор".
06.00 Новости.
06.40 "Улица полна неожиданностей". Комедия.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.35 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
11.15 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Аффатар жжот" (16+).
15.10 Праздничный концерт к Дню работника органов безопасности Российской Федерации.
17.30 "Русский ниндзя".
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр.
23.40 "Страна чудес". Комедия (12+).
01.10 "Ниагара". Триллер (16+).
02.55 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
04.55 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.45, 03.15 "Сам себе режиссер".
07.35, 02.45 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.05 "Перекаты судьбы". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
17.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде. Владимир Мединский" (12+).
01.25 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Детективный сериал.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00Международный художественный форум "АРТ-Уфа" (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.45 "Бабич". Худ. фильм (12+).**
**20.30 "Дознание" (16+).**
**21.00 "Бирешмә!". Сериал (12+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 UFA-FORUM (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Путешествие Гектора в поисках счастья". Худ. фильм (12+).**
**02.45 Н.Гоголь. "Женитьба" (12+).**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЭЛВИН ГРЕЙ - ӨФӨЛӘ

**Баш ҡаланың "Өфө-Арена" һарайында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Радик Юльяҡшиндың (Элвин Грей) концерты үтте. Уның башҡарыуында башҡорт, татар, рус, румын телдәрендә йырҙар яңғыраны.**



Күптәрҙең яратҡан йырсыһы тыуған республикаһында ошондай ҙур концерт менән беренсе тапҡыр сығыш яһамай. Әммә был концерт иң күп тамашасы йыйыуы менән хәтерҙәрҙә ҡаласаҡ - "Өфө-Арена" 8 мең самаһы тамашасыны һыйҙыра ала. Концертҡа килгән тамашасылар инстаграм селтәрендәге биттәрендә фотолар, видеоҙмалар менән бүлешеп һәм тамашаның 3D шоу менән башланыуы хаҡында яҙҙы. Ҡайһы берәүҙәр хатта "Өфө-Арена"ла үткән сараны Мәскәүҙең "Крокус Сити Холл" залындағы концерттар менән сағыштырҙы. Әйткәндәй, Элвин Грей милли эстрада йондоҙҙарынан тәүгеләрҙән булып ошондай ҙур зал йыйҙы. Быға тиклем "Өфө-Арена"ла боҙ шоуҙары ғына ойошторолдо, Алла Пугачева, Стас Михайлов, "Scorpions" һәм "ДДТ" төркөмдәренең концерттары уҙҙы. Төрлө мәғлүмәттәр буйынса, Элвин Грейҙың концерттарына билет хаҡтары трибунаға - 500-1700, бейеү майҙансығына - 800, фанзонаға 1200 һум тәшкил иткән.

# ШӘП АТАЙ ҘА

**Виртуоз ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов "Баш ҡалалағы иң яҡшы атай-2017" конкурсында Гран-приға лайыҡ булды. Ул иң яҡшы ғаилә традицияларын һаҡлаусы тип танылды.**



Бәйгенең беренсе этабына 44 ҡатнашыусы ғариза бирҙе, уларҙың 12-һе финал этабына үтте. Финал этабында конкурсанттар ижади сығыш - визитка, ғаилә видеоһы һәм ғаилә ҡаҙаныштары күргәҙмәһе әҙерләне. Зәйнетдиновтар ғаиләһенең ижади конкурстағы сығышы бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Гөлгөнә һәм Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтар өс бала тәрбиәләй. Уларҙың барыһы ла йырлай, бейей, музыка ҡоралдарында уйнай, төрлө фестиваль һәм конкурс лауреаттары. Ҡыҙҙары Ләйсән - Башҡорт дәүләт университеты ҡарамағындағы Иҡтисад, финанс һәм бизнес институтының дүртенсе курсында уҡый, институттың мәҙәни секторын етәкләй, студент сараларына сценарийҙар яҙа. Азамат - Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11-се класс уҡыусыһы, бейей, йырлай, ҡумыҙҙа, ҡурайҙа, гитарала һәм башҡа уйын ҡоралдарында уйнай, каратэ менән мауыға. Кесе ҡыҙҙары Илүзә Өфөнөң Киров районындағы 51-се балалар баҡсаһына йөрөй, музыкаль конкурсҭарҙа ҡатнаша һәм ҡумыҙ сиртә.

# БЕҘҘЕҢ ҠЫҘҘАР ИҢ ҺЫЛЫУЫ



**"Азия һылыуҡайы-2017" гүзәллек конкурсында беренсе вице-мисс исемен Өфөнән Регина Мөхәмәҙиева яуланы. "Башҡортостан һылыуҡайы" модель агентлығы хәбәр итеүенсә, ҡыҙ "Интернешнл һылыуҡайы", "Face of Beauty" кеүек халыҡ-ара конкурстар призеры булған 25 йәшлек Ҡытай вәкиленән генә ҡалышты.**

"Азия һылыуҡайы-2017" конкурсының беренсе вице-мисс иseme өсөн Регина матур таж, еңеүсе таҫмаһы, статуэтка, сертификат, 100 мең рупия чек һәм башҡа приздар менән бүләкләнде", - тип хәбәр иттеләр агентлыҡтан. "Азия һылыуҡайы" халыҡ-ара конкурсы Һиндостанда Ҡытай, Филиппин, Көньяҡ Корея, Малайзия, Япония, Ҡырғыҙстан, Һиндостан, Бутан кеүек илдәрҙән милли һайлап алыу турҙары еңеүселәре ҡатнашлығында үтте. Регина Мөхәмәҙиева - Башҡорт дәүләт университетының роман-герман филологияһы факультетында икенсе курсында белем ала. Инглиз һәм немец телдәрендә иркен һөйләшә. Ҡыҙ - "Башҡортостан һылыуҡайы" агентлығы моделе. Быйыл май айында Регина "Башҡортостан һылыуҡайы-2017" республика матурлыҡ конкурсында еңеү яуланы.

# СӘСӘНЛЕККӘ АРНАЛА



**Башҡортостандың баш ҡалаһында Ләйсән Золотарева ҡатнашлығында башҡорт эпостары буйынса сюжеттар төшөрөү башланды. Эпостарҙан өҙөктәрҙе башҡорт сәсәндәре традицияһын дауам итеүселәр һөйләй. Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Урал батыр" эпосы проектта айырым урынды биләй.**

Тәүге сюжеттар Башҡортостандың Милли музейында төшөрөлдө. Унда Башҡорт дәүләт университеты, Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары, Бөрйән районынан Сәлимә Ғарифуллина, Гүзәл Сырлыбаева, шулай уҡ "Рәсәй 1" каналында барған "Зәңгәр ҡош" проекты финалсыһы Ләйсән Золотарева ҡатнашты. Видеосюжеттарҙы режиссер Фәрзәнә Утарбаева ("Ҡырағай", "Дауалаусы дошманым") һәм режиссер ярҙамсыһы, оператор Азамат Тимербаев төшөрә. Алда - яңы персонаждар һәм ҡыҙыҡлы сюжеттар менән эштәр көтә. Һуңынан "Башҡорт сәсәндәре" тигән методик ҡулланма сығарыу күҙаллана.

# БАШҠОРТ ЙЫРЫ




**Өфөлә йыл һайын уҙғарылып килгән "Башҡорт йыры-2017" фестиваленең еңеүселәре иғлан ителде. Йәш башҡарыусылар Гөлнара Вәлиева һәм Алмас Хөсәйенов башҡорт эстрада йыры телевизион фестиваль-конкурсы Гран-приһын яуланы.**

Гөлнара Вәлиева - Башҡорт опера һәм балет театры йырсыһы, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтында Фәрзәнә Сәғитованың класын тамамлаған. Алмас Хөсәйенов - сығышы менән Сибай ҡалаһынан, Өфө сәнғәт институтының вокал бүлегендә беренсе курста уҡый. "Был проектта ҡатнашыуым өсөн бик бәхетлемен. Халыҡ йырҙарын башҡарыу кешене ысын йырсы итә, - тине Алмас Хөсәйенов. - Проект артабан да булһын һәм үҫешһен ине!". Зөбәйҙә Ҡоломбәтова - "Ышаныс", Фәнәғәт Юлмөхәмәтов - "Йолаларҙы тергеҙеү", Лев Ҡолошев "Тамашасы һөйөүе" номинацияларында бүләкләнде. Зәлиә Нурлы, Айҙар Рәкипов, Илдар Әбдрәшитов, Юнир Ҡолонбаев, Альбина Фәйзуллина, Айгизә Иҫханова лауреаттар булды. Конкурс менән бер рәттән, "Башҡорт йыры" ойоштороу комитеты "Хит-парад" проекты сиктәрендә башҡорт телендә иң яҡшы йырҙы билдәләүгә тауыш биреү үткәрҙе. Хит-парадта Радик Юльяҡшин иң күп тауыш йыйҙы. Еңеүселәргә дипломдар һәм статуэткалар, шулай уҡ "Яктыкүл" шифаханаһына юллама һәм "Ҡурай" телеканалында клип төшөрөүгә 30 мең һумлыҡ сертификат тапшырылды. Проект етәксеһе Рита Өмөтбаева хәбәр итеүенсә, башҡорт йырының мәңгелеген символлаштырған һындар йәшмәнән, көмөштән һәм мәрмәрҙән эшләнгән.

# ЙӘШТӘР АРАҺЫНДА ИҢ-ИНДӘР

**Өфөлә "Йәшлек-шоу" республика йәштәр фестивале еңеүселәре билдәләнде. Быйыл 25-се тапҡыр ойошторолған фестивалдең Гала-концерты "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтте.**



Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институты студенты Ләйсән Ғәлимова Гран-приға лайыҡ булды. Ләйсән эстрада-джаз вокал бүлегендә уҡый. RNT - "Йыл йырсыһы", TIMUR - "Йыл асышы", Элвин Грейҙың (Радик Юльякшин) Өфөләге концерты - йыл сараһы, Анжелика Якусева - "Йыл алға китеше" номинацияларында билдәләнде. Радик Юльяҡшин сарала үҙе ҡатнаша алманы, Анжелика Якусева махсус рәүештә Мәскәүҙән килде, унда ул соло карьераһы өҫтөндә эшләй. "Бирешмә" төркөмө - беренсе, Нәғим Шәрипов - икенсе, Риана Хәлимова өсөнсө урын яуланы.

# ЕЛ ТЫУҘЫРҒАН МОҢ



**Башҡортостандың баш ҡалаһында I "Ел тыуҙырған моң" халыҡ-ара этник тынлы инструменттар фестивале тамамланды. Сара Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында өс көн дауамында барҙы. Гала-концертта фестивалдә ҡатнашыусылар дипломдар һәм башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы - ҡурай менән бүләкләнде.**

Фестивалдең Гала-концертында Монголиянан күп кенә музыка ҡоралдарын бороңғо технология буйынса үҙ ҡулдары менән яһаусы музыкант Нямжанцан Галсанжамцын, Молдова Республикаһынан төрлө конкурстар лауреаты Игорь Подгоряну, Ҡырғыҙстандан чопо чоор, һыбыҙғы, чогойно чоор, темир ооз комуз, жыгач ооз комуз кеүек музыка ҡоралдарында уйнаусы Толгонай Осмонова, Ҡаҙағстандан һыбыҙғы, саз сырнай, жетеген уйын ҡоралдарында уйнаусы Ауылым Ҡонанбаева, Үзбәкстандан һуҡма музыка ҡоралы - сов дойра һәм кошнай халыҡ уйын ҡоралында уйнаусы Фәрхәд Бабаназаров менән Ровшанджон Юнысов, Норвегиянан Леонид Ларионов сығыш яһаны. Башҡортостандан Линар Дәүләтбаев етәкселегендәге БР Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, ҡурайсы Азат Айытҡолов, "Арғымаҡ", "Сураман" этно төркөмдәре, Башҡорт дәүләт филармонияһының ҡурайсылар ансамбле, Заһир Зәйнетдинов, Полина Кобец һәм "Узорица" фольклор ансамбле ҡатнашты.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел әүүәл - Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (29) дүшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (1) шишәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (2) шаршамбы | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (3) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (4) йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (5) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 24 (6) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

АФАРИН!

# САФ ЕЛ КЕҮЕК БУЛДЫЛАР

**Сибай концерт-театр берекмәһенең, йәки, өйрәнгәнсә, филармонияһының халыҡсанлығы хаҡында бығаса тиклем дә яҙҙылар һәм бынан һуң да яҙырҙар. Әммә улар сығышындағы ҡайһы бер нәмәләр тураһында ҡат-ҡат ҡабатлап торғанда ла яҙыҡ булмаç, тип уйлайым.**

Мәҫәлән, үткән аҙнала баш ҡалаға алып килгән "Уйнаһын ғына гармундар, тынмаһын ҡурай моңо" исемле концерт программаһын ғына алайыҡ. Бер яҡтан ҡарағанда, ял итергә килгән киске мәл өсөн рухлылыҡ, тарихилыҡ менән һуғарылған сараны ҡарау ауыр ҙа кеүек. Әммә бөтөн был күренештәр ысын ихласлыҡ менән бирелеп, тамашасы тарафынан да шундай уҡ реакцияны уята алды.

"Халыҡсанлыҡ, халыҡсанлыҡ" тибеҙ, ә "халыҡсанлыҡ" тигән төшөнсә нимәлә сағыла һуң сибайҙарҙа? Минең ҡарамаҡҡа, улар ябай һәм ваҡ деталдәрҙә күренә. Мәҫәлән, бейеүселәрҙең бер тигеҙ һәм бер төҫтә булмауында. Юғиһә, башҡа ансамблдәрҙә бер магазинда һатылған ҡурсаҡтар кеүек, бер иш йөҙҙәрҙе күҙәтеү ҙә ялҡыта. Ә бында һәр бейеүсенең үҙ мимикаһы, үҙ фигеле. Бер үк бейеүҙә лә һәр береһе айырым роль башҡарып йөрөгәндәй. Һәм бейеүҙәре лә сюжетка, композицияға ҡоролоп, мини спектакль тәшкил итә һымаҡ. Күптәрҙең аңында формалашҡан бейеүселәрҙең стандарт формалары хаҡындағы ҡалыпты ла емереп ташлай сибайҙар. Был, бәлки, сәнғәттең был төрө ҡағиҙәләренә тап килмәйҙер ҙә, әммә халыҡ тарафынан йылы ҡабул ителә бит. Бөгөнгө тамашасыны һомғоллоҡ менән дә, матурлыҡ менән дә арбап булмай инде, уны эске тулылыҡ күберәк ҡыҙыҡһындыра. Тап бына ошо талапты ҡәнәғәтләндерә лә инде ҡунаҡтарҙың сығышы.

Унан килә, бер йырсы ла фонограмма йырламаны. Гармунсы менән ҡурайсының йырсының тынына, тауыш бөгөлөштәренә эйәреп, бер-береһен тойоп, "аралашып" тороуҙарын күҙәтеп ултырыу үҙе бер ләззәт бирә икән. Аранжировкалары ла артыҡ-боҫтоҡ менән тултырылмаған. Ошо урында был темаға ҡағылышлы теләгемде лә белгертеп киткем килә. Хәҙерге аранжировкалаусылар көйҙө шул ҡәҙәре һуҙа, йырсының йырлай башлағанына тиклем һәм һуңғы ауазынан һуң әллә күпме ваҡыт сараһыҙҙан көй тыңлап ултырырға тура килә. Был бушлыҡты тултырыу өсөн тырышҡан артистар сәхнәлә булдыра алған тиклем "кыбырларға" мәжбүр. Унан ҡала, күплеттар араһында икенсе, өсөнсө тауыштарҙың килеп ҡушылыуы ла йырға биҙәк түгел. Тамашасыны ошондай унайһыҙлыҡтарҙан да ҡотолдорҙо был концерт. Шулай уҡ енел-елпе, мәғәнәһеҙ йырҙар булмауы ла ҙур плюс булды. Кешенең эсе нимә менән тулған, уның ауыҙынан да шул сыға, ти бит әйтем дә. Шуның кеүек, йырсы ла, эске донъяһының тәрәнлеге лә, кимәле лә уның тамашасы ҡолағын ниндәй иждад менән ирҡәләүенән ғибәрәт. Юғиһә, халыҡсанлыҡты халыҡ йырҙарында ғына күреп китәләр. Асылда, эстрада йырҙарын да, ретро һәм башҡаларҙы ла халыҡсан башҡарып була икәнде белгертте сибайҙар.

Тағы ла бер нәмә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Ул да булһа - йырсы ир-егеттәрҙең барыһының да ҡурайҙа уйнауы. Улар берәү-икәү генә түгел, ә тиҫтәгә яҡын инеләр. Йырсының шул уҡ ваҡытта ҡурайсы ла булыуы, уның сәхнәгә шул музыка ҡоралы менән сығып, бер ваҡытта бер-нисә функция башҡара алыуы үҙе үк уны ҡалыплашҡан форманан ситләштерә. Ул бер йыр эсендә генә түгел, ә дөйөм уйын, тамаша эсендә. Айырым бер башҡарыусыла был күҙгә лә салынып бармаҫ, ә тотош филармония йырсыларының сығышында иһә быны аңғармау мөмкин түгел. Һәм, бына, һеҙгә халыҡсанлыҡтың тағы ла бер күренеше.

Костюмдар хаҡында ла һөйләшеп ултырҙыҡ. "А-ай, күлдәктәре!" тигән шыбырлауҙарҙы ишетмәү ҙә мөмкин түгел ине залда. Зауыҡлы, ябай ине костюмдар бейеүселәрҙә лә, йырсыларҙа ла, музыканттарҙа ла. Кейем менән шаҡ ҡатырырға теләмәгәндәре күренеп тора. Ә бына һәләттәре, ихласлыҡтары һәм халыҡсанлыҡтары менән һоҡландырҙылар. Артыҡ ҡалыплашҡан, хатта ки артыҡ модалы булып киткән шоуҙар һәм эстрада йондоҙҙары концерттары менән лыҡа тулы булған тынсыу һауабыҙға бер саф ел, сасҡау һулыш килеп ингән шикелле булды. Афарин, сибайҙар!

**Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АСЫҠ ДОШМАН...

## йәшерен дошмандан хәйерле

Яу килә, тип, аҙығыңды бөтөрмә, ил күсә, тип, утыңды һүндермә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлекте белдекле булғаны өсөн тиргәйҙәр, йәнәһе, донъя унан башланған. Ләкин ҡартлыҡ та донъя уның менән бергә бөтә, тип уйлай бит.

**(Кристиан Геббель).**

Йәшлек белгән булһа икән! Ҡартлыҡ булдыра алһа икән!

**(Анри Этьен).**

Үҙеңең өнһөҙлөгө менән минең фекерләүҙәремде бүлдергән әңгәмәселәрҙе йәнем һөймәй.

**(Лешек Кумор).**

Ахмаҡ та өнһөҙ саҡта аҡыллы булып күренә ала.

**(Халыҡ мәҡәле).**

Өнһөҙ кеше бик һирәк яңылыша, унда ла өндәшкән саҡта.

**(Владислав Гжещик).**

Ҡурҡыу кешене ҡыйыуыраҡ итә.

**(Латин халыҡ мәҡәле).**

Бөтә ирҙәр ҙә бер төрлө, тик... эш хаҡтары ғына төрлөсә.

**(Михаил Аршевский).**

Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер кисәк кенә лә ер юҡ.

**(Ансельм Грюн).**

Ысын ял - ул байрам итеү түгел, ә шөғөлдәрҙе генә алыштырыу.

**(Иван Сеченов).**

Тәрбиәләү парадоксы шул: тәрбиәгә уға мохтаж булмағандар тиҙерәк бирелә.

**(Фазил Искәндәр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Аллаһы Тәғәлә кешене барлыҡҡа килтергәндән һуң, уны яһаған материал - балсыҡ артып ҡала.**

**- Ошо артып ҡалған балсыҡтан тағы нимә яһарға һуң һиңә? - тип һорай Аллаһ кешенән.**

**- Бәхет, бәхет яһап бир! - тип шатланып ҡысҡырған кеше.**

**Аллаһ бер ни ҙә өндәшмәйенсә генә ҡалған балсыҡты кешенең үҙенең ҡулына тоттороп киткән... "**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Белорет ҡалаһынан** Фәниә Түләбаева, **Туймазы ҡалаһынан** Клара Гиззәтуллина, **Баймаҡ ҡалаһынан** Хөрмә Биктимерова, **Дәүләкән районы** Чапай ауылынан Фәнүр Лотфрахманов, **Баймаҡ районы** Нигмәт ауылынан Ф. Мөхәмәтшина, З. Волошина, **Әбйәлил районы** Юлдаш ауылынан Рәсимә Ғәбәйҙуллина, Баймаҡ ауылынан Мәүлидә Сөнәғәтова, Мәрзиә Юламанова, **Мәләүеҙ ҡалаһынан** Нурзиә Ишмөхәмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Һәйһәнәстәргә тулы бәхетле ғүмер, ҡаҡшамаҫ ныҡлы һаулыҡ, өмөттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын теләйбеҙ. Йөрәгегеҙҙән дәрт-дарман, беләгегеҙҙән көс-ғәйрәт ҡайтмаһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 декабрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**17 декабрь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт 0+
**19 декабрь "Золотая кӱҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**21 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 12.00 0+
**22 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 10.30 0+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20-22 декабрь "Щелкунчик"** (Н. Соболева), Яңы йыл әкиәте. Башлана 10.30, 13.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16 декабрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+
**17 декабрь "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+ Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2550/12